ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

2-8 май (һабанай) 2015

№ 18 (644)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Баһалар алыу күңелле,** уны аҡларға ла кәрәк бит



2

**"Ҡыҙыл атлылар" -** Башҡорт кавалерия дивизияһының пропаганда ҡоралы



7

**Уңыш алыр өсөн...** орлоҡ сәсергә кәрәк



8-9

**Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың...** һуғыш яланындағы ҡаһарманлығы тураһында



12-13

**Әйтеш** 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Әле 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы тураһында алдан хәстәрләп, "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 1 май – Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы икәнен иҫтә тотоп, замандаштарҙан хеҙмәт тәрбиәһе тураһында бер кәлимә һүҙ әйттерәйек әле...




***Фәйез ЙОРТОМБАЕВ, Архангел район Советы секретары:*** Ауыл малайҙарымы һуң инде эш белмәй үҫкәндәр! Һәр хәлдә, мин үҙем 5-6-сы кластан колхозға бесән әҙерләүҙә ҡатнаша башланым. Ул саҡ әле күп эштәрҙә ҡул хеҙмәте талап ителә ине. Хәҙер генә ул шәхси хужалыҡтар ҙа хатта техникалы булып бөттө. Беҙ, мәктәп уҡыусылары, һәнәктырма тотоп, бесән йыйырға йөрөнөк, күбә күбәләнек, сенаж тейәнек, силос һалыуҙа ҡатнаша инек. Аҙаҡ, үҫә төшкәс, Белорет медучилищеһында уҡып йөрөгән йылдарҙа бесәнгә ҡул салғыһы тотоп сыға башланым. Йәйҙең йәмле көндәре ана шулай ҡыҙыу эш менән үтеп китә ине. Күп балалы ғаиләлә үҫкәс, йорт-хужалыҡ эштәрен дә күмәкләшеп башҡара инек. Әлеге ваҡытта ҡатыным Әлфиә Йыһанур ҡыҙы менән 3 ҡыҙ үҫтерәбеҙ - шулай уҡ бөтә эштәрҙе бергәләп эшләйбеҙ. Күңеллерәк тә, балаларға ла ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлатып, күрһәтеп бирергә мөмкинлек була. Юғиһә, ҡайһы бер ата-әсә балаһына эш ҡуша ла, ҡалғаны менән ҡыҙыҡһынмай. Мөмкинлек булғанда, улар менән бергәләшеп эшләүгә етмәй. Ә эш етерлек: баҡса үҫтерәбеҙ, йәшелсә, емеш-еләк үҙебеҙҙеке. Теплица тотабыҙ, ҡош-ҡорт аҫырайбыҙ. Еләгебеҙ бик уңа. Эре, һутлы еләктәребеҙҙе күргән һәр кем, ниндәй сорт үҫтерәһегеҙ, тигән һорауҙы бирмәй ҡалмай. "Хеҙмәт" тигән сорт", тип яуаплайым уларға уйынлы-ысынлы. Ысынлап та, хеҙмәт, тир түкмәй, уңыш булмай. Еләк культураһы айырыуса тырышлыҡ талап итә: ерен йомшартаһың, ашлайһың, "мыйыҡ"тарын ҡырҡаһың, утайһың, һыу һибәһең... Шунан ғына хуш еҫле еләк ашайһың. Байрамға ҡаланан балалар ҡайта, бер ейәнебеҙ үҫеп килә. Ул да ауыл тормошон, хеҙмәттең ни икәнен күреп үҫә. Балалар ҡунаҡ булыр өсөн генә түгел, күбеһенсә ярҙамлашыр өсөн ҡайта. Бергәләшеп тиҙ генә һарыҡ йөнө ҡырҡып алабыҙ, унан инде шашлыҡ бешереп, самауыр ҡайнатып, ял итергә лә форсат тыуа. Хеҙмәттән йәм табып йәшәй белгәндә генә ул күңел байрамына әүерелә.

***Мәүлиҙә САБИРЙӘНОВА, уҡытыусы:*** Ҡала балаларын йыш ҡына ялҡаулыҡта ғәйепләйҙәр. Бар, әлбиттә, ундай ғаиләләр ҙә, ләкин был балаларҙан бигерәк ата-әсә ғәйебе икәнлекте онотмайыҡ. Ҡала шарттарында ла бына тигән эшсән, ярҙамсыл бала тәрбиәләргә була. Был үҙем етәкселек иткән класс уҡыусылары миҫалында ла асыҡ күренеп тора.

***Ата-әсәләр йыйылышында күпселек ата-әсә хәҙер балаларының класта дежурлыҡ итеп, айына бер тапҡыр иҙән йыуыуына ла ҡаршы бит хатта. Бының өсөн йыйыштырыусыға аҡса түләргә лә ризалар, тик балаһы ғына эшләмәһен. Ҡыҙыҡ, ә өйөндә ни эшләй икән улар?***

Малайҙар - буласаҡ һалдаттар, ә армияла был эштән аҡса түләп кенә ҡотолоп булмай бит. Эшләгәне мәктәп өсөн булһа ла, өйрәнә торғаны үҙе өсөн файҙалы булыр ине, тием шуға күрә. Үҙебеҙҙең ғаиләлә лә ул үҫтерәбеҙ, ләкин хеҙмәт тәрбиәһен үҙ ағышына ҡуймаҫҡа тырышабыҙ. Ярай ҙа бының өсөн "тәжрибә майҙансығы" - баҡсабыҙ бар. Атаһы унда бәләкәй генә булһа ла өй күтәрә башланы. Бер үҙе түгел - улыбыҙ менән, әлбиттә. Өй һалыуҙың бөтөн этаптарын үҙ ҡулдары, үҙ көстәре менән башҡаралар. Ауыл балаһы булараҡ, иремә бик яҡшы таныш был эш: мәктәптә уҡып йөрөгән йылдарында ул атаһы һәм ағайҙары менән үҙҙәренә яңы йорт күтәреп ингәндәр, унан өлкән ағаһына өй һалып, башҡаландырғандар. Улым да, ҡыуаныҫҡа күрә, бик мауығып китте был эш менән, хатта буласаҡ йорттоң чертежын да үҙе һыҙҙы. Киләсәктә һөнәрҙе архитектура йүнәлешендә һайларға ҡарар итеүе лә тап ошо бәләкәй генә тәжрибә участкаһынан башланды.

***Фәйзрахман ИШКИЛДИН, хеҙмәт ветераны:*** Был һорауығыҙға мин бер аҙ уратыбыраҡ яуап бирмәксемен. Ахыр сиктә, мәсьәләнең асылы шул бер үк төшөнсәгә - хеҙмәт һөйөүсәнлек сифатына барып тоташа бит. Рәсәй граждандарының хеҙмәткә хоҡуғы ил Конституцияһы менән нығытылған. Совет заманында ла ул шулай ине. Ғөмүмән, ул йылдарҙа эшһеҙлек тигән нәмә булманы. Булған хәлдә лә бик һирәк күренеш ине. Дөрөҫөрәге, эшләйем, тигән кешенең ике ҡулына һәр саҡ эше булды. Ә бына шуға ҡарамайынса, эшләмәй ятҡан тунеядецтар, әрәмтамаҡлыҡта ғәйепләнеп, енәйәт яуаплылығына тарттырыла ине. Бөгөн иһә хәл башҡасараҡ тора. Эшһеҙлек күренешенә беҙ шул тиклем тиҙ өйрәндек, уға гәжәпләнгән, аптыраған, көйгән кеше лә юҡ һымаҡ. Айырыуса йәш быуын аңында эшләмәй ятыуҙы ғәҙәти хәл тип ҡабул итеү нормаға әүерелде. Рәсми статистика буйынса,

***Рәсәйҙә бөгөнгө көндә эшкә һәләтле 18 миллион кеше эшләмәй. Бер яҡтан, быны аңларға ла була: ҡырағай баҙар шарттары күнегелгән ҡалыптарҙы ғына түгел, байтаҡ кеше яҙмыштарын да һындырып, тормоштоң аҫтын-өҫкә килтерҙе, йәмғиәтебеҙ үҙенең күп кенә позитив йүнәлештәренән ҡолаҡ ҡаҡты.***

Шул иҫәптән, беҙҙең күп кенә граждандар кешене кеше итеп йәшәтеүсе хеҙмәт хоҡуғынан мәхрүм ителде. Йәш быуын аңында иһә хеҙмәт төшөнсәһе үҙ абруйын юғалтты. Был һынау шулай ҙа балаларын эш һөйөүсән, тырыш һәм ныҡышмал итеп тәрбиәләгән ғаиләләрҙе урап үтте, минеңсә. Эшенән яҙғандар ҡабаттан аяҡҡа баҫа һалып, эшен дә тапты, яңы шарттарға яраҡлашып, балаларына ла кәрәкле һөнәр йүнәлеше бирә алды. Быны менән ни әйтергә теләйем? Ниндәй генә шарттарҙа булмаһын, ике ҡулыңа эш табырға була, ә бына заман һынауҙарын сәбәп итеп, әрәмтамаҡҡа әүерелеү - ул, тимәк, кешелек сифатынан яҙыу, тигән һүҙ. Быңдай тиҫкәре социаль күренешкә сик ҡуймаҡсылар, тигән хәбәр ишетеп, ҡыуанып торам әле бына. Илдә әрәмтамаҡлыҡҡа ҡаршы яза сараларын тергеҙеү мәсьәләһе Дәүләт Думаһы депутаттары ҡарауына сығарыласаҡ, имеш. Кеше елкәһендә ятып, буйтым рәхәткә сыҡҡан әрәмтамаҡлыҡтың ярайһы ныҡ таралып өлгөргән тамырҙарын юллап бөтөрә алһалар, әлбиттә. Сираттағы яңғырауыҡ кампания ғына булмаһа ине лә бит...

Фәүзиә **МӨХӘМӘТШИНА** яҙып алды.

12+

✓ *Беҙ ҡул күтәрергә йыйынмайбыҙ. Ниндәй генә ауыр шарттарҙа ла сифатлы матбуғат баҫмаһы юҡҡа сыҡмаясаҡ һәм уға мохтажлыҡ кәмемәйәсәк. Ә интернет бер ваҡытта ла ҡағыҙ баҫмаларға етди конкурент була алмаясаҡ.*



БЫЛ АЙҘА...

# ЕҢЕҮҘӘР МИҘГЕЛЕ



**Иң көләс, сыуаҡ айҙарҙың берене ул май. Уның тәүге көнө үк байрам менән башланғаны өсөн генә түгел. Ниһайәт, көндәр йылынып, донъялар йәшәреп, ләйсән ямғырҙар һибәләй башлауы менән дә.**

Майҙың тәүге көнөн иҫ белә башлағандан Халыҡ-ара хеҙмәттәшлек көнө тип йөрөтһәк тә, үткән быуаттың 90-сы йылдарынан был байрамдың сәйәси йөкмәткеһе икенсе планға күсеп, хәҙер ул **Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы** булараҡ билдәләнә. Бәхетләнең байрамы - бер юлы, тигәндәй, тап **1 майҙа** Бөрйән районы "Таң" гәзите нәшер ителә башлауға 80 йыл тула икән. Унда эшләгән талантлы, әүҙем ҡәләмдәштәребеҙҙе ихлас ҡотлайбыҙ, тағы ла илһамлыраҡ ижад үрҙәре теләйбеҙ. Әйткәндәй, **3 май** журналистар өсөн тағы ла бер иҫтәлекле дата - Бөтөн донъя ирекле матбуғат көнө билдәләнә. Ҡағыҙә буларак, был һүҙ азатлығы өсөн ҡорбан булған журналистарҙы иҫкә алыу көнө тип нарыҡлана.

**2 майҙа** совет ғәскәрҙәренең фашистик Германияның баш ҡалаһы Берлинды алыуына 70 йыл тула. Рейхстагҡа Еңеү байрағы ҡаҙаған көндән (30 апрель, 1945) һуң да әле Берлиндың һәр урамы, һәр бинаһы өсөн ҡаты һуғыштар дауам итә. Үҙ өңөндә эт тә көслө, тигәндәй, гитлерсылар аҡтыҡ көстәрен туплап, аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә. Фашист идеологияһының фанатиклығы шул сиккә барып етә: Берлинды һаҡлау маҡсатында Беренсе донъя һуғышының ҡарт ветерандарын һәм 14-15 йәшлек үсмерҙәрҙе лә ҡулдарына ҡорал тотторол, урамға сығырға мәжбүр итә дошман. Ниһайәт, ике көнгә һуҙылған ҡаты һуғыштарҙан һуң 2 майҙа Берлин гарнизоны ғәскәренең ҡалдыҡтары булған 134 мең немец һалдаты әсирлеккә бирелә.

**7 май** - электән килгән йола буйынса, Радио һәм бөтә төр элемтә тармаҡтары эшсәндәре көнө.

...Ҡасан ғына әле ул бик алыҫ, офоҡтар арьяғында һымаҡ булып тойолһа ла, йөрәктәрҙән йөрәктәргә күсә-күсә, һағышлы юғалтыуҙар аша булһа ла яҡынайғандан-яҡыная барып, ниһайәт, беҙҙең көндәргә лә килеп етте Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы - сиҡәләргә сал йүгертеп, күҙҙәрҙе йәшләндергән, яҡтыны менән миллионлаған бәғерҙәрҙе өткән һәм бик-бик көткән көн. **9 май** илебеҙ йөрәге Мәскәүҙә, Ҡыҙыл майҙанда Советтар Союзының Бөйөк Еңеүенең 70 йыллығы айҡанлы юбилей хәрби парады үткәреләсәк. Ул дәүләтебеҙҙең яңы тарихы осорондағы иң күләмле һәм онотолмаҫ ваҡиға буласаҡ, тип көтөлә. Тантаналы парадтар шулай уҡ бөтөн Герой-ҡалаларҙа һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа ла үткәреләсәк.

Артабан Бөтөн донъя шәфҡәт туташтары (**12 май**), Халыҡ-ара ғаилә (**15**), Халыҡ-ара музейҙар (**18**), Дөйөм Рәсәй китапханалар (**27**), Ил сиге һаҡсылары (**28**), Химик (**31**) һәм Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ (**31**) көндәр билдәләнәсәк. **15 майҙа** шулай уҡ 1755-1756 йылғы башҡорт ихтилалы башланыуға 260 йыл тула, тип хәбәр итә тарихсылар.

Был күркәм айҙа тыуған юбилярҙарҙы ла телгә алып китеү фарыҙ, сөнки республикабыҙ мәнфәғәтендә барлыҡ йөрәк яҡтынын һәм иждиһатын һалып эшләүсе күренекле халыҡ уҙамандары улар: журналист һәм яҙыусы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, "Ватандаш" журналының баш мөхәррир урынбаҫары Сәлимйән Бәҙретдинов - 65 йәшен (3 май), философия фәндәре докторы, БДМУ профессоры Дамир Азаматов - 75 (5 май), биология фәндәре докторы, профессор, Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры Әмир Ишемғолов - 55 (22 май), журналист һәм яҙыусы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Дамир Шәрәфетдинов 50 (29 май) йәшлек юбилейҙарын билдәләйәсәк.

Ғүмер байрамдары данлы һәм дә нурлы айға тап килгән был яҙылыларыбыҙҙы ихлас тәбрикләп, уларға сәләмәтлек, ғаилә бәхете һәм ижад ҡомары теләйбеҙ!

ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА

# БАҺАЛАР АЛЫУ КҮҢЕЛЛЕ,

## уны аҡларға ла кәрәк бит

**Беҙҙең киң мәғлүмәт саралары майҙанында ла төрлө конкурстар, бәйгеләр үтеп тора ул. Теләһә ниндәй бәйгелә йөҙ ҡыҙартмай торған урын яуларға, хаҡлы баһаланырға мөмкинлегебеҙ бар. Ләкин беҙҙең өсөн иң ҡиммәтлеһе барыбер ҙә уҡыусыларыбыҙ баһаһы икәнен тағы бер тапҡыр әйтеп ҡуйыйыҡ әле.**




Ә шулай ҙа быйыл конкурстарҙың иң мәртәбәлеһе булған "Матбуғаттың алтын фонды" (Золотой фонд прессы") проектында ҡатнашыу мөмкинлегеен файҙаланырға булдыҡ. Ул "Журналист" нәшриәт йортонон РФ Федераль Йыйылыш Федерацияһы Советы, РФ Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡ ярҙамында ойошторолған, сифатлы һәм ижтимағи яҡтан әһәмиәтле киң мәғлүмәт сараларын билдәләүсе Рәсәй кимәлендәге конкурс. Унда ҡатнашыусылар проекттың Отличие билдәһе, Танытмаһы менән бүләкләнә. Ниһайәт, беҙҙең "Киске Өфө" гәзите лә ошо бүләктәргә лайыҡ булды. Беҙ һәр ваҡыт сифатлы баҫма ижад итергә ынтылдыҡ һәм был бүләк ошо ынтылышыбыҙға бер бәләкәй генә баһа булды шикелле.

Конкурста еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы сиктәрендә был юлы "Рәсәйҙең сифатлы матбуғаты һәм уның үсеш перспективалары" тип аталған 5-се Эшлекле форум үтте. Форум эшендә федераль һәм төбәк киң мәғлүмәт саралары етәкселәре, Дәүләт Думаһы, РФ субъекттары министрлыҡтары һәм департаменттары, Рәсәй журналистар союзы, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, медиаэксперттар ҡатнашты. Бөгөнгө ябай булмаған шарттарҙа гәзит-журналдарҙы нисек һаҡлап ҡалырға, "Рәсәй почтаһы" менән хеҙмәттәшлек өлкәһендәге ҡатмарлыҡтарҙы нисек хәл итергә - дөйөм алғанда, ошолар тураһында һүҙ барҙы форумда. Редакцияларҙа штаттар ҡыҫҡарыу арҡаһында урамда ҡаласаҡ 60 меңләп хеҙмәткәрҙең эшһыҙ тураһында борсолоу белдерелде. Журналист һөнәренең абруйын ҡайтарыу тураһында ла һәр сығышта ниндәйҙер фекерҙәр яңғыраны. "Журналист" журналының баш мөхәррире Геннадий Мальцевтың сығышында ошо юҫыҡта бына нимәләр һыҙыҡ өҫтөнә алынды:"Социологтар тикшереү үткәреп, 2020-2030 йылдарҙа кәрәкмәгәндәр рәтенә инәсәк профессияларҙы асыҡлаған, - тине Геннадий Петрович. - Нотариус, риэлтер, банк операциялары хеҙмәткәре рәтендә журналист та ана шундай кәрәкмәгән интеллектуаль һөнәрҙәр реестрына инә. Беҙ быны теләмәйбеҙ. Тимәк, бөгөн һәр уҡыусы өсөн көрәшергә, уларҙы үҙебеҙгә нығыраҡ ылыҡтырырға тейешбеҙ. Журналист оҫталығы конкурстары, "Матбуғаттың алтын фонды"конкурсы уларҙың иң абруйлыһы, әлбиттә, ошо маҡсатҡа йүнәлдерелгән дә инде. Ә был бәйгелә иң яҡшылар еңә. Улар күп булырға тейеш. Шуның өсөн, һинә өндәшәм, коллега: намыҫлы бул, ҡыҙыҡлы, стандарт булмаған фекерҙәр ҡор, хәҡиҡәткә хеҙмәт ит - ул саҡта уҡыусылар һинә үҙенән-үҙе ылыҡыр..."

Аҫыл һүҙҙәр. Ғөмүмән, бер майҙанда тир түккән, бер маҡсатҡа хеҙмәт иткән бер һөнәр кешеләренең үҙ-ара аралашыуы һәр ваҡыт күңелле генә түгел, файҙалы ла. Был юлы ла төрлө баҫмалар етәкселәре, билдәле журналистарҙың һөйләгәндәрен тыңлау күп нәмәгә күҙҙәрҙе асҡандай булды. Рәсәй ҙур ил, әммә матбуғат баҙарындағы проблемалар бер төрлө. Хәҙер беҙҙе бигерәк тә матбуғат таратыуҙағы ҡатмарлыҡтар, электрон баҫмалар менән конкуренция баҫып алып бара. Әммә беҙ ҡул күтәрергә йыйынмайбыҙ. Сөнки беҙ шуға ышанабыҙ: ниндәй генә ауыр шарттарҙа ла сифатлы матбуғат баҫмаһы юҡҡа сыҡмаясаҡ һәм уға мохтажлыҡ кәмемәйәсәк. Ә интернет бер ваҡытта ла ҡағыҙ баҫмаларға етди конкурент була алмаясаҡ. Форумда сығыш яһаусыларҙан кемдер берәү әйтмешләй, "...интернет бит ул оло суп соҡоро, унда ниндәй генә буш хәбәрҙәр урын алмай. Ҡағыҙ баҫмалар яҡшы аналитика урынлаштырып булыуы менән яҡшы. Унда ваҡиғалар һүрәтләнеп кенә ҡалмай, оло бер контекста аңлатыла. Ҡағыҙ баҫмаларҙа авторҙы, интернет-сми, блоггары кеүек, ниндәйҙер мыҫҡыллауҙар һәм ялған ғәйепләүҙәр менән өркөтәп ҡуймайҙар. Интернеттағы комментарийҙарға ҡарағыҙ әле: быҫраҡ һыу менән ҡойондоралар бит. Был, әлбиттә, милләтте биҙәмәй. Ә гәзиттәр барыбер ҙә ысынбарлыҡҡа аңлап бағыу мөмкинлеге бирә һәм халыҡта мәҙәни кимәл тәрбиәләй".

Бына шулай, "Матбуғаттың алтын фонды"проектында ҡатнашып, Отличие билдәһе лә алдыҡ, әллә күпме мәғлүмәткә лә байыныҡ был форум барышында. Һәр хәлдә, беҙҙең кеүек төбәк журналистары өсөн әлеге форум кимәлендәге аралашыу саф һауа һулаған кеүек булды.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың Фәндәр академияһы президенты Рәмил Бәхтизин һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге рәйесе Усеин Джемилев менән кәңәшмә уҙғарҙы. Кәңәшмә Башҡортостандың фәнни комплексын камиллаштырыу һәм үҫтереү, шулай уҡ фәнни институттарҙы республика иҡтисадын яңыртыу буйынса проекттарҙы ғәмәлгә ашырыуға йәлеп итеү мәсьәләләренә арналды. Бынан тыш, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Фән буйынса совет булдырыу темаһы тикшерелде

✓РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Президенттың 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына бәйле амнистия иғлан итеү тураһындағы ҡарарын бер тауыштан хупланы. ТАСС мәғлүмәттәре буйынса, амнистияға 60 мең самаһы иркенән мәхрүм ителеүселәр һәм 200 меңгә яҡын шартлы рәүештә хөкөм ителеүселәр эләгергә мөмкин.

✓Башҡортостанда сәсеү кампанияһы башланды. Тәүгеләрҙән булып Әбйәлил, Әлшәй, Ғафури һәм Хәйбулла райондары эшсәндәре иген һәм ҡуҙаҡлылар сәсеүгә төштө. Уларҙа яҙғы сәсеү эштәре 600 гектарҙан ашыу майҙанда башҡарылған да инде. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл Башҡортостанда сәсеү майҙаны 3,15 миллион гектарҙы тәшкил итәсәк.

✓1 майҙан 20 июлгә тиклем Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, 1 майҙан 11-нә тиклем халыҡтың ял итеү урындарында патруллек итеү, янғын хәүефһеҙлеге өлкәһендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙы бөтөрөү маҡсатында янғын һағы, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре, янғынға ҡаршы ирекле отряд ағзалары һәм урындағы үҙидара органдары вәкилдәре составында күсмә төркөмдәр ойоштоголасаҡ.

✓Майҙа байрамдарҙың һәм ял көндәренең күп булыуына бәйле, май айына берҙәм социаль юл йөрөү билетын апрелдә тулыландырыу яҡшыраҡ, тип хәбәр иттеләр "Башҡортостан социаль карталар регистры" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенән. 1 һәм 9 майҙа "Рәсәй почтаһы"ндағы юл йөрөү билеттарын тулыландырыу пункттары эшләмәй, башҡа көндәрҙә улар билдәләнгән график буйынса хеҙмәтләндерәсәк.

✓ *Һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәһендә һыҡмырланыу, булғанды юҡҡа сығарыу, ябыу һәм ҡыҫҡартыу юлы менән генә һау-сәләмәт, төплө белемле, иртәгәһенә яҡты ышаныс менән баҡҡан киләсәк тәрбиәләү мөмкин булмаған хәл.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Элек-электән ил башына яңы башлыҡ килеп ултырыу менән мотлаҡ ниндәй ҙә булһа реформалары менән тормош ағышын бутап йә уны кирегә әйләндереп ебәрер булған. Хрущевтың кукуруз баҫыуҙары, Горбачевтың йөҙөм плантацияларын ҡырҙырыуы классик анекдотҡа әйләнеп, халыҡтың төртмә телендә йәшәй бирә, ләкин бындай ғибрәттәрҙән һабаҡ алыу тигән нәмә хаҡында уйлап та бирелмәй. Дүрт йыл эсендәге президентлыҡ осоронда Д. Медведевтың "модернизация"һы, милициянан полиция яһауы, мәктәп имтихандарын БДИ һынамыштарына алмаштырыуы ла халыҡта бик күп ризаһыҙлыҡтар тыуҙырҙы. Улай ғына ла түгел, сығарылыш кластары уны 2009 йылдан алып күндәм генә тапшыра килһә лә, РФ Президенты В.Путинға әле булһа Медведевтың мәғариф реформаһын юҡҡа сығарыуҙы үтенгән мөрәжәғәттәр яуыуын дауам итә.**

# "ИТӘК ҠЫРҠЫП ЕҢ ЯҺАУ" КЕМГӘ КӘРӘК?



Һүҙ ҙә юҡ, реформаларҙың ҡайһыларының, бигерәк тә М.Горбачевтың эскелеккә ҡаршы сараһы ниәтенең изгелеген инҡар итеп булмай. Ә бит шул уҡ ваҡытта халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙан бигерәк, "итәк ҡырҡып ең яһау" маҡсатында яһалған реформаларҙы ғына бер нисек тә аҡлап булмай. Миҫалдарҙы түшәмдән эҙләргә түгел, Рәсәй Иҫәп палатаһының бөгөнгө көндә уйлап-нитеп тормаҫтан, "одобрям!" девизы менән алға һөрөлгән, халыҡтың башына хәсрәттән башҡа нәмә килтермәгән реформалар барышын тикшереү һөҙөмтәләрен килтереү ҙә етә. Был хаҡтағы отчет аҡҡа ҡара менән "Медицина реформаһы тейешле һөҙөмтә бирмәне" тигән баш аҫтында үҙәк матбуғатта ("КП", 16.04.2015) баҫылып та сыҡты. Унда хәбәр ителеүенсә, Иҫәп палатаһы аудиторҙары реформа барышында өлгәшелгәндәрҙе баһалау маҡсатында Башҡортостан Республикаһына, Ярославль, Вологда, Ростов, Һамар, Пенза өлкәләренә сыҡты һәм ентекле тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә был төбәктәрҙә һаулыҡ һаҡлау системаһын оптималләштереүҙең халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеүҙә тейешле һөҙөмтәгә өлгәшмәүен билдәләне. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, был төбәктәрҙә урындағы шарттарҙы иҫәпкә алып, төптән уйлап тормаҫтан, дәррәү рәүештә дауаханаларҙа койка фондын ҡыҫҡартыуға, ауыл дауаханаларындағы махсуслаштырылған бүлексәләрҙе ябырға керешеп киткәндәр. Һуң, район һаулыҡ һаҡлау идаралығы ҡаршыһында, ә уларға - министрлыҡ алдында үрә ҡатып рапорт бирергә, маҡталырға кәрәк бит! Сатирик Мар.Сәлимдең әсе теле менән әйткәндә, "яптымизация" буйынса кем уҙарҙан ярыш сыҡҡан да киткән. Беҙ үҙебеҙ ҙә быға шаһит була, ризаһыҙлыҡ белдерә йөрөһәк тә, "һаулыҡ һағы" чиновниктарының танк шикелле баҫып килгән әүҙемлегенән баҙап, юғалып ҡалдыҡ, ҡул һелтәнек. Һөҙөмтәлә 2014 йыл ахырына ил буйынса 33 757 койка-урын юҡҡа сығарылған. Бына, исмаһам, "тырышлыҡ"! Ниңә чиновниктар кире эштәрҙә генә тау-таш аҡтарырға һәләтле, ә ысынлап та кәрәк саҡта йөк урынынан да ҡуҙғалмай икән һуң?

Рәсәй Иҫәп палатаһы тикшереүҙәре раҫлауынса, шулай уҡ мәктәптәр ябылыуҙан да сығымдар әллә ни артып китмәгән. Парадоксмы? Нишләйһең, шундай заманда йәшәйбеҙ. Иҫәп палатаһы аудиторы Александр Филипенко биргән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, былтыр ил буйынса 592 белем биреү ойошмаһы ябылған һәм 2030-ы ҡайтанан ойошторолған. Яҡын арала 3 639 мәғариф учреждениеһын "реформалау" ҡарала. Һөҙөмтәлә былай ҙа етешмәгән балалар баҡсалары - 5,6 процентҡа, гимназия һәм лицейҙар - 6, балалар ижад йорттары һәм клубтары - 3,6, колледждар - 16, балалар йорттары һәм приюттар 14,7 процентҡа ҡыҫҡарасаҡ. "Башҡортостан Республикаһында аҙ комплектлы ауыл мәктәптәре һанын ҡыҫҡартып сығырға ҡарар иткәндәр. "Мәктәп юҡ икән - проблема ла юҡ", тигән уй менән, күрәһең", тип яҙып сыҡҡайны былтыр "Московский комсомолец" гәзите Башҡортостанда оптималләштереү мәсьәләһенең бик "үҙенсәлекле" хәл ителеше хаҡындағы мәҡәләлә. 2012-2013 уҡыу йылы барышында ошондай "ысул" менән барлығы 147 мәктәп "оптималләштерелгән".

Бынан мәғариф өлкәһендәге һөҙөмтәһеҙ сығымдар кәменеме икән һуң? Министрлыҡ отчеттарынан күренеүенсә, әллә ни ырамаған, тип һығымта яһай Мәскәү баҫмаһы: 2011 йылда әлеге сығымдар күрһәткесе 5,2 миллиард һум тәшкил иткән булһа, киләһе йылына был һан хатта бер ни тиклем арта биргән - 5,4 миллиард. Шул уҡ ваҡытта йәмәғәтселектә күпме-шау-шыу ҡупты: ата-әсәләр һин дә мин эшләп йөрөгән уҡытыусыларҙы эштән сығарыу, мәктәптәр ябылыу сәбәпле, балалы ғаиләләрҙең ауылды ташлап китергә мәжбүр булыуы хаҡында хат артынан хат яуҙырҙы. Мәктәптәрҙә уҡытыусылар һаны кәмеү менән бәйле эш күләме артты, ә күбеһенең хеҙмәт хаҡы әллә ни ыратып артманы ла тиерлек.

Был яҙмаларҙа республикала мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау системаларын оптималләштереү барышын тәфсирләп тикшереү маҡсат итеп ҡуйылманы һәм бының кәрәге лә юҡ, минеңсә, сөнки былай ҙа яҡшы аңлашыла: һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәһендә һыҡмырланыу, булғанды юҡҡа сығарыу, ябыу һәм ҡыҫҡартыу юлы менән генә һау-сәләмәт, төплө белемле, киң ҡарашлы, иртәгәһенә яҡты ышаныс менән баҡҡан киләсәк тәрбиәләү мөмкин булмаған хәл. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тағы "Минфин бюджет өлкәһе учреждениеларын оптималләштереүгә яңынан әйләнеп ҡайтмаҡсы", тигән хәбәрҙәр ҡуйыртыла. Йәнәһе лә, бюджет секторында "хеҙмәт етештереүсәнлеге" түбән, шунлыҡтан уға сарыф ителеүсе сығымдарҙы тағы ла кәметеү тураһында һүҙ алып барыла икән. Унда дауалау учрежданиеларын һәм мәктәптәрҙе эреләтеү (берләштереү), һөҙөмтәһеҙ тип табылған вуздарҙы, театрҙар һәм мәҙәни усаҡтарҙы ябыу һәм башҡа шундай популяр булмаған саралар ҡарала. Хеҙмәт етештереүсәнлеге өсөн көрәш бороноraҡ сәнәғәт предприятиелары, завод һәм фабрикалар тирәләй гөрләй торғайны, ә бюджет өлкәһе, нигеҙҙә, халыҡтың сәләмәтлеге, белем кимәле, ялы - ҡыҫҡаһы, илдең интеллектуаль потенциалы хаҡында хәстәрлек күреүсе өлкә булараҡ ҡаралып килде. Был өлкәлә бер-ике йылда ғына "юғары етештереүсәнлеккә" өмөт итергә тура килмәүе һәр кемгә аңлашылалыр. Интеллектуаль байлыҡты тәләфләмәү, киреһенсә, уға һаҡсыл ҡарау, үҫтереү, бының өсөн унан сығымдарҙы йәлләмәүҙең ахыр сиктә бишләтә кире ҡайтасағы хаҡында уйламаймы икән финанс әһелдәре? Хәйер, улар бөтөн нәмәгә аҡса аша ҡарап, аҡса менән үлсәп өйрәнгән шул. Ә кем аҡсалы - көй ҙә шуныҡы...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль менеджер вазифаһына Леонид Вайсфельд тәғәйенләнгән (быға тиклем ул Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһында ошо уҡ вазифаны биләгән). Клубтың спорт директоры вазифаһына Роман Беляев раҫланған (Екатеринбургта башҡарма директор һәм генераль менеджер ассистенты булып эшләгән). Команданың баш тренеры итеп уҙған миҙгелдә "Автомобилист"тың тренерҙар штабын етәкләгән Анатолий Емелин тәғәйенләнгән. Уның менән бергә килгән Аркадий Андреев өлкән тренер буласаҡ. Шулай уҡ команданың тренерҙар штабында Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Андрей Зюзин бар. Дмитрий Курошин - ҡапҡасыларҙың тренеры, профессор Василий Коновалов - физик әҙерлек буйынса тренер.

✓Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы аттестация комиссияһының 2015 йылдың 6 апрелендәге ҡарарына ярашлы, Өфө дәүләт авиация техник университеты ректоры вазифаһына өс кандидат - иҡтисад фәндәре докторы, профессор Александр Дегтярев, Өфө дәүләт авиация техник университетының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса проректоры вазифаһын башҡарыусы, техник фәндәр докторы, профессор Николай Криони һәм техник фәндәр докторы, профессор Рөстәм Монасипов дәғүә итте. Тауыш биреү һөҙөмтәһендә Николай Криони Өфө дәүләт авиация техник университеты ректоры итеп һайланды.

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, хәҙерге ваҡытта республика биләмәһенең 43 проценты таҙартылған һәм төҙөкләндерелгән. Экологик кампанияла 700 мең кеше ҡатнашҡан. 22 мең тонна сүп-сар йыйылған һәм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына оҙатылған. Ауырғазы (73 процент), Дүртөйлө (70 процент) һәм Стәрлетамаҡ (67 процент) райондарында тирә-яҡты таҙартыу буйынса юғары процент билдәләнгән. Бынан тыш, бөгөнгө көнгә республикала 12,4 мең ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты ректорын һайлау буйынса конференция булды. Тауыш биреү һөҙөмтәһендә өс кандидат араһынан профессор, физика-математика фәндәре докторы Рәмил Бәхтизин еңеүсе тип иғлан ителде.

**“Башинформ”дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫ НИ ӨСӨН МАТУР?

**Был һорауға яуап биреү өсөн тыуған ҡаланың патриоты булырға кәрәктер, моғайын. Сөнки тап йөрәк түренән сыҡҡан саф хистәр һәр нәмәгә яңыса ҡарарға, күҙ күреп өйрәнгән күренеште икенсе ракурстан асырға, йолҡош өйрәк бәпкәһен аҡҡошҡа әйләндерергә һәләтле.**

Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһын тап ошо патриотлыҡ һәм тыуған ҡалаға һөйөү темаһына арналған сара тип әйтергә мөмкин булыр ине. Башҡаларынан айырмалы, был юлы ул яңы конкурсҡа старт бирҙе. Беренсе тапҡыр хакимиәт "Имидж-Консультант" компанияһы менән берлектә "Өфө - яратҡан ҡалам" тип аталған фотоконкурс иғлан итте. Ҡала мэры Ирек Ялалов белдереүенсә, һуңғы йылдарҙа төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр алып барыла. Ҡала парктары, скверҙар, аллеялар күҙгә күренеп үҙгәрә, күркәмләнә. Ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыу Өфөнө йәшел төҫкә мансып йәшәртеп ебәрһә, төрлө төҫтәге сәскәләр күҙҙең яуын ала. Ә инде яңы төҙөлгән объекттар үҙҙәренең үҙенсәлекле архитектураһы менән ылыҡтыра. Ғөмүмән, ҡала яйлап ҡына яңырыу кисерә. Ләкин шул уҡ ваҡытта бында тарихи мәҙәни ҡомартҡы булған бик күп объекттар ҙа үҙ урынын табып, заманса биналар солғанышында юғалып ҡалмаған. Әммә ошо тарих менән хәҙерге заман осрашҡан урындарҙы көн һайын күреп, шулай булырға тейеш, тип ҡабул итһәк, ситтән килеүселәр шунда уҡ уның үҙенсәлегенә иғтибар итә. "Ағиҙел буйлап үткәндә нисәмә саҡырымдарға һуҙылған тәбиғәт үҙенең асылын юғалтмай һаҡлап килә. Бындай матурлыҡты башҡа бер ерҙә лә осратмаҫһығыҙ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Хатта ҡайҙалыр ҡыйшайып ултырған йорт булып та, уны фоторәссам күҙлегенән матур итеп күрһәтә алаһығыҙ икән, ни өсөн был кадрҙы ла мәңгеләштермәҫкә? Юҡһа, фотоальбомдарҙы ҡарағанда, бер үк стандарт фотолар өҫтөнлөк ала. Йәки республиканың бренды булған Салауат Юлаев һәйкәлен гел бер төрлө ракурстан һүрәтләйҙәр. Хәҙер бейек йорттар ҙа күбәйҙе, ҡоштар осор бейеклеккә менергә лә, йылға буйлап ағырға ла мөмкинлектәр бар. Бары тик һеҙҙең теләгегеҙ генә булһын һәм хатта ябыҡ объекттарға ла юл асыу мөмкинлеген табасаҡбыҙ. Һуңынан иң яҡшы тип табылған эштәр полиграфия һәм сувенир продукциялары эшләгәндә ҡулланыласаҡ".

Положениеға ярашлы, конкурста ҡатнашыусыларҙың йәше сикләнмәй һәм уларҙың ҡайҙа йәшәүе мөһим түгел. Һәр ҡатнашыусы "Портрет", "Пейзаж", "Жанр" номинацияларында дөйөм алғанда 10 эш тәҡдим итә ала. Положение һәм талаптар менән тулыһынса баш ҡала сайтында йәки "Бәйләнештә" сайтында "Өфө - яратҡан ҡалам" фотоконкурсы битендә танышырға мөмкин. Эштәр 25 майға тиклем ҡабул ителә, еңеүселәр 12 июндә - Ҡала көнөндә бүләкләнәсәк һәм уларҙың эштәренән күргәҙмә ойоштороласаҡ. Гран-при яулаусыға 50 мең һум биреләсәк, бынан тыш, һәр номинацияла беренсе урын өсөн - 25 мең һум, икенсе урынға - 15 мең һум, өсөнсө урынға 10 мең һум ҡаралған. Конкурстың партнерҙары булып сығыш яһаусы "УМПО" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Фотограф" магазины ла үҙенең махсус бүләген булдырасаҡ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# МИЛЛӘТТӘР ҠОР ЙЫЙҘЫ

**28 апрелдә баш ҡалала Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһының III съезы үтте. Унда барлығы 350 делегат саҡырылғайны. Съезд эшендә республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, саҡырылған ҡунаҡтарҙан РФ Президенты Хакимиәтенең Эске сәйәсәт идаралығы етәксеһе урынбаҫары Михаил Белоусов, РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Олег Мельниченко, Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы Советы рәйесе Назиржон Абдулғәниев ҡатнашты.**

Рәсми теркәлгән 40 милли-мәҙәни йәмғиәтте берләштереүсе ойошма 2000 йылда барлыҡҡа килә һәм шул йылда уҡ уның беренсе ойоштороу съезы үтә. Икенсе съезд бынан 6 йыл элек уҙғарыла. Рәсәй Федерацияһында Дағстандан ҡала 100-ҙән ашыу халыҡ һәм милләт вәкиле йәшәгән Башҡортостан күп милләтлелеге буйынса икенсе урында тора. Шуға ла дөйөм мәсьәләләрҙе айырым түгел, ә уртаға һалып һөйләшеү, йөктө бер йүнәлештә тартыу республиканың тотороҡлолоғо, үҫеше өсөн бик мөһим. Бында, әлбиттә, ойошманың дәүләт власы менән конструктив диалог ҡора белеүе лә ҙур әһәмиәткә эйә.

Былтыр ойошма менән берлектә республиканың тарихи-мәҙәни үҙәктәре 737 төрлө кимәлдәге сара уҙғарған. Шуларҙан Шәжәрә байрамы, Науруз, Масленица, Халыҡ-ара Аксаков байрамы, Славян яҙмаһы һәм мәҙәниәте көндәре һ.б. байрамдар хәҙер инде уртаҡ байрам итеп билдәләнелә. Шулай ҙа һәр ойошма туған телдәрҙе һаҡлау, үҫтереү, йәш быуынға телде өйрәтеү кеүек йүнәлештәргә өҫтөнлөк бирә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев үҙенең сығышында тап ошо һәм башҡа мәсьәләләргә төп иғтибарҙы йүнәлтте лә инде: "Башҡортостан - башҡорттарҙың тарихи тыуған ере һәм башҡорт милләтенең берҙән-бер берләшеү урыны, шуға күрә дәүләт башҡорттарҙың социаль, рухи-мәҙәни үҫешенә ярҙам итергә тейеш. Был өҫтөнлөктө ҡасандыр Башҡортостанға килеп һыйыныу тапҡан һәм әлеге ваҡытта ошонда ерегеп йәшәгән барлыҡ милләттәр һәм халыҡтар вәкилдәре лә яҡшы аңлай. Йөҙәр йылдар дауамында ата-бабаларыбыҙ бер ниндәй тел, дин айырмалыҡтары ла дөйөм йортта тыныс һәм татыу йәшәү өсөн кәртә булып тормауын раҫлаған. Башҡорт халҡының тотош тарихына күҙ һалыу ҙа Тыуған йортобоҙҙоң берәү булыуын күрһәтә. Рәсәйгә хәүеф янағанда башҡорттар һәр саҡ рустар менән иңгә-иң терәп көрәшкә баҫҡан.

Бөгөн донъя тиҙ үҙгәрә. Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең бер проблемаһын хәл итеп өлгөрмәйһең, яңы мәсьәләләр килеп тыуа. Шуларҙың иң мөһиме - глобалләшеү шарттарында башҡорттарҙың үҙенсәлеген, башҡорт телен уҡытыуҙың сифатын һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү, халҡыбыҙҙың тарихын һәм билдәле шәхестәребеҙҙең ролен боҙоп күрһәтергә тырышыуҙарға ҡаршы тороу, йәштәребеҙҙе рухи-әхлаҡ нормаларында, илһөйәр итеп тәрбиәләү тора.

Бөгөн республикала ижтимағи ойошмаларҙың уңышлы эшмәкәрлеге өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған, ныҡлы ҡануниәт базаһы бар һәм төрлө программалар эшләй. Беҙ, башҡорттар, республика булдырыусы халыҡ булараҡ, айырым ташламалар талап итмәйбеҙ. Әммә беҙҙең эшмәкәрлегебеҙҙә лә проблемалар бик күп. Республикала ватандаштарыбыҙға ярҙам итеү буйынса хоҡуҡи акттар һәм дәүләт программалары ҡабул ителгән. Үкенескә күрә, улар тулы ҡеүәтенә эшләмәй йәки формаль рәүештә генә йәшәй.

Илһөйәрлек тәрбиәләүҙә төп күрһәткес булып балаларҙың туған телен белеүе торорға тейеш. Был хоҡуҡ Төп Закон һәм РФ-ның башҡа ҡанундары менән нығытылған. Әммә белем биреү ойошмаларының эшен анализлау туған телендә уҡыусы балаларҙың һаны ҙур тиҙлектә кәмеүен күрһәтә. Башҡорт мәктәптәрендә тәбиғи-математика фәндәре - 4-се, тарих, география 7-се синыфҡа тиклем генә башҡортса уҡытыла. 5-9-сы синыфтар өсөн - математика, физика, химия, биология, 8-9-сы синыфтар өсөн география, тарих дәреслектәрен башҡорт телендә нәшер итеү туҡтатылған. Быны заказ булмау менән аңлаталар. Ә сәбәбе ябай: муниципаль районддарҙың һәм ҡала округтарының мәғариф органдары Берҙәм дәүләт имтихандарының рус телендә тапшырылыуына һылтанып, мәктәптәрҙе яйлап рус телендә уҡытыуға күсерә. Әммә сағыштырма анализ күрһәтеүенсә, башҡорт мәктәптәрендә уҡыусылар рус теленән БДИ-ны рус мәктәптәрендә уҡыусыларҙан насар тапшырмай, ҡайһы бер осраҡтарҙа хатта яҡшыраҡ һөҙөмтәләргә лә өлгәшәләр. Һис шикһеҙ, рус телен белеү кәрәк, әммә туған тел иҫәбенә түгел. Тел юғалыу менән халҡыбыҙҙың быуаттар буйына тупланған иң яҡшы ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, тәжрибәһе юҡҡа сығасаҡ.

Һуңғы йылдарҙың мөһим проблемаһы - башҡорт ауылдарын һаҡлап ҡалыу. Эш булмауы йәштәрҙе ситкә сығып китергә мәжбүр итә. Барлыҡ үҙгәрештәр башҡорттар өсөн ауырлыҡ тыуҙыра, сөнки милләттәштәребеҙҙең күпселеге ауылда йәшәй. Беҙ йәштәрҙең ауылдан китеүенә әҙер булырға һәм район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа башҡорт мөхитен булдырыу эшен көсәйтергә тейешбеҙ".

Сығыш яһаусы һәр кем үҙ милләтенең проблемаларына туҡталды, уртаҡ эш йүнәлештәрен билдәләне. Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһына йыйылған делегаттар сара һуңында ойошма рәйесе итеп РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллинаны һайланы. Уның урынбаҫарҙары - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, БР Рустары соборы башҡарма комитеты рәйесе Виктор Пчелинцев, БР татарҙарының милли-мәҙәни төбәк йәмғиәт автономияһы советы рәйесе Римма Үтәшева. Шулай уҡ Ассамблея президиумы Советы, 34 кешенән торған Ассамблея составы раҫланды. Улар араһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов та бар.

Шулай итеп, тағы ла бер оло ҡор үтеп китте. Әммә уны, үтте, тип еңел һулап, тынысланырға түгел, әең һыҙғанып ныҡлы эшкә тотонорға кәрәк. Хәл итәһе проблемалар бихисап әле.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Истанбулда "Асыҡ дипломатия, медиа, мәғлүмәт" IV Бөтә донъя төрки форумы тамамланды. Дүрт көн дауамында барған сараларҙа донъяның 60 иленән 400 самаһы делегат ҡатнашты. Секция ултырышында Башҡортостан вәкиле, "Башинформ" агентлығы күҙәтеүсеһе Ләйлә Аралбаева-Ишморатова доклад менән сығыш яһаны. Халыҡ-ара форум сиктәрендә дипломатия, эшҡыуарлыҡ, фән, технология, мәҙәниәт, спорт өлкәһендәге ҙур ҡаҙаныштары өсөн төрки илдәренең күренекле вәкилдәренә "Kizil Elma" ("Ҡыҙыл алма") премияһы тапшырылды. Бүләкләнеүселәр араһында билдәле башҡорт композиторы Нур Дауытов та бар.

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһы йәнә "Бөтә балалар ҙа ҡәҙерле!" Рәсәй конкурсында ҡатнаша. Былтыр Өфө илдең 161 ҡалаһы араһында икенсе урынды яуланы. Быйыл бәйге ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам итеүгә, шулай уҡ ата-әсәләрҙең яуаплылығын арттырыуға йүнәлтелгән. Теләүселәр "Мин - ата-әсә" сайтында теркәлеп, Өфө өсөн тауыш бирә ала.

✓ Башҡортостан хужалыҡтары 27 мең 566 тонна минераль ашлама һатып алды, шуларҙың 18 мең 932 тоннаһы - азот ашламалары. Гектарына уртаса 8,8 килограмм иҫәбенән ашлама тупланған. Саҡмағошта һәр гектарға - 43,5 килограмм, Ауырғазыла 35 килограмм минераль ашлама тура килә. Бөгөнгә республикала 298 тонна үҫемлектәрҙе һаҡлау саралары тупланған. Мәләүез һәм Ауырғазы райондары аграрийҙары 40 тоннанан ашыу алған.

✓ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры итеп ҡайтанан Рәил Әсәҙуллин һайланды. Ректор вазифаһына өс кандидат - БДПУ-ның сит телдәр кафедраһы мөдире Татьяна Буркова, БДПУ-ның фәнни эштәр буйынса проректоры Гөлназ Шафиҡова һәм университеттың ғәмәлдәге ректоры Рәил Әсәҙуллин дәғүә иткәйне.

✓ Башҡортостанда шәхси эшҡыуарҙар "һалым каникулдары" аласаҡ. Бындай льготаларға һалым һалыуҙың ябайлаштырылған, йәки патент системаһын ҡулланыусы бәләкәй һәм урта бизнес вәкилдәре дәғүә итә. Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында тейешле закон проекты тулыһынса ҡабул ителде. Закон сығарыу башланғысы республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса индерелде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘҮҘЕМ БӘЙЛӘНЕШКӘ ЮЛ

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Үзбәкстан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Аҡмал Камалов менән осрашты. Яҡтар сәнәғәт һәм сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек перспективаларын, миграция сәйәсәтенең мөһим мәсьәләләрен, шулай уҡ халыҡ-ара ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышын тикшерҙе.**

- Ике айҙан беҙҙә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәренең саммиты була. Һис шикһеҙ, унда Үзбәкстан делегацияһы ла ҡатнашасаҡ. Ошо саралар алдынан Башҡортостан Республикаһының Үзбәкстандың сәнәғәт, ауыл хужалығы предприятиелары, бизнесы менән үҙ-ара килешеп эш итеү мөмкинлектәре хаҡында һөйләшергә теләгебеҙ бар, - тине Рөстәм Хәмитов.

Төбәк Башлығы Башҡортостан машиналар эшләү продукцияһы, нефть-газ ҡорамалдары, газ һәм нефть үткәргестәр өсөн материалдар тәҡдим итергә әҙер булыуын белдерҙе. Хәҙерге ваҡытта Салауат катализаторҙар заводы, Белореттағы Көньяҡ-Урал заводы продукцияларын Үзбәкстанға ебәреү тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. Республика предприятиелары Үзбәкстанға ит-консерва, ит һәм колбаса изделиелары, ҡоро һөт, аҡ май, ашлыҡ һәм ҡарабойҙай ярмаһы, шулай уҡ ашламалар оҙатырға әҙер. Республика, үҙ сиратында, Үзбәкстандан йәшелсә-емештәр килтереү мөмкинлегә менән ҡыҙыҡһына.

Илсенең һүҙҙәренсә, бөгөн Үзбәкстанда сәнәғәт продукцияһы, шул иҫәптән электр тауарҙары, кесә телефондары, компьютерҙар, шулай уҡ еңел һәм йөк автомобилдәре етештерелә. Бынан тыш, йөк, пассажир вагондары һәм цистерналар эшләү үҫешә.

Фекер алышыу барышында миграция ҡануниәте темаһы ла күтәрелде. Рөстәм Хәмитов килеп тыуған һорауҙарҙы тиҙ арала хәл итеү өсөн Өфөлә Үзбәкстандың Генераль консуллығын асырға тәҡдим итте.

- Үзбәкстандың бизнесы менән әүҙем эшмәкәрлек алып барырға теләйбеҙ. Беҙ мәҙәни, социаль өлкәлә эшләргә әҙер. Был барыбыҙ өсөн дә яҡшы буласаҡ, - тип билдәләне төбәк етәксеһе.

2014 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан менән Үзбәкстан араһында тауар әйләнеше 127,2 миллион доллар, шул иҫәптән экспорт - 71,6 миллион доллар, импорт 55,5 миллион доллар тәшкил иткән. Төбәктә Үзбәкстан капиталы ҡатнашлығында 78 предприятие эшләй.

# НЕФТЕКАМАНЫҢ ХОККЕЙ МӘКТӘБЕ

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Торос" хоккей клубы уйынсылары һәм тренерҙар штабы менән осрашты. Улар уҙған аҙнала һуңғы дүрт йылда өсөнсө тапҡыр Юғары хоккей лигаһының төп бүләгенә - Братина кубогына лайыҡ булды.**

- Уйынды ҡараным, был көндә Нефтекама ҡалаһына бара алмауыма бик үкендем. Әлбиттә, һеҙ бик яҡшы уйнанығыҙ. Мин яҡындарым менән бергәләп шатландым. Һеҙгә ҙур рәхмәт, - тине Рөстәм Хәмитов.

Осрашыуҙа хоккей миҙгеленең йомғаҡтары, шулай уҡ "Торос" хоккей клубының үҫеш перспективалары һәм алдағы осорға пландар тикшерелде. Клуб етәкселеге һәм уйынсылар республика Башлығына "Торос" клубына һәм республика хоккейына күрһәткән ярҙамы өсөн рәхмәт әйтте. Рөстәм Хәмитов, "Торос" хоккейсыларҙың яңы быуынын әүҙемерәк тәрбиәләһен, тигән теләк белдерҙе.

- Нефтекамала хоккейҙы үҫтерергә кәрәк. Спорт мәктәбе эшләргә тейеш. Бер аҙҙан хоккей интернаты тураһында ла уйларға мөмкин. Беҙ Нефтекаманың спорт ҡалаһына әүерелеүен теләйбеҙ, - тип билдәләне төбәк етәксеһе.

1988 йылда Нефтекамала "Торпедо" исеме аҫтында "Торос" хоккей клубы ойошторола. "Торос" хоккей клубына юғары һәм беренсе лигала уйнаусы "Торос" һәм "Батыр" командалары, шулай уҡ балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе инә. Быйыл "Торос" "Ижсталь" командаһын 4:2 иҫәбе менән еңеп, Юғары хоккей лигаһы тарихында беренселәрҙән булып өс тапҡыр Братина кубогына лайыҡ булды.

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерләнеү һәм уны байрам итеү буйынса ойоштороу комитетының дүртенсе ултырышын үткәрҙе.**

Башҡортостан Республикаһының хәрби комиссары Анатолий Балтинский һәйкәлдәрҙе, монументтарҙы, обелисктарҙы һәм ҡәберлектәрҙе төҙөкләндереү буйынса саралар тураһында һөйләне. Өфө районы Йоматау ауылындағы хәрби зыяратта эштәр әүҙем бара, Бәләбәй районы Аксаков ауылы эргәһендәге һәм Өфөләге Сергиев зыяратындағы туғандар ҡәберлектәре төҙөкләндерелә. Бөтә эштәр 9 май баштарында тамамланасаҡ.

- 9 майға бөтә объекттар ҙа тулыһынса әҙер булырға тейеш. Һәр район, ҡала, ауыл башлыҡтарынан ошо мәсьәләләрҙе үҙ контроленә алыуҙарын талап итәм, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов.

Анатолий Балтинский 9 майҙа Өфөнөң Ленин майҙанында хәрбиҙәрҙең, курсанттарҙың һәм кадеттарҙың, көс структураларының тантаналы парады буласаҡ тип билдәләне. Хәҙерге ваҡытта күнекмәләр дауам итә.

Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын торлаҡ менән тәьмин итеү хаҡында һөйләне. Анығыҡланған мәғлүмәттәр буйынса, республикала 1113 һуғышта ҡатнашыусы, инвалидтар һәм ветерандарҙың тол ҡатындары торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж. Тапшырылған документтарҙы тикшергәндән һуң уларҙың барыһына ла торлаҡҡа сертификат бирелә. Һуғыш ветерандарына аҡсалата түләүҙәр буйынса ла тотҡарлыҡтар юҡ.

Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, шулай уҡ Туймазы һәм Көйөргәҙе райондары хакимиәттәре башлыҡтары Айҙар Суфиянов менән Әхәт Ҡотләхмәтов Еңеү көнөн байрам итеү алдынан республиканың ҡала һәм районларында ниндәй байрам саралары ойоштороласағы тураһында һөйләне.

Кәңәшмәлә шулай уҡ юбилей тантаналары йыл аҙағына тиклем дауам итәсәк, тип билдәләнде. Мәҫәлән, 2015 йылдың 20 сентябрендә Көйөргәҙе районында тыуып үҫкән, башҡорттар араһында иң беренсе булып Советтар Союзы Геройы исемен алған Ғәфиәтулла Арыҫлановтың тыуыуына 100 йыл тула. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ветерандар ойошмаларының батырҙың тыуған төйәгендә бюст ҡуйыу тәҡдимен хупланы.

- Һуғыш ветерандарына һәм инвалидтарға иғтибарлы булырға кәрәк, - тине Рөстәм Хәмитов. - Байрамдар үткәс тә ветерандарҙы онотмау, уларға ярҙам итеү, хәстәрлек күреү - һәммәбеҙҙең дә бурысы.

"Башинформ".

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# УҠЫТЫУСЫЛАР...
## тағы ярышты

**Төрлө һөнәр эйәләре өсөн үҙ көстәрен һынап ҡарау, коллегаларының эш тәжрибәһен ургаҡлашыу, фекер алышыу өсөн конкурстар үткәрелеп тора. Мәғариф өлкәһендә эшләүселәр өсөн дә күп бындай ярыштар. Яңы ғына республиканың иң алдынғы уҡытыусыһы һайланһа, ошо көндәрҙә үткәрелгән "Йыл педагогы - 2015" республика конкурсында балаларға өҫтәмә белем биреүсе иң яҡшы педагог билдәләнде.**

Был конкурстың йомғаҡлау турында Башҡортостандың төрлө район һәм ҡалаларынан бөтәһе 51 педагог көс һынашты. Улар художество, физик культура һәм спорт, ғилми-техник, социаль-педагогик, туристик һәм тыуған яҡты өйрәнеү, экология һәм биология, һынлы сәнғәт һәм биҙәү-ҡулланма сәнғәте йүнәлештәре буйынса өлгәшкән уңыштары, эш методикаһы, үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашты. Педагогтар үҙе менән таныштырҙы, белем биреү программаларын яҡлап сығыш яһаны. Конкурстың һуңғы өлөшөндә улар ойоштороусылар тарафынан әҙерләнгән төрлө актуаль һорауҙарға яуап ҡайтарҙы. Художество йүнәлеше буйынса беренсе урынға сығыусы В.М. Комаров исемендәге Өфө ҡала балалар ижады йортоноң "Радуга" вокал студияһы уҡытыусыһы Алина Хәкимова әйтеүенсә, был һорауҙар һәр уҡытыусыға үҙ фекерен, ҡарашын белдерергә мөмкинлек биргән.

Педагог өсөн уҡыусыларының уңыштарын, уларҙың оҫталығын күреп, үҙе һалған тырышлыҡ бушҡа китмәүен аңлауҙан да юғары ҡыуаныс юҡтыр, моғайын. Был турала Стәрлетамаҡ ҡалаһының А.П. Гайдар исемендәге пионерҙар һарайы уҡытыусыһы Ләйлә Ғәзизова ла әйтеп үтте.

- Мин ошо һөнәрҙе һайлап, дөрөҫ эшләгәнмен, тигән уй нығынды. Уҡыусыларым араһында Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлендәге конкурстарҙа, күргәҙмәләрҙә юғары уңыштарға өлгәшеүселәр бихисап булыуы менән ғорурланам. Балаларға үҙем белгәндәрҙең барыһын да өйрәтергә тырышам. Әлеге көндә минең 150-нән ашыу уҡыусым бар, уларға һаламдан аппликациялар эшләргә, тирене художестволы иләү, текстопластика буйынса дәрестәр бирәм. Үҙем бер ҡасан да бындай түңәрәктәрҙә шөғөлләнмәнем, бәйләү һәм сигеү, тегеү эшенә әләсәйем өйрәтте, - тине Ләйлә Әмир ҡыҙы конкурстан һуң тәьҫораттары менән бүлешеп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балаларға һәләттәрен асырға, көнделдәренә яткан шөғөл табырға һәм оҫталыҡтарын арттырырға ярҙам иткән был педагогтарға бөгөн сәхнәләрҙә өҙҙөрә баҫып бейеп, моңло йырҙар башҡарып, төрлө кул эштәре буйынса конкурстарҙа ҡатнашып, атаәсәһен ҡыуандырып, милләтенең йөҙөн балҡытып йөрөүсе балаларыбыҙ өсөн ҙур рәхмәт һүҙҙәре әйтергә генә ҡала. Сөнки ошо педагогтар булмаһа, буш ваҡыттарында нимә эшләргә, ташып торған дәрт-дарманын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән йәштәргә һәләттәрен үҫтереп, хеҙмәтенән ҡәнәғәтлек тойғоһо татып йәшәргә кәрәк булыуын кем аңлатыр ине...**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бит тиреһе

❖ Биткә ҡыҙыл таптар сыҡһа, уртаса ҙурлыҡтағы бер әсе алманы ҡырғыста ҡырып, 150 мг һөткә һалырға һәм ҡайнатып алырға. Һыуынғас, 2 йомортҡа һарыһы ҡушып болғарға. Ошо массаны биткә 15 минутҡа һөртөргә. Ҡыҙыл таптар бөтәсәк.

## Гастрит

❖ 30-35 грамм балды 1 стакан ҡайнаған йылы һыуға һалып иретергә лә, ашарҙан 3 сәғәт алда йәки ашағандан һуң 3 сәғәт үткәс эсергә. 1 көнгә 70-100 грамм балды өс өлөшкә бүлеп эсергә. Дауаланған мәлдә шоколад, кәнфит, торт һымаҡ тәм-том ашау зыянлы. Дауаланыу курсы - 1,5-2 ай. Әгәр ҙә балды һыу эскәндә күңел болғанһа, балды һөткә, эремсеккә, бутҡаға ҡушып ашарға.

❖ Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар ҙан 40 минут алда 200-300 мл яңы һыға әҙерләнгән кишер һуты эсергә кәрәк.

❖ 2 литр һөткә 1 стакан һоло һалып, өҫтөн томалап бешерергә, һөҙөргә. Төнгөлөккә 1-әр стакан эсеп ятырға.

## Йөҡө

❖ Йоҡоғоҙ туйғансы йоҡлағыҙ. Йоҡо туймау шәкәр сирен аҙҙырып ебәрә ала.

❖ Йоҡо туймауҙан кеше төрлө зыянлы тәьҫирҙәргә тиҙ бирешә.

## Тамаҡ, йотҡолоҡ ауыртҡанда

❖ Порошок итеп төйөлгән абрикос һөйәген 1 балғалаҡ бал менән болғап, төнгә ҡарай ашарға ла, аҙағынан һөт эсеп ҡуйырға кәрәк.

❖ Балан бешкән һыуҙы йәки балан һутын 1:1 күләмендә бал ҡушып эсеү шифалы.

## Тәмәке - зыян

❖ Тәмәке тартыуҙан ҡотолам тиһән, 100-әр грамм арыш, һоло, тары, арпаны бергә ҡушып, өҫтөнә 1 литр һыу ҡойорға ла, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк ҡайнатып сығарырға һәм 10 минут бешерергә, яҡшылап төрөп, 1 тәүлек төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30-40 минут алда эсергә. Тәмәкенән биҙгәнсе дауам итергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ "Һеңлем Сәлиәгә үҙем белгән төрлө әкиәттәрҙе һөйләйем, китаптан да уҡыйым. Ә бына ике өләсәйем дә беҙгә әкиәт һөйләмәй, улар, ғөмүмән, әкиәт һөйләй белмәй ул..." - тип аптыратты Фаягөл.



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЙЫЛҒА УҢЫШ ТЕЛӘГЕҘ

**Ҡарға бутҡаһы байрамында ҡумыҙҙа уйнағандар, коллектив йырҙар, бейеүҙәр башҡарылған. Ҡайһы бер яҡтарҙа ҡатын-ҡыҙ - ир-егет булып, ә малайҙар ҡатын-ҡыҙ булып кейенгән.**

Башҡортостандың төньяғында йәштәр "Ҡарға уйыны" уйнаған. Бер ҡыҙ түңәрәк буйлап бутҡа тотоп йөрөгән. Ҡалғандар, ҡарға булып уның артынан эйәреп йөрөй һәм "ҡарр-ҡарр" тип ҡысҡыра. Һуңынан барыһы ла түңәрәтеп табынға ултыра, уртаға бутҡа һәм ағас ҡалаҡтар ҡуялар. Ашай башлар алдынан ҡыҙҙар ҡарғаларҙан ямғыр яуҙырыуҙарын, кешеләргә мул уңыш биреүҙәрен үтенә. Ашаған мәлдә: "Был һиңә түгел, ҡарғаларға!", - тип бер-береһенең ҡалаҡтарын һуғып төшөрәләр. Был шаярыуҙар йырҙар менән оҙатылып бара:

*Ал ризыҡты, ал,*
*Бер бөртөккә - ун бөртөк,*
*Ун бөртөккә - мең бөртөк.*
*Ал ризыҡты, ал,*
*Бер тамсыға - ун тамсы*
*Ун тамсыға - мең тамсы.*
*Ал, ризыҡты, ал,*
*Ал, Хоҙайым, ал!*

Ашаған мәлдә бутҡа тураһында насар һүҙ һөйләргә ярамаған, сөнки ул Хоҙай ризығы иҫәпләнгән.

*Бутҡа - Хоҙай ризығы,*
*Бутҡа - Хоҙай аҙығы.*
*Шул бутҡаны хурлаһаң,*
*Башыңа төшөр яҙығы.*

Табында өлкән ҡатындар йәш саҡтары тураһында һөйләгән, йәш ҡыҙҙарға аҡыл өйрәткән, кәңәштәр биргән. Һуңынан ҡалған ризыҡты таштарға, ағас төптәренә һалып сыҡҡандар. Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән районында ағас төптәренә ойотҡан һалынған һауыттарҙы ла ултыртып ҡалдыралар. Был осраҡта ла: "Ҡарғалар, ҡарғалар, һеҙ ҙә беҙҙең кеүек йыйылып һыйланығыҙ, Ямғыр яуһын, тип теләгеҙ, донъя имен булһын, тип теләгеҙ!", тигән әйтеү әйтелә. Балалар ағас башына менеп, ҡарға булып ҡарҡылдай һәм шулай тип ҡысҡыра:

*Ҡарғалар, килегеҙ, килегеҙ,*
*Йылға уңыш теләгеҙ!*

Балаҡатай, Салауат, Дыуан, Иглин, Әлшәй районында байрамда бутҡа ғына түгел, ит тә бешерелә. Бының өсөн һәр йорттан аҡса йыйыла йәки етеш йәшәүселәрҙең береһе ҡорбанға ҡаҙ (өйрәк, тауыҡ), һарыҡ, кәзә бирә. Ҡарғатуйҙа кешеләрҙең ҡарғаға берсә үҙҙәренә тиң итеп ҡарауы, йә уны изгеләштереп, ямғыр яуҙырыу, туҡлыҡ килтереү һәләттәренә эйә "ер бәрәкәте", "ерҙе-һыуҙы һаҡлаусы" тип атауы ла күренә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "МИН ҺӨЙЛӘЙ БЕЛӘМ ДӘ...

## өләсәйем әкиәт һөйләмәй шул"

**Баш ҡала балалары һәм уларҙың ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәре ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театрында үткәрелгән "Һаумы, һаумы, әкиәт!" тип исемләнгән донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың ҡала конкурсын тамаша ҡылырға йыйылды. Үҙҙәре һөйләгән әкиәттәге мажараларға ихлас күңелдән ышанған балалар ололарҙы ла был тормошта һәр ваҡыт изгелек, ғәҙеллек, яҡшылыҡ, татыулыҡ һәм дуҫлыҡҡа урын табылыуына инандырҙы.**



"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсы 2010 йылдан алып үткәрелә. Ойоштороусылар әйтеүенсә, алты йыл эсендә был ярышта 3700-ҙән ашыу бала ҡатнашҡан. Быйыл конкурстың район этаптарында 191 белем биреү учреждениеһынан бөтәһе 710 бала ярышҡан. Шулар араһынан 15 фольклор коллективы, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларынан 20 тәрбиәләнеүсе, дөйөм белем биреү учреждениеларынан 33 уҡыусы ҡала этабына үткән. Улар башҡорт, рус, украин, литва, инглиз, эскимос, һинд, алтай һәм башҡа халыҡтарҙың фәһемле әкиәттәрен башҡортса һөйләне. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары тәрбиәләнеүселәре араһында Киров районының 51-се һанлы балалар баҡсаһынан Фаягөл Йәнтүрина абсолют еңеүсе тип табылды.

- Мин "Ҡошсоҡ йыры" тигән эскимос халыҡ әкиәтен һөйләнем. Был әкиәтте әсәйем өйрәтте, ә мин тиҙ генә иҫемдә ҡалдырҙым. Һеңлем Сәлиәгә үҙем белгән төрлө әкиәттәрҙе һөйләйем, китаптан да уҡыйым. Ә бына ике өләсәйем дә беҙгә әкиәт һөйләмәй, улар, ғөмүмән, әкиәт һөйләй белмәй ул..." - тип аптыратты Фаягөл. Ул өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшә, башҡорт йыр-бейеүҙәрен башҡарырға өйрәнә икән. "Балаға рухи тәрбиә биреү, туған телгә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡарата һөйөү, ихтирам уятыу ғаиләнән башлана", тигән фекерҙә ҡыҙҙың ата-әсәһе Сәлимә һәм Фаяз Йәнтүриндар.

Дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары араһында Гран-приға лайыҡ булған Совет районы 13-сө башҡорт башланғыс белем биреү мәктәбе-балалар баҡсаһының 3-сө синыф уҡыусыһы Йәсмин Аҡназарова, киреһенсә, әкиәттәрҙе өләсәһенән һөйләтә, отоп ала булып сыҡты. Ул конкурс өсөн әҙерләгән инглиз халыҡ әкиәтен дә Фәүриә өләсәһе үҙе тәржемә итеп биргән.

- Өләсәйем Кәримә һеңлемә һәм миңә башҡортса әкиәттәр һөйләй, ә Гизәр ҡустым әле бәләкәй, ул аңламай. Өләсәйемдең әкиәттәре дуҫ булырға, атайәсәйҙе тыңларға, дуҫтарға ярҙам итергә, эшләргә, тәртипле булырға өйрәтә. Конкурста ҡатнашҡан малай-ҡыҙҙар ҙа шундай уҡ матур әкиәттәр алып килгәйне, миңә бик оҡшаны, - тине Йәсминә тантана һуңында. Был әкиәт байрамына килгән һәр бала ҡиммәтле бүләк һәм матур тәьҫораттарҙан тыш, Йәсминә кеүек фәһем, аҡыл, тәрбиә алып ҡайтҡандыр, тип ышанғы килә.

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсында әкиәт сәхнәләштергән фольклор коллективтар араһында Киров районының 40-сы балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре беренселекте яуланы. Конкурсанттарҙы тәбрикләгәндә Өфө ҡалаһы хакимиәте урынбаҫары Сынтимер Баязитов үҫеп килгән йәш быуын туған телен, башҡорт ғаиләһенә хас традицияларҙы белеп үҫергә тейеш булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ ул ошо матур байрамды үткәреү өсөн күп көс һалған, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ үҫтереүгә һәм уны пропагандалауға ҙур өлөш индергән район хакимиәттәре етәкселәре, белем биреү учреждениелары етәкселәренә, уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә оло рәхмәтен белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә, тиҙәр. Халыҡ һүҙенә ҡолаҡ һалып, халыҡ аҡылын балаларға өйрәтеп үҫтереү бик мөһим. Шуға күрә, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың ҡала конкурсы балаларға телде өйрәтеү йәһәтенән генә түгел, ә төрлө милләттәрҙең аҡылын, тормош тәжрибәһен, кинәйәле һүҙ артына йәшерелгән хәҡиҡәттән фәһем алырға булышлыҡ итеүе менән дә әһәмиәтле сара ул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫ БАЛАЛАРЫ

# ҺӘЙКӘЛГӘ ЛӘ ЛАЙЫҠ УЛАР



**Бөйөк Еңеүҙе тыл һынауҙарында ҡаҡшамаҫ сыҙамлыҡ күрһәткән ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ йәштәр һәм балалар ҙа яҡынайтҡан бит. Һәр береһе һәйкәлгә лайыҡ бындай кешеләр беҙҙең Ураҙ ауылында ла бар һәм уларҙың береһе тураһында һөйләгем килә бөгөн.**

Сәғәҙәтова Талибә Ғәлимйән ҡыҙына Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда бары 15 йәш була. Тау ашаһындағы Рәсүл ауылына бер уҡытыусыны ат менән илтеп ҡайтып килһә, атаһын һуғышҡа алып киткәндәр. Талибә өйгә инеп тә тормай, атын Мейәс тимер юл станцияһына ҡыуалай. Барып етеп, атаһы менән хушлашып ҡала. Әйтерһең дә, мәңгелеккә айырылышыуҙарын йөрәге менән һиҙә. Ысынлап та, 1941 йылда уҡ атаһының хәбәрһеҙ юғалыуы хаҡында белдергән хат килә. Әсәләре бишь бала менән тол ҡала. Бөтөн ауырлыҡтар иң өлкән балаһы Талибә иңенә ята. Һуғыш мәлендә күмер етештереү кәмегәс, ағас ҡырҡып, утын әҙерләү мәшәҡәте лә ҡатын-ҡыҙ иңенә төшә. "Курин" тип урман ҡырҡыуҙы атайҙар беҙҙең яҡта. Талибәне лә Белорет районы Тирлән эргәһендәге курингә эшкә ебәрергә булалар. Әсәһе, туғандары ла уның менән китергә тейеш була. "Ни өсөн әсәйемде, туғандарымды ла яҙҙылығыҙ?" - тип һорай ул ауыл советында аптырап. "Юғарынан шулай ҡуштылар", - тип яуаплай хужа. Һыйырҙарын Ҡоҙаш ауылындағы туғандарына ҡалдырып, ятыр-торор әйберҙәрен баҙға йәшереп, алыҫ юлға сығалар. Куринда кешеләр асыға, мунса юҡ, төрлө ауырыуҙар күбәйә. Талибә ағас ҡырҡа, әсәһе туғандарын ҡарай. "Көнөнә 100-200 грамм икмәк бирәләр, аяҡта - сабата, ҡулдар яланғас. Ҡул бысҡыһы менән бысабыҙ, кешеләр хәлһеҙлектән хатта йығылып китәләр", - тип хәтерләй Талибә апай.

Һуғыш мәлендә ниндәй генә эш башҡармай ул. Белорет, Мейәс ҡалаларынан ат, үгеҙ егеп, мискә ултыртып, ягыулыҡ ташыйҙар. Колхоздың бөтә төр эштәрен дә башҡара: быҙау, сусҡа ҡарай, һыйыр һауа, пар атта һалам ташый, ер тырмата, төндәрен ат көтә, ашлыҡ елгәрә. Хәлдән тайып, башы әйләнеп ауған саҡтары ла була. Һуғыш тамамланғас та бөлгөнлөккә төшкән илде аяҡҡа баҫтырыу ошо уҡ кешеләр иңенә ята. Талибә апай оҙаҡ йылдар малсылыҡта эшләй. Юғары күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн ҡиммәтле бүләктәр, шифаханаларға юлламалар менән наградлана. Талибә апай Сәғәҙәтова кеүек кешеләрҙең тормош юлы олоғона ла, кесеһенә лә үрнәк. Бөтөн булмышын сабырлыҡ, түҙемлек, тырышлыҡ, изгелек кеүек сифаттар биҙәй уның. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы яҡынлағанда арабыҙҙа йәшәгән бындай хөрмәтле кешеләрҙең ҡәҙерен белергә өйрәнһәк ине. Сөнки был еңеүҙе яҡынайтыуҙа уларҙың да өлөшө сикһеҙ.

**Фәриҙә СИТДИҠОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Учалы районы Ураҙ ауылы.**

✓ *Али Карнай Башҡорт атлылар дивизияһы эргәһендә сыға башлаясаҡ "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Ул Бөйөк Ватан һуғышы фронтында сыҡҡан берҙән-бер башҡорт телендәге гәзиттең мөхәррире була.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**"Һуғыш мәлендә гәзит - һулар һауа. Кешеләр гәзитте яҡын кешеләренән килгән хаттан алдараҡ аса. Хәҙер гәзит мотлаҡ һиңә төбәлгән хат. Һинең яҙмышың унда яҙылғанға буйһона", - тип яҙа билдәле памфлет оҫтаһы Илья Эренбург һуғыш йылдарында. Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ҡәләм яҙыу ҡоралы ғына түгел, бәлки, һуғыш ҡоралына әйләнә. 1942 йылдың аҙағына һуғыш майҙанында 4 үҙәк, 13 фронт, 60 армия, 33 корпус, 600 дивизия һәм бригада гәзите сығарыла. Милли дивизиялар шулай уҡ үҙ гәзиттәрен булдыра, шулар иҫәбендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының башҡорт телендә нәшер ителгән "Ҡыҙыл атлылар" гәзите лә була.**

# "ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР" -

## Башҡорт кавалерия двизияһының пропаганда ҡоралы





*"Ҡыҙыл атлылар" гәзите хеҙмәткәрҙәре, яҙыусылар Шакир Насиров менән Әхтәм Ихсан.*

### Гәзитте кемдәр сығарған?

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитенең яҙмышы кавалерия дивизияһының һуғыштағы тәүге этабы менән тығыҙ бәйләнгән. Билдәле булыуынса, Башҡорт АССР-ында 112-се һәм 113-сө һанлы ике кавалерия дивизияһы төҙөлә. 113-сө кавалерия дивизияһы составы башҡа хәрби берекмәләргә таратып бирелә, ә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 1942 йылдың апрелендә юлға сыға. Ошо көндән алып, билдәле булған бөйөк һәм трагик рейдҡа тиклем (рейдта дивизияның күп өлөшө ҡырыла һәм һуңынан уның составы СССР-ҙың төрлө төбәктәренән килгән кешеләр менән тулыландырыла, башҡорттар нисбәте кәмей), "Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә башҡорт атлыларының легендар юлы яҡтыртыла. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡойоп ямғыр яуғанда ла, ел-дауыллы буран ҡоторғанда ла, сатлама һыуыҡта ла - ниндәй шарттарҙа ла гәзиттең һәр һанын үҙ ваҡытында фронттағы яугирҙарға еткереп тора. Гәзит һуғышсыларҙың рухын күтәрә. Уның биттәрендә яңынан-яңы мәғлүмәттәр, тыуған яҡтан килгән хаттар, һуғышсыларҙың ҡаһармандыҡтары тураһындағы яҙмалар донъя күрә. Гәзит һуғышсыларҙы батырлыҡҡа, дошмандан үс алырға өндәй.

Хәрби шарттарҙа гәзит сығарыу еңелдән булмай. Ҡайһы саҡта мөхәррир русса килгән мәҡәләләрҙе наборщиктарға туранан-тура башҡортсаға тәржемә итеп йыйҙыра. Ҡағыҙ етешмәгән саҡтар ҙа була. Әммә ниндәй генә ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, мөхәррир Али Карнай, гәзиттең бер һаны ла сыҡмай ҡалмаһын, тип тырыша.

**Дивизияла хәреф йыйыусы булып эшләгән Хөршиҙә Хәирова иҫтәлектәренән:** "Хәтеремдә, Башҡорт атлылар дивизияһы гәзитенең беренсе һанын 1942 йылдың апрелендә сығарғайныҡ. Тирә-яҡта тынлыҡ, һалдаттар шаяра-көлә, беҙгә эшләргә ҡамасаулаусы юҡ. Шуға күрәләр инде, ул саҡта миңә дивизия гәзите типографияһында эшләү артабан да бына шулай еңел генә үҙ ыңғайына барыр төҫлө тойолғайны. Тәүге һанды сығарған ваҡытта уҡ мин йыйған һәр бер бәләкәй генә ҡурғаш хәрефтең немец фашистары йөрәгенә пуля булып ҡаҙалыуын теләнем. Артабан ошо теләк көсәйгәндән-көсәйә барҙы... Бына беҙ фронттың алғы һыҙығында, Елецк ҡалаһы эргәһендәге бер ауылда. Ҡала яна, тирә-яҡты һуғыш һөрөмө ҡаплап алған. Ошонда беҙ дивизия гәзитенең икенсе һанын сығарҙыҡ, һуғыш шарттарында гәзит сығарыуҙың ауырлыҡтарын мин тәүге тапҡыр ошонда татыным. Бынан һуң беҙ шундай ауырлыҡтар менән йөҙәрләгән гәзит һандары, листовкалар баҫтырҙыҡ. Бармаҡтарым, хәрефтәр соҡоп, ҡанап бөтә торғайны. Эшебеҙ бик күп - үҙебеҙ йыябыҙ, үҙебеҙ уҡып төҙәтәбеҙ (корректор ҡаралмаған), гәзит баҫа торған машинаны ла йыш ҡына үҙебеҙгә әйләндерергә тура килә. Хатта ҡайһы саҡта гәзиттәрҙе полктарға үҙебеҙ алып барып тарата торғайнык. Төндә типографияла эшләүселәр алмашлап, ҡулға карабин тотоп, үҙ мөлкәтебеҙҙе һаҡлайбыҙ - поста торабыҙ. Ләкин беҙ, теш ҡыҫып, бирешмәҫкә, һыр бирмәҫкә тырыштыҡ. Шулай итмәй булмай. Беренсенән, ир-егеттәр ҡан ҡойоп һуғышҡанда, ниңә беҙ, ҡыҙҙарбыҙ, тип, иҙереп төшөргә тейеш? Килешмәй. Икенсенән, үҙебеҙ сығарған гәзитте уҡығас, һуғышсыларҙың дәрте күтәрелеп, батырлыҡтары артып киткәнен күреү беҙгә яңынан-яңы көс өҫтәй ине.

Һуғыштар ҡыҙыу барған көндәрҙә гәзит сығарып өлгөрөп булмай. Шундай саҡтарҙа "Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы иң мөһим хәбәрҙәр менән листовкалар баҫтыра. Редакция хеҙмәткәрҙәренә шәмде снаряд гильзаһынан эшләп алырға тура килә ине. Шинель итәгенән филтәлек бер-ике иле буҫтау ҡырҡып алып, шуны яндырып, тоноҡ яҡтылыҡта хәреф йыйып, корректура уҡып, листовкалар әҙерләйбеҙ. Гәзиттең наборщик ҡыҙҙарына көслө һуғыштар мәлендә санитар булып эшләргә лә тура килде. Улар төнө буйы эшләп арыуҙарын онотоп, һуғыш яланынан яралыларҙы алып сығып, яраларын бәйләргә тотона ине .

Бер тапҡыр алыҫ юлға сыҡҡанда гәзит сығарыу өсөн кәрәк булған типография материалдары - линейкалар, бабашкалар, башҡа материалдар ҡойолоп төшөп ҡалды. Билдәләнгән урынға барып еткәс, "Ҡыҙыл атлылар" хеҙмәткәрҙәре, нисек итеп гәзит сығарабыҙ инде, тип аптырап ҡалды. Бәхеткә күрә, разведчиктар яҡында ғына немецтарҙың типография тейәлгән бер машинаһы ҡыйралып ятҡанын килеп әйтә. Редакция хеҙмәткәрҙәре унда барып, байтаҡ техник материалдар йыйып алып ҡайтты. Гәзит ваҡытында сыҡты..."

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә танылған өс әҙип эшләй. Мөхәррир вазифаһын күренекле яҙыусы Али Карнай (Имамғәли Мөхәмәтдин улы Зөлкәрнәев) башҡара. Редакцияның яуаплы сәркәтибе икенсе бер ҙур әҙип Шакир Насиров була. Шағир Әхтәм Ихсан штаттағы хәбәрсе сифатында алғы позиция менән редакция араһында йөрөп, гәзитте мәҡәләләр менән тәьмин итә. Яу яланынан репортаждар яҙа, һалдаттарҙың мәҡәләләрен ойоштора.

Али Карнай башҡорт яҙыусыларынан иң тәүгеләрҙән булып, һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа китеү теләген белдерһә лә, уның теләге 1942 йылда ғына бойомға аша. Ошо йылдың мартында партияның өлкә комитеты тәҡдиме буйынса ул яңы ойошторолған Башҡорт атлылар дивизияһы эргәһендә сыға башлаясаҡ "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Али Карнайға бер юлы яуаплы ла, үҙенсәлекле лә вазифа йөкмәтелә. Ул Бөйөк Ватан һуғышы фронтында сыҡҡан берҙән-бер башҡорт телендәге гәзиттең мөхәррире була. Яҙыусы-журналист фашистарға ҡаршы ҡылысҡа-ҡылыс килеп һуғышҡан совет һалдаттары менән яҡындан аралаша. Улар менән бер блиндажда йәшәй, тиһәң дә була. Фронт гәзитендә "Ҡыҙылармеец Х. Мансуров" имзаһы менән ул ошо ҡыйыу көрәшселәр тураһында һөйләүсе тиҫтәнән артыҡ бәләкәй-бәләкәй очерк-һүрәтләмәләр, хикәйәләр урынлаштыра. Күләм яғынан ҙур булмаһалар ҙа, оҫта яҙыусы-журналист тарафынан яҙылған был мәҡәләләр фронт ысынбарлығының күп яғын яҡтырта. Яҙыусы Ватан һуғышы күренештәрен һүрәтләмә-мәҡәләләр аша сағылдырыу менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул Башҡорт дивизияһының һуғышсан юлын, уның батырлыҡтарын ныҡлап өйрәнә. Ҙурыраҡ әҫәр өсөн материалдар туплай. Бәрелеш булған урындарҙы тасуирлаған һәм ваҡиғаларҙы тәфсирләп яҙған көндәлек алып бара. Ләкин алыҫ Дон далаларында, өҫкә пуля ямғыры яуып торған шарттарҙа, башҡорт телендә гәзит сығарыуҙы ойоштороу, уны һуғышсыларҙы яңынан-яңы еңеүҙәргә рухландырырҙай йәнле материалдар менән тәьмин итеү яҙыусының бөтә иғтибарын ялмай. Тәүҙәрәк уға ҙурыраҡ әҫәр яҙырға форсат та ҡалмай. Был хаҡта Карнай үҙе лә: "Яҙып булмай! Ваҡыт юҡ. Ә яҙаһы нәмәләр страшно күп! Шулай ҙа тырышып ҡарарға иҫәп юҡ түгел", - тип яҙа Баязит Бикбайға ебәргән хатында.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Был ваҡытта аргиппейҙарҙан көнсығышта, Таулы Алтайҙа йәшәгән ҡәбиләләрҙе өйрәнеү уларҙың физик тибы, тиссагеттар кеүек үк, ҡатнаш булыуын, йәғни хәҙерге ҡаҙаҡтарға һәм ҡырғыҙҙарға яҡын булған монголоид компонент менән ҡатнашҡанлығын күрһәтә. Таулы Алтай халҡының беҙҙең эраға тиклем I быуат уртаһында төп шөғөлө көтөүҙә йөрөтөлгән малсылыҡ була. Уларҙың бер өлөшөнөң теле боронғо төрки теле булыуы ихтимал. Башҡортостандың көньяғында был ваҡытта иран телле ҡәбиләләр, мәҙәни яҡтан Ҡара диңгеҙ буйының төньяғында йәшәгән скифтарға яҡын торған савроматтар йәшәгән. Беҙҙең эраға тиклемге һуңғы йылдарҙа һәм беҙҙең эраның беренсе быуаттарында Урал алды тарихындағы сармат осоро савромат осороноң дауамы булып, башҡорт халҡын ойоштороу процесына артыҡ йоғонто яһамаған, күрәһең.

Савромат ҡәбиләләренең береһе - сарматтар Башҡортостандың көньяғынан төньяғына, Өфө ҡалаһы параллеленә тиклем үтеп ингән. Урал алды сарматтарының физик тибы етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән, шулай ҙа уларҙың киң һәм йәйенке йөҙҙәре буйынса монголоид компонент булыуын күҙалларға мөмкин. II быуаттан IV быуатҡа тиклем Башҡортостандың көньяғында сарматтарҙың бер ҡәбиләһе - аландар күтәрелә. Уларҙың Башҡортостанда IX быуатҡа тиклем булыуын археологик ҡаҙылмалар ҙа раҫлай.

Стәрлетамаҡ эргәһендәге алан ҡәберлегенән табылған һәм Т. А. Трофимова өйрәнгән антропологик материалдар буйынса фекер йөрөткәндә, был ҡәбилә үҙенең физик тибы буйынса бер төрлө генә булмай, нигеҙҙә, мезатикран ҡатыш брахикран була. Дөйөм европеоид типта саҡ ҡына монголоид компонент ҡатнашлығы ла һиҙелә.

IV быуаттан алып Уралдан көньяҡтараҡ урынлашҡан далаларҙан Башҡортостанға ошо крайҙың аҫаба халҡы тарафынан ассимиляцияланған күсмә ҡәбиләләр үтеп инә.

Беҙҙең эраның VII-VIII быуаттарында Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында башҡорт халҡының составына ингән булғарҙар күренә (Бүләр, байлар ырыуҙары). Артабан уның составына ҡырғыҙҙар (Ҡырғыҙ ырыуы), ҡыпсаҡтар (Ҡыпсаҡ ырыуы), шулай уҡ Оло жуз ҡаҙаҡтары менән дөйөм булған ҡаңлы (Ҡаңлы ырыуы) ырыуы, Кесе жуздан кирейҙәр (Гәрәй ырыуы) һәм орхон яҙмалары буйынса Төрки ҡағанатының һалым түләүселәре булған ҡатайҙар инә. Башҡорттар тарихының нуғай осоронан башлап башҡорттар составына нуғайҙар (Мең һәм Бөрйән ырыуҙарының Нуғай түбәләре) инә. Шунда уҡ, бәлки, бер аҙ алдараҡтыр ҙа, башҡорт ырыуҙары составында һарттар (Әйле һәм Урал аръяғы Ҡатай ырыуҙарының Һарт түбәләре, Урал аръяғындағы Һарт-Ҡалмаҡ башҡорт дачаһы), төркмәндәр (Көҙәй ырыуының Ләмәҙ-төркмән түбәһе), һуңғараҡ, бәлки, Рәсәйгә ҡушылғандан аҙаҡтыр, ҡалмыҡтар, мишәрҙәр (Юрматы ырыуының мишәр-юрматы түбәһе) инә.

Д. Н. Соколов Урта Азия халыҡтары менән башҡорттарҙың уртаҡ атамалы ҡәбиләләре тип меңдәрҙе, табындарҙы, тамъяндарҙы һәм таҙларҙы билдәләй.

***✓ Өфөнән донъяның теләһә ҡайһы мөйөшөнә тура рейстар асыу мөмкинлеген арттырасаҡ. Дөйөм алғанда, яңы терминал аэровокзалдарға ҡуйылған иң юғары һәм заманса талаптарға яуап бирә.***

# УҢЫШ АЛЫР ӨСӨН...

## орлоҡ сәсергә кәрәк

**ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының сираттағы саммиты Өфөлә уҙасаҡ, тигән хәбәр йәмғиәтте бер нисә өлөшкә бүлде: берәүҙәр шунда уҡ кире ҡарашын белдерһә, икенселәр глобаль кимәлдә фекерләп, уның ыңғай яҡтарын күрергә тырышты, бәғзеләр әлегә ситтән генә күҙәтеүсе булып, ҡайһы яҡҡа ауышырға белмәй аптырана, битарафтарға иһә - ике донъя, бер мөрйә... Беҙ иһә барлыҡ һорауҙарға яуап табыу маҡсатынан тәүсығанаҡҡа - ошо самиттарҙы үткәреү өсөн яуаплы булған "ШОС һәм БРИКС - 2015" офис-төркөмө директоры, БР министры Руслан Зәһит улы МИРСАЯПОВҡа мөрәжәғәт иттек.**



**▸ Юғары кимәлдәге оло сараның тап Өфөлә үтеүе баш ҡала ғына түгел, республика өсөн әһәмиәте нимәлә?**

- Рәсәй Федерацияһы составында баш ҡалаһы Өфө булған Башҡортостан тигән матур төбәк барлығын сит илдә генә түгел, хатта Рәсәйҙә лә етерлек дәрәжәлә белмәүҙәре бер кемгә лә сер түгел. Әгәр шулай икән, хәҙерге ваҡытта һәр төбәк йәлеп итергә тырышҡан туристар һәм инвестициялар ағымы ҡайҙан килергә тейеш? Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, Өфөнөң бөгөн ил картаһында географик ҡына түгел, халыҡ-ара сәйәси үҙәк булып күренеүе менән беҙ иң элек ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары уҙғарылыуға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Сара барышында республика баш ҡалаһына 16 дәүләт һәм ил башлығы киләсәк. Әлегәсә бындай юғары кимәлдәге ике халыҡ-ара ойошманың ултырышы бер үк ваҡытта бары тик Екатеринбург ҡалаһында ғына үткәрелде. Ул саҡта ла БРИКС түгел, ә БРИК ҡына ине, йәғни ойошмаға Көньяҡ Африка инмәгәйне әле. Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһын ғына (ШОС) алып ҡарағанда ла, берләшмәгә ингән илдәрҙең (Ҡытай, Рәсәй, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан һәм Үзбәкстан) дөйөм территорияһы 30 миллион квадрат километр тәшкил итә, йәғни Евразия территорияһының 30 процентына тиң. Уның дөйөм демографик ҡеүәте - планета халҡының дүрттән бер өлөшө, ә иҡтисади ҡеүәте АҠШ-тан ҡала икенсе урында килгән ҡеүәтле Ҡытай иҡтисадын үҙ эсенә ала. Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алғанда, был Өфө өсөн эшлекле, мәҙәни, сәйәси үҙәк булараҡ үҙен донъя масштабында күрһәтеүгә һәм оҙайлы стратегик әһәмиәткә эйә бер мөмкинлек тип ҡарарға кәрәк.

Әгәр саммиттар баш ҡалала үтмәһә, һаманғаса ҙур күләмдәге саралар уҙғарырлыҡ инфраструктураға эйә булмаҫ инек. Был йәһәттән Өфө Рәсәйҙең башҡа халҡы миллиондан ашыу булған ҡалаларынан ныҡ артта ҡалғайны. Дөрөҫөн әйткәндә, быға тиклем бында эшлекле һәм туристик хеҙмәттәшлекте үҫтереү өсөн һынылыш яһарлыҡ, алға һикерерлек инфраструктура мөмкинлеге булманы ла. Хәҙер иһә бер үк ваҡытта 3 мең кешене ҡабул итеү ҡеүәтенә эйә Конгресс-холл халыҡ-ара кимәлдәге осрашыуҙарҙы төп ҡабул итеү урынына әйләнә. Әйткәндәй, унда бер үк ваҡытта бер нисә форум уҙғарырға мөмкин. Ҡунаҡханалар һәм уларҙағы хеҙмәтләндереү ҙә тейешле кимәлдә түгел ине. Саммиттар арҡаһында үҫешкән инфраструктура Өфөнө Европа менән Азияның осрашыуҙар уҙғарыу өсөн географик яҡтан уңайлы икәнлеген раҫлап ҡына ҡалмай, уның хеҙмәттәшлек өсөн дә перспективалы үҙәк булыуын күрһәтә. Был саранан тыш, көҙгөһөн ШОС һәм БРИКС илдәренең эшлекле даирәләре араһында төбәк-ара осрашыуҙар үткәреү планлаштырыла. Йәғни ил башлыҡтары һөйләшсе лә таралышты түгел, ә уларҙың эше һөҙөмтәһе төрлө өлкәләр буйынса артабанғы проекттарҙа дауам итәсәк. Уңыш алыу өсөн бөгөн орлоҡ ҡына сәсәбеҙ әле.

**▸ Билдәле бер мәлдән ваҡытты кирегә һанай башларға күнеккәнбеҙ. Әле лә оло саммиттар етерен 100 көндән һуң кирегә һанай башланыҡ. Ә календарҙың биттәре көн һайын йоҡара бара. Республика үҙенә алған бурысын, йөкләмәһен үтәп, әҙерлек эштәрен тамамлап өлгөрәме?**

- Әгәр был турала кисә-бөгөн генә мәғлүм булһа, әлбиттә, өлгөрмәҫ инек, әммә әҙерлек эштәре ике йыл барҙы, шуға күрә был сараны ныҡлы әҙерлек менән ҡаршылайбыҙ, тип ышаныслы әйтә алам.

Тәртип тупһанан башлана, тигән кеүек, делегацияларҙың Башҡортостан еренә аяҡ баҫыуы "Өфө" аэропортынан башланасаҡ һәм тәүге фекер ҙә шунда тыуасаҡ. Мәғлүм булыуынса, саммиттарға бәйле аэропортта ҙур эштәр башҡарылды. Хәҙер беҙ таможня тикшереүен тиҙ һәм уңайлы шарттарҙа үтә аласаҡбыҙ. Әгәр быға тиклем хеҙмәтләндереү сәғәтенә 200 кешене үткәреү менән сикләнһә, артабан ул сәғәтенә 800 кешегә тиклем артасаҡ. Икенсе осоу-ултырыу һыҙаты сафҡа инеүе һәм киң фюзеляжлы һауа судноларын ҡабул итеү мөмкинлеге тыуыуы Өфөнән донъяның теләһә ҡайһы мөйөшөнә тура рейстар асыу мөмкинлеген арттырасаҡ. Дөйөм алғанда, яңы терминал аэровокзалдарға ҡуйылған иң юғары һәм заманса талаптарға яуап бирә. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: модернизацияланған "Өфө" аэропорты "Рәсәйҙең һауа ҡапҡаһы" Милли премияһында икенсе урын яуланы. Әлбиттә, был эштәр ҡасан да булһа башҡарылыр ине, әммә саммиттар уның тормошҡа ашыуын тиҙләтте.

Артабан ҡунаҡтар ултырған кортеж әлеге ваҡытта ремонт эштәре алып барылған "Өфө-Аэропорт" юлынан үтәсәк. Делегациялар заманса ҡунаҡханаларға урынлаштырыласаҡ. Оло сара алдынан баш ҡалала 7 отель төҙөлдө, элеккеләренең номер ҡеүәте арттырылды һәм улар заман талабына яраҡлаштырылды. Әлеге ваҡытта операторҙар үҙҙәренең "йондоҙлолоҡ" кимәлен билдәләү өсөн хеҙмәтләндереү буйынса ҡуйылған талаптарҙы раҫлауға сертификация процедураһын үтә, персонал туплап, уларҙы уҡыта. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: отелдәрҙең кимәле йондоҙҙары буйынса түгел, ә уның атамаһы буйынса билдәләнә. Мәҫәлән, Hilton операторының ғына Өфөлә өс кимәлдәге отеле буласаҡ. Улар атамалары буйынса айырыла һәм хеҙмәтләндереү кимәле лә төрлөсә. Беҙ делегацияларға алдан уҡ ниндәй отелдәр булыуы хаҡында мәғлүмәт ебәрәбеҙ, улар үҙҙәре ҡайҙа урынлашырға икәнен хәл итә. Сараға ил башлыҡтары килеүенә ҡарамаҫтан, улар төп делегация менән бер урында йәшәйәсәк. Йәғни ҡунаҡханаларҙа президенттар кимәлендәге ҡунаҡтарҙы урынлаштырырлыҡ люкс номерҙар ҙа бар.

**▸ Баш ҡала өсөн иң ҙур проблемаларҙың береһе булып ниндәйҙер сара үткәндә йәки юғары даирәләрҙәге ҡунаҡ килгәндә юлдарҙың ябылыуы, шул сәбәпле тығындар барлыҡҡа килеүе тора. Саммит ваҡытында ниндәй сикләүҙәр буласаҡ?**

- Делегациялар ултырған кортеж үткән ваҡытта аэропорт юлында ғына бер ни тиклем хәрәкәт ябылып тороуы мөмкин, әммә оҙаҡҡа түгел. Сара үткән урындарҙа йәмәғәт транспорты маршруты ла бер аҙ үҙгәреш кисерәсәк, әммә был артыҡ проблемалар тыуҙырмаҫ, тип уйлайым. Ә инде төп сара Конгресс-холл бинаһында үткәнлектән, уның эргә-тирәһендәге территория был көндәрҙә айырым статусҡа эйә буласаҡ һәм территория эсенә инеү махсус пропуск буйынса тормошҡа ашырыласаҡ. Сөнки юғары кимәлдәге саралар барышында именлек тәьмин итеүҙең үҙенең принциптары бар. Йәғни Салауат Юлаев майҙанына инеү тыйыласаҡ.

Саммит ваҡытында Ағиҙел яры буйындағы Өфө амфитеатры булараҡ телмәребеҙгә килеп ингән урында башҡорттарҙың, татарҙарҙың, рустарҙың һ.б. тормош-көнкүрешен сағылдырған Этно-ауыл ойоштороласаҡ, төрлө күргәҙмәләр эшләйәсәк. Ҡунаҡтарға мөмкин булған тиклем республиканың барлыҡ өлкәләге ҡаҙаныштарын күрһәтеп ҡалырға тырышасаҡбыҙ. Әммә баш ҡалалағы барлыҡ музейҙар, күргәҙмәләр, мәҙәниәт һарайҙары ғәҙәти режимда эшен алып барасаҡ.

**▸ Сара күпме сығым талап итте?**

- Саммит үткәреү өсөн артыҡ финанс сығымдары кәрәкмәй. Бында мәсьәлә икенсерәк тора: ошо һылтау менән баш ҡаланың инфраструктураһын үҫтереп ҡалыу. Сөнки ҡунаҡ килер алдынан һәр хужа үҙенең йортон, ихатаһын тәртипкә килтерә. Кесе өйгә ни кәрәк - олоһона ла шул кәрәк, тигән принциптан сығып ҡарағанда, уртаҡ йортобоҙҙо төҙөкләндереү өсөн Рәсәй бюджетынан ике миллиард һум аҡса бүленһә, республиканың һәм Өфө ҡалаһының Конгресс-холды, аэропорттағы халыҡ-ара терминалды тейешле кимәлгә еткереү өсөн һәр береһенә 600-әр миллион һумы сыҡһа, шәхси инвесторҙар ҡунаҡханалар төҙөүгә 6 миллиард аҡсаһын тотондо. Заманса ҡунаҡханалар йәшәү һәм туҡланыу хеҙмәте генә күрһәтмәй. Транспорт, элемтә, экскурсиялар ойоштороуҙы ла үҙ эсенә ала. Донъяның барлыҡ отелдәре лә иҡтисадсылар, логистар, маркетологтар иҫәпләп төҙөгән бизнес-планға ярашлы эшләй, йәғни файҙа булмаған ерҙә төҙөлөш эштәре алып бармай. Әлеге сығымдарын улар 8-10 йыл эсендә ҡапларға ниәтләй. Ләкин саммиттар үтә лә, был эш туҡтап ҡала, тип уйларға ярамай, алдағы йылдарға ла Рәсәй бюджетынан модернизацияға, юлдар төҙөүгә аҡса бүленәсәк әле.




**▸ Саммиттарға әҙерләнеү барышында яңы инвестиция проекттары барлыҡҡа килеүе хаҡында ла мәғлүм. Улар менән дә ҡыҫҡаса ғына таныштырып китегеҙ әле.**

- Проекттарҙың береһе республикала йылына 300 мең тонна металл етештереү буйынса ҡорос прокатлау заводын төҙөүҙе күҙаллай. Әлеге ваҡытта "Ишембай ҡорос" предприятиеһы һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһының Цяо-Лян провинцияһының ауыр сәнәғәт проект институты араһында һөйләшеүҙәр үтте. Проекттың дөйөм хаҡы - 7 миллиард һум. Хәҙер инде предприятиеның проекты эшләнә.

Шулай уҡ "Сингидро Корпорэйшн" компанияһы республикала ҡайһы бер

✓ **Әйткәндәй, хәҙерге йәштәргә ҡарап, һоҡланам: элек туйҙарҙа йәштәр эсеп, һуғышып бөтә ине, хәҙер аҡыллы ғына күңел асалар. Араларында спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй эсмәүселәр күбәйгәндән-күбәйә бара.**



инвестиция проекттарына иғтибар йүнәлтте. Һүҙ - индустриаль парк һәм һыу йөк порты төҙөлгән махсус төбәк иктисади зонаһын булдырыу хаҡында. Шулай уҡ һөҙөмтәле энергия технологиялары технопаркын һәм автомобиль юлдарын төҙөү планлаштырыла.

"Чжонгэ Импорт Экспорт Трэйд" компанияһы баш ҡалала үҙенең вәкиллеген асты һәм ҡунаҡхана комплексы булған сауҙа-логистика үҙәге төҙөүҙе планлаштыра. Әлеге ваҡытта уны тормошҡа ашырыуға бәйле мәсьәләләр хәл ителә.

Нефть һәм газ ҡорамалдары производствоһын төҙөү буйынса "Хайчен Нефтемаш" компанияһы менән хеҙмәттәшлек проекты буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла.

Республика ойошмалары һәм Хубэй, Хунань провинцияларының фәнни ойошмалары араһында ғилми-техник, инновацион өлкәләрен үҫтереү сектерендә Өфөлә Башҡорт-ҡытай ғилми-техник хеҙмәттәшлек һәм технологияларҙы коммерциализациялауҙың инжиниринг махсус үҙәге булдырыу теләге бар.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында тәбиғи газ өсөн компрессорҙар эшләү буйынса предприятие булдырыуға ла инвестициялар йәлеп ителде. Ҡытай Халыҡ Республикаһына 3 миллиард һумлыҡ күләмдә башҡорт балы ебәрелә башланы.

**▸ Оло сара ваҡытында эшләү өсөн ирекмәндәрҙе йәлеп итеү буйынса конкурс иғлан ителеп, унда бихисап кеше теркәү үткәйне. Әммә 500 кеше генә һайлап алынасаҡ. Уларға ниндәй талаптар ҡуйылды?**

- Талаптар бик юғары булманы, тип әйтергә мөмкин. Иң мөһиме, теләк белдереүсегә 18 йәш тулырға, ул уҡыу һәм сара барышында ирекмәнлек менән шөғөлләнгәндә йәшәү мәсьәләһен үҙаллы хәл итергә тейеш ине. Улар саммиттарҙа ҡатнашыусы илдәр тураһында дөйөм мәғлүмәт, республикаының иҗтимағи хәрәкәттәре тарихын һәм төп характеристикаһын белергә тейеш. Бының өсөн махсус курстарҙа уҡытыу ойошторолдо. Участкалар буйынса билдәләнгәс, ирекмәндәр тағы ла инструктаж үтә. Берәүҙәр ҡунаҡтарҙы аэропортта ҡаршы ала, икенселәре - тейешле урынға тиклем оҙата йәки ҡунаҡханаға урынлашырға ярҙам итә, өсөнсөләр сит илдән килгән матбуғат саралары вәкилдәрен оҙатып йөрөйәсәк.

Теләк белдереүселәр күп булһа ла, бәгзеләре, тел белһән етә, тип уйлағандыр, моғайын. Былтыр сентябрҙә башланған уҡытыу барышында ирекмәндәрҙең һаны ҡырҡа кәмене. Әммә саммитта улар етерлек буласаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Оптимист һәм пессимист ике баланы ике бүлмәгә ябып ҡуйып, уларҙың үҙҙәрен нисек тотошон тикшерергә булғандар. Пессимист балаға төрлө уйынсыҡтар менән тулы бүлмә, оптимисына иҙәне ат тиҙәге менән ҡапланған бүлмә эләккән. Күпмелер ваҡыттан һуң ишекте асып ҡараһалар, пессимист бала тәгәрмәсе төшкән машинаны тотоп, илап ултыра, ти. Ә оптимисы шарҡылдап көлә-көлә аяғы менән тиҙәкте бер урынға өйөп йөрөй икән. Тәжрибә үткәреүселәр уның ҡылығына үҙҙәре уҡ аптырап: "Нимә эшләйһең ул?"- тип һорағандар. "Һеҙ уйнарға ҡуштығыҙ, мин уйнайым, тиҙәк араһында ҡайҙалыр пони ҙа йәшеренгән булыуы мөмкин бит", - тип яуаплаған бала. Фекер осон нимәгә бормаҡсымын: һәр нәмәнең киреһен күрергә тырышмайыҡ, ә ыңғай ягын эҙләйек, үҙебеҙгә файҙа алып ҡалайыҡ. Шул уҡ ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтары саммиттарынан да.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ИР-ЕГЕТТӘР ҠОРО

# "ЯЛБЫР БАШЛЫ" ТҮРӘГӘ...

## холоҡһоҙ ир - күләгә

**Кем ул ысын ир-егет? Ир затынан булған кеше Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән бурысын, мөҙҙәтен аңлап йәшәһен өсөн нимә кәрәк? Ниндәй шарттарҙа сыныға ул ир характеры? Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ күләгәһенән сығырға ынтыламы бөгөнгө ирҙәребеҙ? Әллә уларға ошолай йәшәү күпкә уңайлыраҡ, йәтешерәкме? Ошо һорауҙарға Баймаҡ районы Ярат ауылы мәктәбенең хеҙмәт, география, йыр, ОБЖ предметтары уҡытыусыһы, ауылда "Ир-егеттәр ҡоро"н ойоштороған уҙаман Илгиз Ғәлимнур улы ЙӘНБИРҘИН менән яуап эҙләйбеҙ.**



### Ирҙәр ҡайҙа булған?

Ауылда йәшәүҙең бер ҡыҙыҡлы яғы бар - унда һәр кешенең кем икәнен, нимә эшләп йөрөүен барыһы ла белеп тора. Мин үҙем ошо ауылда тыуып, ғүмерем буйы ошонда йәшәгән кеше буларак, ауылдаштарымды яҡшы беләм. Ҡарап йөрөйөм: беҙҙә генә түгел, башҡа ауылдарҙа ла ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрҙән бер аҙымға алдараҡ барған һымаҡ тойола башланы. Етәксе урындарҙа - ҡатын-ҡыҙ, йәмәғәт эштәрендә - ағинәйҙәр, хатта автомобилдә лә гүзәл заттар күберәк йөрөй.

Бәй, элек йомғиәтте тотоп торған, уның барлыҡ мәшәҡәттәрен, ырыу-ара низағтарҙы хәл итеүҙе үҙ ҡулына алган сәсәндәр, батырҙар, түрәләр ҡайҙа һуң? Бер уйлаһаң, аҫыл ирҙәр ҙә бар, улар һаман дә үҙ хеҙмәтен намыҫлы башҡара. Әммә ирҙәргә элеккесә хөрмәтләп ҡарау бөтөп бара. Элек урамда берәй малай күренһә, оло инәйҙәр ҙә уның юлын ҡыймаған - ситләтеп үткән. Малайҙар үҙҙәренең ир затынан булыуын бала саҡтан уҡ белеп, тойоп үҫкән. Ә хәҙер малайҙар араһында ҡыҙ фиғеллеләр ҙә осрап ҡуя. Ғәҙәттә, әсәләре йә өләсәләре яңғыҙ тәрбиәләгән малайҙар ошондай булып үҫә. Малайҙар ғына түгел әле, оло йәштәге ағайҙар ҙа бөгөн ҡатындарының күләгәһенә йәшеренеп көн күрә. "Нинә улай мыҫҡыл ителеп йәшәйһең? Нинә дәрәжәндә юғарыраҡ күтәрмәйһең - аҡса эшләмәйһең?" тиһән, "Эйе шул, шулай итергә кәрәк инде ул..." тип, ыңғайға һыпыралар ҙа, элеккесә йәшәй бирәләр. Әллә ундайҙарға ошолай йәшәү уңайлыраҡмы икән, тип тә уйлап ҡуяһың.

Ошондай һорауҙар солғанышында йөрөй торғас, быламын тиген ирҙәр менән берләшеп, ҡор төҙөп, ир-егеттәребеҙҙең эшен күрһәтерлек, дәрәжәһен күтәрерлек саралар ойоштора башларға кәрәк, тигән һығымтаға килдем. Шулай барлыҡҡа килде лә инде беҙҙең 5 кешенән торған "Ирҙәр ҡоро".

### Үҙең өлгө булмай тороп...

Был ҡор сағыштырмаса йәш, әммә донъяның әсесөсөһөн татып, етерлек тәжрибә туплап өлгөргән ир уҙамандарынан - Камил Әхмәтов, Мөхтәр Монасипов, Рафаэль Хәмитов, Ғирфан Мырҙаҡаев һәм минән ғибәрәт. Ҡорға һайлап алынған егеттәрҙең һәр береһенең бынамын тигән йорто, тимәк, тырыш, булдыҡлы тигән исеме, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртерлек абруйы бар. Биш кешенең өсөһө спиртлы эсемлектәрҙе ауыҙына ла алмай. Йәғни, йәштәргә бар яҡлап өлгө булырҙай ирҙәрҙе генә һайлап алдыҡ. Дөрөҫ, бөтөнләй идеаль кешеләр юҡ ул донъяла. Йәш саҡта эсергә, тәмәке тартырға ярамай, тип өйрәтеүсе кеше булмағас, ул ғәҙәтәр менән дә шаярылды. Әммә бер туйҙа иҫереп, туйҙы күрмәй ҡалғанымдан һуң ғәрләнеп, башҡа эсмәҫкә ҡарар иттем. Бер айҙан һуң үткән тағы бер туйҙа айыҡ көйө ҡатнаштым. Хәҙер 10 йылдан ашыу был эсемлектә ауыҙыма ла алғаным юҡ. Әйткәндәй, хәҙерге йәштәргә ҡарап, һоҡланам: элек туйҙарҙа йәштәр эсеп, һуғышып бөтә ине, хәҙер аҡыллы ғына күңел асалар. Араларында спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй эсмәүселәр күбәйгәндән-күбәйә бара. Минең улым да эсмәй ҙә, тартмай ҙа, яңыраҡ өйләндерҙек, әле Баймаҡ ҡалаһында эшләп йөрөй. Улыма үҙем яҡшы өлгө күрһәтмәһәм, эсеп йөрөп, уны алама ғәҙәттәрҙән баш тартырға өндәһәм, ул: "Атай, һин тәүҙә үҙендә бел, аҙаҡ мине өйрәтерһең", - тип әйтмәҫ ине, тимә.

### "Ирҙәр ҡоро" барҙа, өмөт бар

Яңы ғына эшләй башлағанға күрә, әллә ни маҡтана алмайбыҙ әлегә. Атҡарып сыҡҡан эштәрҙән - ауылдаштар, мәктәп уҡыусылары, коллегалар менән бергәләшеп, экологик өмәләргә сығыуҙы әйтергә була. Унда һәр кем ҡулынан килгәнсә ярҙам итте. Мәктәп эргәһендәге оло баҡсабыҙҙа тирә-яҡҡа шом һалып, ҡотһоҙ күренеш булдырып ултырған ҡороған ағастарҙы киҫеп, "Беларусь" тракторына тейәп, биш арба ҡоро ағас сығарып түктек, егеттәр менән бергәләп хужалары киҫеп киткән йорттоң ҡоймаларын йүнәттек. Хәҙер ул урындан үткән һайын күңелгә рәхәт. Ял көндәрендә, байрамдарҙа киске, төнгө ваҡытта беҙҙең дружина ауыл урамдары буйлап йөрөй. Ауыл урамдары буйлап берике тапҡыр үтһәң дә файҙа. Мәктәп уҡыусыларына төрлө темаларға лекциялар һөйләү тәжрибәбеҙ ҙә бар. Әле бына сираттағы һөйләшеүебеҙ алама ғәҙәттәрҙе киҫәтеүгә арналды. Аноним тест һөҙөмтәләрен ҡараһаҡ, 11-се синыфта уҡыусыларҙың барыһы ла тиерлек спиртлы эсемлек эсеп ҡараған булып сыҡты. Хеҙмәт, ОБЖ дәрестәрен алып барыуым арҡаһында минә малайҙар менән эшләүе икеләтә уңайлы. Хәрби әҙерлек дәресе буйынса районда йыл һайын үткәрелә килгән хәрби йыйында 10-сы синыф егеттәре менән ҡатнашып, 5 көн әрме хеҙмәте шарттарында көн итеү шулай уҡ ныҡ ярҙам итә. Ошо лагерҙан ҡайтҡас, егеттәрҙе алыштырып ҡуялар, тиерһең: 11-се синыфҡа улар тыңлаусан булып, бер башҡа "үҫеп" киләә. Улар менән төрлө темаларға әңгәмәләр үткәреү ҙә еңеләләшә. Яңғыҙ әсәләр, өләсәйҙәр ҡарамағында үҫкән малайҙарға ир тәрбиәһе биреү йүнәлешендә лә эш алып барам. Ләкин ул балалар ҙа, ҡатындарына бирешеп йәшәгән ирҙәр кеүек, беҙҙең әңгәмәләр ваҡытында ипкә килгән һымаҡ булһалар ҙа, өйҙәрендә киренән элекке хәленә ҡайта.

Себерҙән күп аҡса туплап ҡайтҡан ағайым бер көндө: "Бассейн төҙөһәң дә, барыбер был ауылдың киләсәге юҡ", - тип аптыратты. Мин: "Рим ағай, һин ҡырҙа йөрөп, аҡса туплап ҡайттың, Өфөлә йәшәйһең. Шулай ҙа һин нимәгә ауылға ҡайтып, балыҡҡа йөрөйһөң? Әгәр ҙә һин ҡайтҡан саҡта минең ҡоймаларым емерелеп ятһа, һинең күңеленә нисек булыр ине икән?" - тигәйнем: "Уныһы ла бар, ҡустым", - тине. Беҙ - ауылдың патриоттары. Беҙ ауылда ҡалғанбыҙ икән, ауылда йәшәйәсәкбеҙ. Ауылды бөтөрмәйәсәкбеҙ - киреһенсә, үҫтерәбеҙ, тибеҙ, Алла бирһә. Ошондай маҡсат менән эшләйбеҙ.

### Ауыл үҙен күрһәтәсәк әле

Бая әйткәнемсә, ауылда берәү бер нәмә эшләһә, икенсеһе унан күреп, үҙе лә эшләргә тырыша. Ауыл шулай яйлап матурая. Гәрсә, йәшәү ҙә ауырыраҡ беҙҙә - ямғыр йыш яуып ҡыуандырмай, фермерҙар ҙа мандып китә алмай. Ялҡау, тип, берәүҙе лә әйтә алмайым. Һәр кем эшләй. Әммә эшенең һөҙөмтәһен күрә алмайҙар - шуныһы ҡыйын.

Шулай ҙа өмөтләнәп, шуны әйтке килә - ауыл үҙен күрһәтәсәк әле. Кемдер ауылдың киләсәген өмөтһөҙ тип уйлай икән, ныҡ хаталана. Боронғо йолалар тергеҙелә, яңынан-яңы социаль программалар ҡабул ителә - былар ҙа ауылдың киләсәген тәьмин итә. Күрше Ғүмәр ауылында йәштәр, балалар күп булыуы ҡыуандыра. Беҙҙә лә Герой-әсәләр бар. Шуға, ауыл йәшәйәсәк әле, тип, тулы ышаныс менән әйтә алам

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ирҙәр юҡмы ни хәҙер, тигән һорауға яуапты әллә ҡайҙан эҙләргә лә кәрәкмәй: мәҫәлән, Ярат ауылында ысын ир-азаматтар бар һәм улар тотош ауылды күтәрмәләү маҡсаты менән йәшәйҙәр. Ә ысын ир кем ул тигән һорауға яуапты һәр кем үҙе белә. Был хәрәкәт башҡа төбәктәргә лә таралыр, тип уйлайбыҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

***✓ - Был - ҡаҡы. Күрәһеңме, һары ғына сәскәләре саҡ күренеп килә. Әле ҡаҡы ҡатмаған да - ыуыҙ ғына. Һабағын әрсеп аша, йәме, - тип һөйләнә-һөйләнә, ҡартинәйем миңә ашарға яраҡлы үләндәр күрһәтә башланы.***



## ХӘТЕРКИТАП

**Гәзит уҡыусы иғтибарына Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында сабый ғына булған Венера Абдуллинаның бала саҡ хәтирәләрен тәҡдим итмәксебеҙ. Яҙмала сабый ҡыҙ бала тыныслыҡтың, һиллектең ике сүрәтен асыҡлай, тәү тапҡыр ҡайғы төшөнсәһе менән күҙмә-күҙ осраша. Кеше, ҡунаҡ рәүешендә генә был донъяға килеп, уның михнәттәрен дә, шатлығын да татыған һымаҡ, Венера исемле ҡыҙыҡай ҙа, күрше ауылға ҡунаҡҡа барып, үҙе лә һиҙмәҫтән, был донъяның яҡты һәм ҡараңғы яҡтары шаһиты була...**

Беҙҙең үҙ өйөбөҙ юҡ, шуға, йә әбейҙәрҙә, йә бабайҙарҙа, йә абзыйҙарҙа өйҙәш булып торабыҙ. Өйҙәш булғас, минә, хатта ҙур үҫкән 5 йәшлек ҡыҙға ла, тауышланырға ярамай. Сит кеше балаһы кемгә хәжәт инде, тегеһе лә, быныһы ла тыя, әрләй башлай. Ә ҡартинәйем ҡайтһа, шундай рәхәт - шатлығым эсемә һыймай, һикергем, уйнағым килә. Әммә ул да миңә шауларға ҡушмай. Ниңә ул да мине тыялыр? Әлеге лә баяғы, өйҙәшлек касафатылыр инде.

Әле бына рәхәтләнеп, киң ялан буйлап, икәү генә знакумдарға ҡунаҡҡа китеп барабыҙ. Ғәҙәттә, ҡартинәй ҡунаҡҡа мине алып йөрөтмәй - үҙе генә барып ҡайта. Ундай мәлдәрҙә уны һағынып, илап алам. Ә бөгөн - рәхәт. Матур сыуаҡ көн. Ғәзиз кешем эргәмдә генә барғас, был көн тағы ла йәмлерәк төҫлө. Мин талпынып ҡысҡыра-ҡысҡыра алға ҡарай йүгерәм, тау-урмандар аша ҡаҡлығып, миңә кире килеп ишетелгән шаңдауҙы тыңлап алам да, үләндә тәгәрләп, тәкмәс атып китәм. Күктә ап-аҡ толпар-болоттар йөҙә. Күҙҙе ҡыҫа биреп ҡараһаң, ошо болоттар менән бергә үҙең дә йөҙгән һымаҡ тойола. Ни эшләп улай икән? Мин күктә йөҙмәйем бит, ә ерҙә ятам. Ҡыҙыҡ... Бейектә, талпынып, ниндәйҙер ҡоштар һайрай. Улар уҡтай атылып төшә лә, күҙ күрмәҫлек бейеклеккә кире ынтыла. Бындай иркенлекте, был тиклем һиллекте әле минең бер ҡасан да тойғаным юҡ...

Үҙе генә белгән көйҙәрҙе ауыҙ эсенән көйләп, мин яткан урынға килеп еткән ҡартинәйемә: "Ҡартинәй, ә кешеләр һауаға менә аламы ул? Нисә баҫҡыс кәрәк икән унда менергә? Ана, ҡоштар ҙа болоттарҙан бейек оса бит. Һауала йәшәп буламы икән ул?" - тигән һорауҙар яуҙырырға керешәм.

- Баҫҡыс ҡуйып, менерлек түгел - ете ҡат бит ул күк йөҙө, беҙ ул ҡаттарҙың береһен генә күрәбеҙ, - тип яуаплай күпте белгән ҡартинәйем. Уның был яуабы минең ҡыҙыҡһыныуымды тағы ла арттыра:

- Кем уны һанап төшкән?

- Кит, кафыр һүҙе һөйләп торма, китапта шулай яҙылған, - тип, ҡырт киҫә ҡартинәйем.

Көн эҫетеп, ҡояш түбәне ҡыҙҙыра башланы. Хәҙер, ни эшләптер, ялан буйлап йүгергем лә, ҡысҡырып уйнағым ла килмәй. Ҡартинәй артынан киләм.

- Йә, атла тиҙерәк, хәҙер Ерекле йылғаһына етәбеҙ, шунда хәл алырбыҙ, - тип, ул мине ҡабаландыра. Быны

Ерекле йылғаһына ла килеп еттек. Йылға тигәне ҡойоло бер үҙән генә икән: һыуы кибә яҙған. Ниңә улай? Аңламайым.




- Һуғыш ваҡытында ерекҙәрен киҫеп бөтөрҙөләр, шуға йылғаһы ҡороно, ҡойоһо ғына ҡалды, - тип, ҡартинәйем шәльяулығынан еп һурып алды ла, һыуға һалды. Берәй ырым булғандыр, тип уйлайым хәҙер. Бына ул шәлен һыуға йәйгәйне, уның өҫтөнә таҙа ғына һыу һарҡып сыҡты. "Эс, әйҙә!" тип, миңә өндәште. Мин, тубыҡланып ултырып, һыуһыным ҡанғансы яулыҡ менән һөҙөлгән һыуҙы эстем. Ҡартинәй, бер һынлыҡ сөсө күмәс һоноп, бер-нисә үлән йолҡоп, "ҡушып аша", тип, миңә тотторҙо. "Бынағайыш, үлән ашарға мин һарыҡ түгел дә баһа!" тип уйлап алдым.

- Был - ҡаҡы. Күрәһеңме, һары ғына сәскәләре саҡ күренеп килә. Әле ҡаҡы ҡатмаған да - ыуыҙ ғына. Һабағын әрсеп аша, йәме. Рәхмәт яуғыры, ҡымыҙлыҡ та сыҡҡан, ҡымыҙ тәме килә, - тип һөйләнә-һөйләнә, ҡартинәйем миңә ашарға яраҡлы үләндәр күрһәтә башланы һәм артабан дауам итте, - ә бына ҡуҙғалаҡтың һабағын ғына түгел, япрағын да ашарға ярай. Ашҡа һалһаң - әсе, ләүешкә һалһаң - шәкәр тәме бирә. Күрҙеңме, үлән осо ҡыҙара биреп тора? Ашай торған үләндәр күп: кәзә һаҡалы, ҡаҙ тәпәйе, ҡуян тубырсығы... Ҡуян тубырсығы күберәк һөрөнтө ерҙә үҫә. Кейәү үләне, аҫҡырһаҡ, меньяпраҡ, кесерткән - былар дарыу үләндәре. -Ҡартинәйем һанап сыҡҡан һәр үләнде күҙҙән үткәрә, ҡайһыларын

ҡулдары менән һыпыра, ҡайһыһын есҡәп ҡарай.

- Эй, Илаһым! Һуғыш ваҡытында ошоларҙы ашап ҡына иҫән ҡалдыҡ. Күпме халыҡ аслыҡтан ҡырылды, - тип һөйләнеүенә аптырап: "Әллә миңә һөйләй, әллә үҙ алдына һөйләнә?" - тип уйлап алдым. Шунан: "Ни эшләп кешеләр һуғыша? Үҙең бит миңә, кешегә түгел, малға ла тейергә ярамай, тиһең? Ә ҡырылған халыҡ ҡайҙа була?" - тим.

- Ҡайҙа булһын, ер ҡуйынына илтеп һалабыҙ. Бишәр, алтышар бала бергә үлеп ҡалған саҡтарҙа санаға һалып ташый

торғайныҡ. Ҡышын бигерәк ауыр кәбер ҡаҙыуы: ҡар күп, ер туң, үҙәк өҙгөс һыуыҡ, кейем юҡ. Ир-ат һуғышта, аттар колхоз эшенән бушамай, ҡоро һөлдәләр үҙҙәре, бахырҡайҙарым... Һөйләп бөткөһөҙ! Ошо ҡәһәрле һуғышта ҡартатайың менән инәйең баш һалды...

Ҡартинәйемдең күҙҙәренән субырлап йәш аға, ә ул уны һөртөп тә тормай, сеңләп, илап ебәрҙе. Ике күҙем шарҙай булды: атаҡ-атаҡ, ололар ҙа илай белә икән дә баһа! Өндәшергә ҡурҡам, ни ҡылырға белмәйем, ахырҙа, уға ҡушылып, үҙем дә илай башланым. Ул: "Йөрәккәйем, бәләкәсем, илама, һин илағас, миңә бигерәк ҡыйын. Уңға ҡараһам да юҡ, һулға ҡараһам да юҡ, ҡысҡырып илаһам да юҡ", - тип, ҡартинәйем атлауын белә.

- Ҡартинәй, ә "инәй", "ҡартатай" кемдәр була ул? - тип, үҙем өсөн яңы һүҙҙәрҙең айышы менән ҡыҙыҡһынам.

- Инәйең - минең ҡыҙым. Ә ҡартатай - уның атаһы, - тип яуапланы өләсәй.

Әләгә-йүгерә эйәреп килгән ерҙән мин ҡапыл шып туҡтаным: күкрәгемдә нимәләр "һеңк" итеп ҡалды ла, шул нәмә тамағыма килеп тығылды, ирендәрем дерелдәй башланы.

- Мин, мин һуң, кемдең ҡыҙы?.. - тип ярһып, үҙемдең әлеге булмышымды аңлаған, һәр хәлдә, аңларға иткән һымаҡ, әсенеп, ҡысҡырып ебәрҙем. Килеп тығылған баяғы

төйәр, әсе күҙ йәшенә әйләнеп, танау эргәләй субырлап ағып төштө лә, бәлшәйгән ауыҙыма тулды. Ҡартинәйем: "Үҙемдеке, минеке, ҡолонсағым", - тип, сәстәремдән үбә, башымдан һыйпай, арҡамдан һөйә башланы. Баҫылдым. Тынысландым. Йәш булып өлгөрөп етмәгән төйәр, күкрәгемдә өйкәп, тороп ҡалды. Һыңҡылдап, атлайым. Ҡартинәйем, күҙ ҡарашын алыҫтарға төбәп, офоҡ менән зәңгәр күк араһынан нимәлер эҙләгән төҫлө, хәтирәләр тәсбихен тарта башланы:

- Һуғыш башланғанда инәйең (әсәйең) бары 18 йәше. Ҡартатайың, Маһирамды ҡосаҡлап: "Балаҡайым, һине һуғыш өсөн тыуҙырманыҡ та бит, илгә төшкән бәлә, заман ауырлығы һинең иңеңдә буласаҡ", - тип иланы. Инәйеңде Кемпаускиға (Кемерово) вербауайт иттеләр - урман ҡырҡырға. Ҡартатайың нимескә ҡаршы һуғышҡа алынды. Мин дүрт балам менән кеше өҫтөндә тороп ҡалдым. Яралангас, Мәскәүҙән яҙған хаты килде: "Әлифә, әллә килеп китәһенме? Аҙаҡҡы күрешеү булмағайы", - тип яҙған. Юҡ, юҡ, барырлыҡмы һуң! Колхозда эш күп, займ яҙҙырыҙылар, уны түләргә кәрәк, ит, йөн, май, йомортҡа менән дә һаман йыялар, уларын аҡсалата түләйем. Балаларым ас ултыра. Бер генә тәгәм дә ризыҡ юҡ. Йәйен үлән ашап сығабыҙ, ҡышын ҡышлауы бик хәтәр. Яҙ айында Стәрлетамаҡтан, елкәгә йөкмәп, симәнә ташыйбыҙ. Сабаталар сыҙамай, һыу кисеп ҡайтабыҙ. Нисек ауырыманыҡ икән? Шулай бер көн ҡайтҡанда, он тартып, балаларыма боламыҡ болғармын, тип, бер ус бойҙай усланым. Күпер төбөндә ҡырандаста ултырған уполномоченный Тәскирәне күреп, бойҙайымды һыуға ырғыттым. Мәликә апай кеҫәһенә һалған икән, унының тишек булып сыҡҡан, бойҙайы бишмәтенең эсенә һибелгән. Тентеп, таптылар, минән дә эҙләнеләр, таба алмай, тәкәттәре ҡороно:

"Алғанһың, моғайын. Ҡайҙа ҡуйҙың?" - тип, йәнемдә үртәнеләр. Мәликә апайға пыртакул яҙып, имсәк балаһы - Гөлмәрйәме менән 10 йылға алып та киттеләр. Икенсе яҙында ҡаланан ҡайтыуыбыҙға бихисап бала-саға, бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро туң башаҡ ашап үлгәйне. Ундағы сыр-сыу, илаш... Мәйеттәрҙе ерләп өлгөрә алмайбыҙ хатта. Һуғыштың нисәнсе йылы булғандыр, 1944 йыл шикелле, үҙебеҙ алып ҡайтҡан симәнәне, һабанға һыйыр егеп, сәсеп сыҡтыҡ. Сәмсиямал әбейең, "һыйырым быуаҙ", тип, малын йәлләп, һыйыры эргәһенә үҙе егелде. Мин - һабандамын, Ғәффә әбейең - сәсеүҙә. Йәпйәш кенә ҡыҙҙарҙы тракторға ултырттылар. Беҙҙән Сәфәрғәлиева Миңлекамал тракторсы булды. Тик трактор һөрөүе бик тәтемәй шул, йыш ватыла. Ватылһа, тағы илаш китә. Күрҙек инде, күп күрҙек! Берәүҙең иркә генә төпсөк ҡыҙы ат урынына ер һөрһөн әле...

Ашарға эҙләп, урыҫ ауылдарына барып сығабыҙ. Ҡарт мәрйәләргә тиҙәк, саман һуғып, баҡса ҡаҙып бирәбеҙ. Улары, үҙҙәрендә ни бар, шуның менән бәхилләтәләр. Хәрәм булһа ла, сусҡа майын да ашарға тура килде, ни эшләйһең, хәлһеҙлектән ауып барабыҙ. Ул мәлдә иң ҡурҡынысы бүре ине. Мәхлүктәр, әллә ират юғын белеп, аҙҙы, әллә үҙҙәре лә беҙҙең кеүек ас булғас, һуңғы сиктә кешегә яҡынлаштымы - белмәҫһең. Урман-Ҡатау аша ҡайтҡан саҡта теге бүреләр арттан төшмәһен, тип, йырлашып, ҡысҡырышып ҡайтабыҙ. Йыр ҡайғынымы һуң? Кинйәбикә былай тип йырлап торғайны: "Ирем һуғышҡа китте, германский войнаға. Ҡайтһа, ҡайтыр, ҡайтмаһа, юҡ, алыр әле ҡайнаға". Эй, Хоҙай, ошо йырын йырлаған сағында уҡ "ҡара ҡағыҙ" алғайны инде, ике ҡыҙы менән тол ҡалды. Ҡыҙҙар тауына еткәнсә, аһылдашып, йүгерәбеҙ, ауыл күренгәс, хәлдән тайып, тәгәрәйбеҙ. Аяҡ быуындары тотмай башлай. Төн сыҡҡансы Ҡушҡүлдән (Золотоножка), Батафтан (Потаповка), Сәгәҙәйҙән (Чегодаевка) әйләнеп ҡайтабыҙ, иртән - эшкә. Һуғыш бөткәнсе Наил, Йәүҙәт, Венера бәләкәстәрем вафат булды, апайың Гөлирә генә ҡалды. Ҡартатайың һуңғы хатында: "Һуғыш бик ҡаты бара, пүләләр себен шикелле оса, донъя хәлен белеп булмай, иҫән ҡалыу икеле", - тип яҙғайны. Оҙаҡламай "хәбәрһеҙ юғалды" тигән ҡағыҙ ғына килде...

Ҡартинәйем һөйләгәндәрҙе бик үк аңлап бөтмәһәм дә, тыңлап киләм.

- Бына, Байғараға килеп еттек, теге яҡ битләүендә Батаф башлана, - тип, аңлата ҡартинәйем.

- Байғара нимә ул? - тип һорамай булдыра алманым.

- Әллә инде, ҙур бер соҡор, "бай" һүҙе башҡортса булһа, "гора" - урыҫса. Ошо ике һүҙҙе ялғау ярҙамында был һүҙ килеп сыҡҡандыр, моғайын. Теге яҡ - урыҫтар ере. Соҡор булһа ла, бик бай урын ул: ул

✓ **"Башҡорт КВН уйынында ҡатнашып еңеү яулауыбыҙ Мәскәүҙә үткән студент тормошоноң иң сағыу иҫтәлеге булып ҡаласаҡ", - тине команданың капитаны Ғайсар Дәүләткилдин.**



шишмәһе, ул елəк-емеше, йөнлеге, утыны, бесәне тиһеңме - барыһы ла мул бында, - тип, ауыл тураһында һөйәп бирҙе ҡартинәй. Ауылға керҙек. Бер кем дә юҡ, буп-буш, өйҙәре берәм-һәрәм генә, берененән-береһе йыраҡ ултыра. Шулай ҙа, ауыл тип әйтмәһәң, хәтере ҡалыр.

- Мария знакум, здраствуй, нисауа ла нетме ни? - тип, ҡартинәйемдең өндәшеүенә, ҡаршыбыҙға бер әбей килеп сыкты ла, уны ҡосаҡлап алды:

- Ай, Алифа, здравствуй, - ти. - А это кто, Магиры что ли дочка?

Әбей минең башымдан һыйпап, арҡамдан гөпөлдәтеп ярата, үҙе: "Сиротиночка моя", - тип илай. Бер һүҙен дә аңламайым, ҡартинәйемдең итәгенә йәбешеп, мыштым ғына торам.

Өйгә индек. Ултырырға һикеләре юҡ. Мөйөштә һике һымаҡ нәмә бар, әммә унда мендәрҙәр өйөлгән, уларҙың өҫтөнә аҡ селтәр ябылған. Һикенең баш баштарында бәләкәй генә шарҙары ялтырап тора. Телем бик ҡысытһа ла, мин ул шарҙарҙы яламаҫҡа булдым. Ҡыш көнө Хәснимал әбейҙәрҙең солаһында ялтырап торған йоҙаҡты, матур булғас, телем осо менән генә ялап ҡарағайным, телем йәбешә лә, ауыҙым эсе ҡан менән тулғайны...

"Ҡартинәй, был нимә ҡул?" - тип, ялтыр шарлы сәйер һикегә ымлайым. "Йоклар өсөн караут. Ана, ултырғысҡа ултыр", - ти ҡартинәйем. Мәрйә әбей өҫтәлгә тоҙло ҡыяр, йоморткалар, йәшел һуған, икмәк, һөт, һалҡын сәй ултыртты ла: "Кушайте, кушайте, ешьте, ешьте, аша-аша", - тип ҡыҫтай башланы.

Әһә, мин әйтәм, ҡунаҡты шулай һыйлайҙар икән. Инәлтеп ултырыуы юҡ.

Ашап туйғас, стаканға һалҡын сәй ҡойоп бирҙеләр. Уны уртлағайным, саҡ сәсәмәнем: әп-әсе, абау!

- Был - кеүәҫ. Урыҫтар сәй эсмәй - кеүәҫ эсә. Яратмаһаң, ана, һөт эс, - тине ҡартинәйем. Шунан төйөнсөгөн асып, "синька", тип, теге әбейгә зәңгәр он һалып бирҙе. Минең ныҡ аптырауҙы күреп, аңлатып ҡуйыуҙы кәрәк тапты: "Буяу ул, буяу". Услап, өҫтәлгә матур-матур төймәләр сығарып һалды. "Выбирай, ал, - тине мәрйәгә. - Помнишь, как плохо было беҙ пуговок, фуфайку, штаны веревками завязывали. Ал, ал. Детдомда, Стәрлебашта Ямал работала бит, Ленинградтан посылка прислал, гостинца, вот раздаю..."

Ошо ауыл буйлап йөрөп, сиңкә менән төймәләрҙе таратып сыктыҡ, бер көсәптәй аҡ һаҡаллы бабай ғына алманы, үҙе беҙҙе бал, икмәк менән һыйлап сығарҙы.

Исмаһам, берәй ҡыҙыҡай йә малай осраһамы урамда, ҡартинәйем һымаҡ "здраствуй, знакум", тип өндәшер инем, тип уйлап алдым.

- Ир-егет булмағас, ҡыҙҙар ситкә таралышҡан, өй һайын ир-ат һуғышҡа китеп бөткән. Кем ҡайтҡан, кем - юҡ. Әйҙә, Тарас бабайҙы ла күреп киләбеҙ ҙә, ҡайтырбыҙ. Ул бөтөнләй яңғыҙ ҡалды, бахыр. Үҙе ауылдан ситтә көн күрә. Дүрт малайы һуғышта башын һалды. Барыһына ла "пахарун" килгән, тинеләр. Ошо ҡайғыны күтәрә алмай, әбейе түшәккә йығылған. Йә, ярай, хәҙер барып етәбеҙ... - тине ҡартинәй. Мин ул һөйләгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙе аңламаным һәм аҙаҡ һорашырмын, тип ҡуйҙым. Бына Тарас бабай утарына ла килеп еттек. Ҡартинәйем менән Тарас ҡарт гәпләшеп ултырғансы, мин ишек алдына ҡунаҡлап, бөгөнгө күргән (урыҫтарҙы тәү күреүем ине), ишеткәндәремде иҫкә төшөрәм. Үҙем иппәп кенә тирә-йүнгә күҙ һалам: бушлыҡ, иҫ-аҡыл китерлек тынлыҡ. Кәртә-ҡура юҡ, ишек алдын бесәй үләне, хатта тупһаға тиклем ҡаҡы баҫҡан. Эргәлә генә булғас, эйелеп алып, ашағы ла килмәй. Ултырам... Арыбире себен, серәкәй безелдәгәне ишетелә. Йә шунда бал есе аңҡытып, ҡорттар осҡолай. Эргәмдәге бүрәнә ярығына шөкәтһеҙ ҙур һағыҙаҡ инеп китте. Ололар әйтмешләй, ҡояш "боролдо", ахыры, ишек алды күләгәләнде, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә һалҡын ел иҫеп алды. Күңелемде быға тиклем белмәгән һағыш ялманы. Шомло, ҡурҡыныс булып китте. Өйгә индем. Өй эсе лә буш, ҡояш киткәс, ҡараңғы, моңһоу. "Ҡайтайыҡ", тип, ҡартинәйгә мыжып алдым.

Бабай беҙҙе юлға тиклем оҙата килде.

- Ошо юлдан ҡартатайың менән күп йөрөнөк, бынан Шәкәр ауылына тура юл. Күҙемде йомһам, мылтыҡ аҫып, үҙе килә кеүек. Тыным менән тартып алыр инем... - тине ҡартинәйем

- Ҡартинәй, мылтыҡ, тип әйтмәсе, ҡурҡам, - тим.

- Ул бит кешегә ата торған мылтыҡ түгел, һунар мылтығы. Тирә-яҡҡа даны таралған һунарсы ине ул ҡартатайың. Бер мәл тере бүре һуғып алып ҡайтты. Абау, бүренең күҙҙәре йәшел утмы ни, баҙлап тора. Ҡараһаң, йөрәк жыу итеп китә. Икенсе тапҡыр ҡарарға ҡот оса. Тиреһе матур, күгелйем төҫтә, ялтырап тора. Тиреләрҙе үҙе иләп, бесеп, тун, бүрек, итектәргә хәтлем тегә ине...

Был хәбәрҙе тыңлағым килмәйенсә: "Ҡартинәй, нимә ҡурҡыныс: бүреме, нимесме?" - тим.

- Икеһе лә кеше башын ашай торған нәмәләр, - тине ҡартинәй.

- Ниместәр йыраҡмы, килеп сығып, беҙҙе атып йыҡмаҫтармы?

- Юҡ, бик йыраҡ улар, ҡояш байыған яҡта. Унда тимер юл менән генә барып етеп була. Ҡуй, ниңә юкты һөйләп, маҙаһыҙлайһың әле, ни суртыма кәрәк улар һиңә? - тине ҡартинәй. Ҡайтышлай Ерекле йылғаһынан ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, ыумаҫҡа, тип, балтырған йыйҙыҡ. Ошоноң менән минең тәүге тапҡыр ҡунаҡҡа барыуым тамамланды. Һуңғараҡ ҡартинәйем: "Әйҙә, шунда ҡунаҡҡа барып киләйек", - тиһә, "Юҡ, минең ҡунаҡ булғым килмәй", тип, ҡырт киҫер булдым. Ниңә инде минә ҡунаҡҡа барыу? Ниңә илау? Ниңә ҡартинәйемде илатыу? Ана, бөгөн ҡунаҡҡа барған саҡта әллә күпме ҡайғылы хәбәр ишеттем, бихисап хәсрәтле кешене осраттым. Юҡ, ҡыйын булһа ла, ҡартинәйҙе бынан ары әйҙә генә көтөрмөн,тигән ныҡлы ҡарарға килдем.

Колхозда яҙғы-йәйге бөтмәҫ-төкәнмәҫ эштәр башланды. Һарыҡ өҫтө алыу, тиҙәк һуғыу, ферма-келәттәрҙе һылау, бәрәңге утау китте. Ҡартинәйем минә умырзая сәскәләре төшөрөлгән, ерлеге ҡыҙыл салбар тегеп кейҙерҙе лә, йыраҡтан күренеп торһон, тип, эш ваҡытында асыла торған балалар баҡсаһына бирҙе. Тәүге көндө үк шуҡ малайҙар: "Аҡ ыштан, ҡыҙыл ыштан ҡайтып килә һуғыштан", - тип, мине үсекләй башланы. Кис менән, күпер аша ҡайтмайынса, үҙебеҙгә тура сыға торған баҫма аша ҡайтып киттем. Аяҡтарымды һәлендереп, баҫмаға ултырып, бер ғәйепһеҙ салбарымдың ағып киткәнен ҡарап ҡалдым. Ошо салбар менән аңыма, йөрәгемә инеп оялаған һағыш та киткән һымаҡ тойолдо. Һуғыш тураһында бүтәнсә һүҙ ҡуҙғатыусы булманы.

Иҙән һепергәндә ҡанат осона эләккән ваҡ суп-сар шикелле, һуғыш ғәрәсәте минең дә яҙмышымды өйөрөлтөп, элэктереп алып китте, буғай... Гел үҙемдә торор өйһөҙ, туғандарһыҙ, яңғыҙ, яҡлаусыһыҙ тойоп йәшәнем. Бәләкәй генә йөрәгем аша үткәргән кисерештәрҙе ҡағыҙға төшөргән мәлдә буш ауылдарға янынан ҡайтып килгән рәүешкә индем. Йән тыныслыһы таба алмай, бошоноп, бойоғоп, 2-3 төн йоҡомдан яҙҙым. Үтә ауыр булды. Күҙемде йомһам, Тарас бабайҙың ишек алды һәм ундағы моңһоу, аяныслы, шомло тынлыҡ килә лә баҫа...

Ә минең был сәйәхәтем - алыҫта ҡалған бала сағымдың бер көнө генә. 5-6 йәшлек баланың тәүге күргән-ишеткән ваҡиғалары. Шул кисерештәрҙе түкмәй-сәсмәй ҡағыҙға төшөрөргә тырышылды. Үҫә килә ҡартинәйемдән тағы ла күп нәмәләр хаҡында белдем. Уның ҡартатайыма булған һөйөүен минә лә күсерә алыуына хайран ҡалам. Һөргөндән 7 йыл буйы көтөп алып, "халыҡ дошманының бисәһе" тигән исем аҫтында йәшәүе, инде килеп, һуғыштан һуң 31 йыл буйы ирен теләнән төшөрмәүе - бөйөк мөхәббәт шул булалыр ҙа! Һуңғы сәғәте еткәс: "Ҡартатайың ҡырандаҫҡа ултыртып, алып китте, оҙаҡ тормам. Балаҡайым, ҡолонсағым, яңғыҙ ҡалаһың бит, бәхил бул", - тип, кистән һөйләшеп ятҡан ерҙән, берҙәнбер яҡын кешем, таң алдынан күҙәрен мәңгелеккә йомдо. Ҡартатай, ҡартинәй, мәңгелек донъяла ҡауышығыҙ! Урындарығыҙ ожмахта булһын! Амин!

**Венера АБДУЛЛИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ЮМОРЫ - МӘСКӘҮҘӘ



**Ошо көндәрҙә Мәскәү ҡалаһында сираттағы башҡорт КВН уйындары үтте. Баш ҡалала йәшәүсе яҡташтар өсөн күптән йолаға әйләнгән сара Серго Орджоникидзе исемендәге Рәсәй дәүләт геология разведкалау университетының тантаналар залына 300-ҙән ашыу тамашасыны йыйҙы.**

Быйыл юмор бәйгеһендә 9 команда көс һынашырға теләк белдерҙе. Был Мәскәүҙәге башҡорт КВН-хәрәкәте өсөн ниндәйҙер кимәлдә рекорд та булды. Финал уйындарына Мәскәүҙең төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алыусы Башҡортостан йәштәренең 6 командаһы сыҡты, уларҙың атамаһы уҡ квнсыларҙың тапҡырлығын иҫбат итте - "Өсmen", "Тирләм-тирләм", "Сәй эсәйек", "Минең яратҡан команда", "Айнур Асҡаров", "Ҡыҙыу розалар". Еңеүселәр дүрт конкурс һөҙөмтәләре буйынса билдәләнде. Беренселекте К.Э.Циолковский исемендәге Рәсәй дәүләт технология университетының өс студенты булдырған "Өсmen" КВН-командаһы яуланы. Егеттәр сығыштары менән Баймаҡ һәм Йылайыр районынан, әлеге көндә "Материаловедение" факультетының һуңғы курсында белем алалар. "Башҡорт КВН уйынында ҡатнашып еңеү яулауыбыҙ Мәскәүҙә үткән студент тормошоноң иң сағыу иҫтәлеге булып ҡаласаҡ", - тине команданың капитаны Ғайсар Дәүләткилдин.

"Уйын "Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге"нең биш йыллыҡ юбилейына арнап ойошторолдо, шуға күрә бер конкурстың темаһы "Емештәрҙе барлағанда" тип аталды. Был тема юҡҡа ғына һайланманы, уның сиктәрендә, ил кимәлендә бәләкәй күренһә лә, ойошмабыҙ өсөн бик әһәмиәтле еңеүҙәребеҙ хаҡында ла фекер йөрөтөп алырға мөмкинлек бирелде. Өсөнсө йыл рәттән Мәскәүҙә башҡорт телендә КВН уйындары үткәреүебеҙ, йылдан-йыл командалар һаны артып тороуы (былтыр дүрт команда булһа, быйыл - алты), сығыштарҙың кимәле күтәрелеүе (квнсылар үҙҙәре уйлап тапҡан иҗтимағи, сәйәси темаларға тапҡыр шаяртыуҙар күбәйҙе, актерлыҡ оҫталыҡтары артты) - былар барыһы ла баш ҡалала йәшәүсе башҡорт йәштәренең оло еңеүе", - тине ойоштороусыларҙың береһе Раян Нураев.

"Өсөнсө миҙгел уйыны төрлө һәм сағыу КВН-командалары ҡатнашыуы менән айырылып торҙо. Уларҙың һәр береһенең ниндәйҙер айырым, үҙҙәренә генә хас үҙенсәлеге булды, шуның менән дә улар тамашасының һөйөүен яуланы, иҫтәрендә ҡалды. Шуныһы ҡыуаныслы, быйыл ойоштороу кимәле лә, КВН-командаларының шаяртыу, юмор кимәлдәре лә күпкә юғары булды. Бигерәк тә Башҡортостандың бөгөнгө хәле, тарихы һәм халҡыбыҙҙың киләсәге хаҡында күҙаллауҙар тураһында яңғыраған тапҡыр социаль һәм сәйәси көләмәстәр күңелгә ятты. Был шаяртыуҙарҙы ҡатнашыусылар үҙҙәре уйлап табыуына шик белдереү мөмкин түгел", - тине тәьҫораттары менән бүлешеп, сараны ойоштороусыларҙың тағы береһе, берлек ағзаһы Иҙел Бохарбаев.

Башҡорт КВН уйынында ҡатнашыусыларға маҡтау ҡағыҙҙары һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Маҡтау ҡағыҙына сараны ойоштороусылар Иҙел Бохарбаев, Раян Нураев, Илнур Рәхмәтуллин һәм Фаил Илембәтов лайыҡ булды. Тап ошондай саралар йәштәр араһында туған телде популярлаштырыуы һәм һаҡлап ҡалыуҙа, илебеҙҙең йөрәге - Мәскәүҙә Башҡортостандың позитив имиджын булдырыуҙа мөһим роль уйнай икәненә шик юҡ.

**Фатима ЯНБАЕВА.**

✓ *Полкта Өфө аэроклубында тәрбиәләнгән, үҙ теләктәре менән фронтҡа киткән егермәнән ашыу летчик ҡатын-ҡыҙ була. Улар араһында яҡташтарыбыҙ - Советтар Союзы Геройҙары Клавдия Серебрякова һәм Мәғүбә Сыртланова ла бар.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ДИАБЕТТЫ СӘТЛӘҮЕК ЕҢӘ

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, дисгевзия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һөҙөмтәһендә кеше ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Бындай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы тәү сиратта организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлығы боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла бындай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлығы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә көсәйә. Анемия мейегә йоғонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйбергә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә уның сәләмәтлеккә йоғонтоһо бик насар.

■ Лимон емеше организмды таҙарта, тип иҫәпләй диетологтар. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйынса "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

ЕҢЕҮСЕЛАР ХӘТИРӘҺЕ

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫБЫҘҘЫҢ...

## һуғыш яланындағы ҡаһарманлығы тураһында

1945 2015 ЕҢЕҮГӘ 70 ЙЫЛ



**Кешелек тарихында иң аяуһыҙ һаналған һуғыштың тамамланыуына 70 йыл тула. Бынан 70 йыл элекке хәтәр ваҡиғалар әле бик оҙаҡ хәтерҙә һаҡланасаҡ. Хәтер ул үткәнде киләсәк менән бәйләй торған оло көс. Уның менән кеше - шәхескә, халыҡ - милләткә, ил дәүләткә әйләнә.**

Ер йөҙөндәге ҡара көстө - немец фашистарын тар-мар итеүҙә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың да өлөшө ҙур булыуы тураһында һөйләп үткем килә. Улар һуғыштың тәүге көндәренән үк тылда фронтҡа киткән ир-егеттәр урынына баҫты. Быға улар әҙер ине: илебеҙҙә социалистик ҡоролоштоң нигеҙҙә еңеүе, партияның милли программаһының уңышлы хәл ителәүе ҡатын-ҡыҙҙарға мәҙәни һәм белем кимәлен күтәрергә, төрлө һөнәргә эйә булырға, ил тормошонда әүҙем ҡатнашырға мөмкинлек бирҙе. Быны ошондай миҫалдар менән иҫбатларға мөмкин: 1940 йылда халыҡ хужалығында эшләүселәр араһында ҡатын-ҡыҙҙар 39 процент, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә - 59, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә 76 процент тәшкил итте. 1937 йылда СССР-ҙың Юғары Советына 189 (16,5 процент) ҡатын-ҡыҙ депутат итеп һайланды.

Ирҙәр менән бер рәттән фронт яуҙарында меңәрләгән ҡатын-ҡыҙ ҡатнашты. 1942 йылда комсомол саҡырыуы буйынса ғына ла 550 мең ҡыҙ фронтҡа юлланды һәм 300 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ (бөтә яугирҙарҙың дүрттән бер өлөшө) Һауа оборонаһы (ПВО) ғәскәренә саҡырылды, меңәрләгәне Совет Армияһының хәрби-медицина учреждениеларына, элемтә өлкәһенә эшкә килде. Дәүләт Оборона Комитеты 1942 йылдың майында 25 мең ҡатын-ҡыҙҙы Хәрби Диңгеҙ флотына хеҙмәткә йәлеп итеү тураһында ҡарар сығарҙы. Ҡыҙыл Тәре ойошмаһы нигеҙендә 300 мең ҡатын-ҡыҙ медицина сестраһы, 300 меңе санитарка һөнәренә эйә булды. Ә Дөйөм хәрби уҡыу (Всевобуч) бүлектәрендә 222 мең ҡыҙ снайпер, элемтәсе һ.б. һөнәрҙәр үҙләштерҙе. Мәҫәлән, 1942 йылдың апрелендә Илеш районынан рус теле уҡытыусыһы Зәйтүнә Тимерханова етәкселегендә 32 ҡыҙ комсомол юлламаһы буйынса Сталинград эргәһендәге Хәрби-уҡытыу базаһына ебәрелә һәм 3 ай эсендә улар радист һөнәренә уҡып сығалар. З. Тимерханова патруль пост начальнигы итеп тәғәйенләнә. Йәш ҡыҙҙар 62-се армияның 14-се батальоны составында ҡулбаштарына рация аҫып, автомат, противогаз һәм башҡа кәрәк-яраҡ йөкмәп, меңәрләгән километр фронт юлы үтә. Сталинградты азат иткәндән һуң улар



Польша һәм Белоруссия биләмәләрен азат итеүҙә ҡатнаша. Зәйтүнә Тимерханова Еңеү көнөн Польша ерендә ҡаршылый. Тыуған яғына 1945 йылда әйләнеп ҡайта һәм уҡытыусылыҡ эшен дауам итә.

Советтар Союзы Геройы Марина Раскова (1912-1943) летчик-штурман ҡатын-ҡыҙҙарҙан ойошторолған бер авиаполк менән етәкселек итә. Уны немецтар "төнгө ҡарасҡы" тип атайҙар. Полкта Өфө аэроклубында тәрбиәләнгән, үҙ теләктәре менән фронтҡа китеп, дошманға ҡаршы



аяуһыҙ һуғышҡан егермәнән ашыу летчик ҡатын-ҡыҙ була. Улар араһында яҡташтарыбыҙ - Советтар Союзы Геройҙары Клавдия Серебрякова һәм Мәғүбә Сыртланова ла була. К. Серебрякова 1944 йылдың мартында 550-се осош яһаған ваҡытында самолеты менән атып төшөрөлә һәм бик ҡаты яралана. 1945 йылда ул икенсе Ҡыҙыл байраҡ ордены менән бүләкләнә. Ә Мәғүбә Сыртланова һуғыш юлын Төньяҡ Кавказ, 4-се Украина һәм 2-се Белоруссия фронттарында үтә, 780 тапҡыр яуаплы хәрби осош яһап, дошман объекттарын бомбаға тота. Ул һуғыштан һуң Ҡаҙан ҡалаһында йәшәп, 1971 йылдың октябрендә мәрхүм була.

Тағы ла бер Советтар Союзы Геройыбыҙ - гел ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған һәм тулыһынса тиерлек һәләк булған автоматсылар бригадаһында хеҙмәт иткән Илеш районы Үрге Йәркәй ҡыҙы Рәхимә Булатова. Ул фронтта Александр Матросов батырлығын ҡабатлап, фашистарҙың пулемет нөктәһенә ташлана һәм ҡаты яралана. Ул ырғытҡан граната дошман дзотын юҡ итә һәм беҙҙең һалдаттар яуға күтәрелә. Был батыр ҡыҙыбыҙ тураһында уның яҡташы күренекле ғалим һәм яҙыусы Суфиян Поварисов "Еңеүсе" исемле повесть-эссе яҙҙы.

Фашист илбаҫарҙары менән көрәштә күрһәткән батырлыҡтары өсөн 150 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ хәрби орден һәм миҙалдар менән бүләкләнде. Шуларҙан 200-ө Дан орден-



дарына лайыҡ булды, 86-һына Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Ошо Геройҙар араһында беҙҙең ике яҡташыбыҙ ҙа бар. Улар Наталья Ковшова (1920- 1942) һәм үрҙә әйтелгән Мәғүбә Сыртланова.

Һуғыш дәүерендә совет халҡының фронттағы һәм тылдағы уңыштары миллионлаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың хеҙмәтенә бәйле булды. Был дәүерҙә тылда төп эшсе көстө улар тәшкил итте, тиһәк, һис арттырыу булмаҫ. Улар ҡорос ҡойҙо, нефть сығарҙы, диңгеҙҙә йөҙҙө, һауа караптарын йөрөттө, иген үҫтерҙе һәм аҙыҡ-түлек етештерҙе. Мәҫәлән, етештереү предприятиеларында фронтҡа киткән ир-атты 500 мең хужабикә, хаҡлы ялдағылар, юғары класс уҡыусылары алыштырҙы. 1941-1945 йылдарҙа эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙең 15 миллионын (56 процент) ҡатын-ҡыҙ тәшкил итте.

***✓ "Мин фронтҡа дүрт улымды оҙаттым. Үҙемә 61 йәш. Дошманды тиҙерәк еңеп, алдағы көндә уландарым менән бәхетле йәшәү өсөн ихлас күңелдән бөтә булған аҡсамды самолет төҙөүгә бирәм".***



Башҡортостанда эш тармаҡтарын эшсе көстәр менән тәьмин итеү бигерәк тә ауырлашты, сөнки республикаға үҙебеҙҙең эшселәрһеҙ бушап ҡалған предприятиялырыбыҙға өҫтәлеп, 172 завод-фабрика, цехтар, айырым ҡоролмалар эвакуацияланып килде. Улар ҙа эшсе көстәр талап итте. Бында ла ярҙамға ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ дәррәү ҡуҙғалды. Мәҫәлән, Ишембай быраулау конторалыһында ҡыҫҡа ғына вакыт эсендә 110 ҡатын-ҡыҙ ир-ат һөнәрен үҙләштерһә, Өфө кабель заводында - 400, Өфө нефть эшкәртеү заводында 163 хужабикә эш башланы. Артабан нефть, металлургия, машиналар төҙөлөшө һ.б сәнәғәт предприятиеларында эшселәрҙең 50-60 процентын улар тәшкил итһә, ә ҡайһы берҙәрендә уларҙың нисбәте 60-90 процентҡа етте. Юғары квалификациялы эшселәрҙең яртыһы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ булды.

Ауыл хужалығындағы эштәрҙе нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар башҡарҙы. Был өлкәлә барлыҡ эшсәндәрҙең 75 процентын улар тәшкил итте. Ил күләмендәге башланғысҡа эйәреп, беҙҙең республикала ла ҡатын-ҡыҙҙарҙан трактор бригадалары төҙөлдө. 1941 йылда уҡ беҙҙә 13 мең тракторсы һәм комбайнсы ҡатын-ҡыҙ эшләй ине. Бының күпме-аҙмы икәнен күҙ алдына килтереү өсөн шундай сағыштырыу ҙа етә: 1940 йылда бөтә тракторсыларҙың, комбайнсыларҙың 12 проценты ҡатын-ҡыҙ булһа, 1944 йылда инде был нисбәт 59 һәм 48 булды (ил буйынса 56 һәм 62).

Иң әүҙем ҡатын-ҡыҙҙар етәксе урындарға үрләтелде. Әйтәйек, республикала һуғыш алдынан 12 ҡатын-ҡыҙ колхоз рәйесе булһа, 1942 йылда улар һаны 193-кә етте. Ә бригада, ферма етәкселәренең яртыһы самаһын ҡатын-ҡыҙ тәшкил итте. Улар үҙҙәрен оҫта ойоштороусы, хеҫтәрлексе хужа итеп танытты.

Ҡатын-ҡыҙҙар әүҙем хеҙмәттән тыш, хәрби осор талап иткәнсә, бөтә йәмәғәт эштәрен дә башҡарҙы. Фронт өсөн ҡан биреүсе, йылы кейем, төрлө бүләктәр әҙерләүсе лә улар булды. Республикала Совет Армияһы өсөн бөтәһе 500 мең дана йылы кейем, 1 миллиард һумдан артыҡ аҡса йыйылды. Хеҙмәтсәндәрҙең бүләктәре генә лә 362 вагонға тейәлеп, фронтҡа оҙатылды. Енеүҙе тиҙерәк яулау хаҡына ҡатын-ҡыҙҙарҙың фиҙәкәрлеген ошондай миҫал да расլай. Стәрлетамаҡ районы "Комбайн" колхозынан Гөлниса Солтанова Коммунистар партияһына һәм Совет хөкүмәтенә шундай хат менән мөрәжәғәт итә: "Мин фронтҡа дүрт улымды оҙаттым. Үҙемә 61 йәш. Дошманды тиҙерәк еңеп, алдағы көндә уландарым менән бәхетле йәшәү өсөн ихлас күңелдән бөтә булған аҡсамды самолет төҙөүгә бирәм. Минең 30 мең һум аҡсам еңеү сәғәтен яҡынайтыуға өлөш булһын". Бындай миҫалдар күп була ул саҡта.

Ошо дәүерҙә мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында, мәҙәни-ағартыу өлкәһендә эшләүселәрҙең дә күпселеген ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итте. Бигерәк тә был хәл ауыл ерҙәрендә күҙәтелде. Уҡытыусыларҙың 80-90, врачтарҙың 70-80 проценты ҡатын-ҡыҙҙар булды. Ә бына мәҙәниәт усаҡтарында кадрҙар буйынса кисҡен хәл килеп тыуғас, унан сығыу юлы ла табылды. Китапханаларға, клубтарға уҡытыусылар ярҙамға килде. Улар унда үҙҙәренең төп эштәренән һуң эшләне. Уҡытыусылар ауылдарҙағы йорттарҙы бүлешеп алып, уларға китап таратыу, гәзиттәр уҡыу эшен ойоштороҙо, был маҡтаулы эшкә мәктәп балалары ла йәлеп ителде. Хәҙер ҙә ауылдарҙа, миненсә, ошо яҡшы эште ойошторорға мөмкиндер.

Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары республикабыҙҙан тыш, илебеҙҙең башҡа төбәктәрендә лә эшләне. 1942 йылдың урталарында яғыулыҡ өсөн торф эшкәртеүгә эшсе көстәр кәрәк булды. Республиканың 20-гә яҡын районынан 6485 ҡатын-ҡыҙ был эшкә йәлеп ителде. Улар Мәскәү, Ленинград, Свердловск, Силәбе, Пермь, Горький өлкәләрендә һәм үҙебеҙҙә лә яғыулыҡ әҙерләүҙә ҡатнашты. Ә күпме йәшелкенсәк ҡыҙҙарыбыҙ комсомол юлламаһы буйынса Сталинград ҡалаһын тергеҙеүҙә ҡатнашты. Улар төҙөкләндергән бер урамға "Өфө", төҙөгән мәктәпкә "Салауат Юлаев" исеме бирелде.

Ҡыҫҡаһы, Совет иленең мәкерле дошманын еңеп сығыуҙа ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ индергән өлөш баһалап бөткөһеҙ. Шуға ла Партия Үҙәк Комитетенең Генераль секретары Л. И. Брежнев үҙенең бер сығышында былай тине: "Әгәр ҙә шундай бер үлсәү табып алып, ул үлсәүҙең бер яғына беҙҙең һалдаттарҙың һуғышта күрһәткән батырлығын, икенсеһенә совет ҡатын-ҡыҙҙарының хеҙмәт батырлығын һалып үлсәргә мөмкин булһа, был үлсәүҙең ике яғы ла, моғайын, тигеҙ тартыр ине, сөнки героик ҡатын-ҡыҙҙар һуғыш дәһшәте аҫтында үҙҙәренең ирҙәре һәм улдары менән бер сафта көрәште".

**Клара ӘСФӘНДИЙӘРОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни телефондан аралашыу тураһында

**Телефон күптән инде көндәлек тормоштоң айырылғыһыҙ атрибутына әйләнде. Телефондан матур итеп һөйләшә белеү - заман талабы, шуға күрә был өлкәгә ҡағылышлы әҙәп ҡағиҙәләре менән таныш булыу һәр кем өсөн мөһим.**



● Ашаған-эскән саҡта, янығыҙҙағы кеше менән һөйләшкән саҡта телефонды алмау хәйерле.

● Телефон аша аралашҡанда икенсе кешегә иғтибарығыҙҙы бүлмәгеҙ. Бындай аҙым шылтыратыусыға ҡарата ихтирамһыҙлыҡ булараҡ ҡабул ителәсәк.

● Аныҡ ситуацияға ҡарап, һөйләшеү темпын һайлағыҙ. Яҡындарығыҙ менән аралашыу яй, ышанысла тонда булһа, эшлекле һөйләшеү тиҙ, аныҡ һәм асыҡ булырға тейеш. Шуға күрә әйтергә теләгәнде алдан уҡ уйлап, һорауҙар әҙерләп, яҙыр өсөн ҡағыҙ-ҡәләм хәстәрләп ҡуйыу мөһим.

● Эшлекле шылтыратыуҙар өсөн уңайлы ваҡыт һайлағыҙ. Ғәҙәттә, бындай һөйләшеүҙәр иртә таң һәм кискеһен алып барылмай.

● Телефон ярҙамында аралашҡанда һеҙҙең уй-фекерегеҙҙе сағылдырыусы берҙән-бер ысул - ул тауыш. Телефон, ғәҙәттә, тауышты боҙоп ишеттерә һәм һеҙҙең телмәр сымдың икенсе осондағы кеше өсөн мөләйем яңғырамаҫҡа мөмкин. Шуға күрә, үҙегеҙҙең тауышты яҙҙырып тыңлап ҡарарға һәм кәрәк урында яңғырашын үҙгәртеү тураһында ҡайғыртырға кәрәк.

● Телефон аша һөйләшеүгә хас үҙенсәлек - көҙгө эффекты тураһында онотмағыҙ. Әгәр ҙә сымдың бер осонда шым ғына һөйләнһәләр, икенсе оста ла яуапты ошондай уҡ тон менән яуап бирәсәктәр. Һәм, тәбиғи, ҡыҫҡырып һөйләгәндә күтәренке тауыш менән бирелгән яуапты ишетәсәкһегеҙ. Шуға күрә, тыныслыҡ һаҡлап, тауышығыҙҙың көсләгәнгә арттырмай һәм кәметмәй генә һөйләшеүегеҙ һәйбәт әңгәмәгә булышлыҡ итер.

● Һөйләшеү барышында әңгәмәләшегеҙгә мотлаҡ исеме (рәсми осраҡтарҙа исеме һәм атаһының исеме) менән өндәшегеҙ. Кемгәлер шылтыратыр алдынан уның исемен белегеҙ, онотмаҫ өсөн яҙып ҡуйығыҙ. Ошо бәләкәй генә ҡағиҙәләрҙе онотмау һеҙҙең турала яҡшы тәьҫораттар ҡалдырыр.

● Шылтыратыуға сәбәпсе булған эштән тыш башҡа ваҡ әйберҙәргә ҡағылышлы һөйләшеүгә күсмәгеҙ. Әгәр ҙә үҙегеҙҙә бындай ҡатылыҡты тоймаһағыҙ, һөйләшеүҙе туҡтатыу өсөн уңайлы (мәҫәлән, "етәксем саҡыра" йәки "телефонды бушатыуға һорайҙар") ғына берәй сәбәпте алдан уйлап ҡуйығыҙ.

● Телефон трубкаһын һаубуллашҡандан һуң, ғәҙәттә, шылтыратыусы һала.

● Хеҙмәт урынында телефон трубкаһын күтәргәс, ойошманың исемен әйтергә онотмағыҙ. Был шылтыратыусының үҙенә тейешле урынға эләгеүен аныҡлаясаҡ.

● Әгәр ҙә һөйләшеү барышында бәйләнеш өҙөлһә, беренсе булып шылтыратыусы кире шылтыратырға тейеш.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың Йыһан ҡанундары

Әжерҙең нисек әйләнеп ҡайтырын бәрәү ҙә күҙаллай алмай; аҡса - уның бер варианты ғына. Әммә ул оҙаҡ йылдар үпкәләшеп йөрөгән кешегеҙ менән ярашыу, йәиһә бүләк, яңы мөнәсәбәттәр, сирҙән арыныу, карьера баҫҡысы буйлап үрләү булып әйләнеп ҡайтыуы мөмкин.

Мин килемемдең ундан бер өлөшөн тормошом көрсөккә барып терәлгәс түләй башланым. Ул ваҡытта һалым түләмәгән өсөн бизнесымды һалым органы конфискацияланы, 55 мең доллар бурысҡа баттым; эшем юҡ, машинам юҡ, банкта иҫәбем юҡ. Аҙналар буйына дуҫтарымдан аҡса алып йөрөнөм, әммә улар тиҙ генә юҡҡа сыҡты. Кеҫәмдә 20 доллар ҡалғас, кемдер миңә Кэтрин Пондерҙың "Динамические законы процветания" тип аталған китабын һатып алырға тәҡдим итте. Мин 12 долларға китап һатып алдым - астан үлгәндә лә китап уҡып үлергә булдым. Китапта, тормошоңа уңыш килтергең килһә, килемеңдән ундан бер өлөшөн түлә, тигән һүҙҙәр бар ине. Һуңғы 8 долларымды мәрхәмәтлек өсөн бирҙем. Икенсе көнөнә минең исемгә 75 долларға чек килде, ике йыл элек 200 доллар алып киткән танышым бурысын ҡайтарҙы...

Мин тағы ла шуға ышанам: Ғаләм барыбер үҙенең өлөшөн аласаҡ. Һеҙ килемегеҙҙең ундан бер өлөшөн үҙ ризалығығыҙ менән бирә алаһығыҙ йәки уны көс ҡулланып аласаҡтар, әммә һәр саҡ бирергә тура киләсәк. Әгәр ошо ҡанунға буйһонмайбыҙ икән, метафизик мәғәнәлә беҙ Ғаләм ҡанундары буйынса йәшәүселәргә ошо өлөш әйләнеп ҡайтһын өсөн, һәр саҡ өҫтәмә сығымдар сығарырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Именлек, байлыҡ һәр саҡ әйләнешеә күҙаллай. Бер урында ҡатып ҡалмаҫ өсөн һеҙгә субстанцияны хәрәкәткә килтерергә кәрәк. Әгәр ошо ундан бер өлөштә аңлы рәүештә бирепә барһағыҙ, ҡабат үҙегеҙгә урап ҡайтасаҡ тулҡынды хәрәкәткә килтерәсәк башҡа бик күп ҡанундарҙы уятасаҡһығыҙ.

**7. Ғәфү итеү ҡануны.** Был ҡанун вакуум ҡануны менән тығыҙ бәйләнгән: әгәр үҙегеҙҙә үс һаҡлайһығыҙ икән, һеҙгә мөхәббәт инә алмай. Әгәр ҡорбан роленә инеп, ауырыуығыҙға иғтибар туплайһығыҙ икән, аңығыҙҙа енеүсе аңына урын юҡ. Шуға күрә барлыҡ кире тойғоларығыҙҙан арынырға тейешһегеҙ, сөнки улар һеҙҙе эстән ашай, һеҙгә тәғәйен именлеккә, байлыҡҡа, муллыҡҡа кәртә булып тора.

Нисек уйлайһығыҙ, кешеләрҙең күпселегенә кемде ғәфү итеүе ауырыраҡ? Әгәр: "Үҙ-үҙемде", - тип яуаплаһағыҙ, 5+ алырға лайыҡһығыҙ. Әгәр кешенән блокты алып ташлаһаң, ул үҙен ғәфү иткәс, барлыҡ юлдар ҙа асыла. Шуға күрә иртәгәгә ҡалдырмайынса ошо өс аҙымды яһарға тәҡдим итәм:

-Уйығыҙҙан ғына үҙегеҙ килешә алмаған кешеләрҙе ғәфү итегеҙ.

-Уйығыҙҙан ғына үҙегеҙ зыян эшләгән, уларҙы һөйләгән, судлашҡан йәки башҡа низағлы хәлваҡиғаға тарыусыларҙың барыһынан да ғәфү үтенегеҙ.

-Әгәр үҙегеҙҙә хаталар һәм унашһыҙлыҡтар өсөн ғәйепләйһегеҙ икән - үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ.

Әгәр ғәфү итергә һәләтле түгелһегеҙ икән, уңыш ҡаҙанырға ла һәләтһеҙһегеҙ. Ошо өс аҙымды яһаһағыҙ, иң юғары уңышҡа асылырһығыҙ. Был ете ҡанун - һеҙҙең имен тормошоғоҙ буйынса күрһәтмә. Әгәр уға ярашлы йәшәһәгеҙ, тотош Ғаләм менән татыулыҡта булырһығыҙ һәм тормошоғоҙ гармония, ҡыуаныс, уңыш менән тулыр.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

ӘЙТЕШ



# НИҢӘ ҺАМАН БЕҘ ЯРЛЫБЫҘ

## Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Әйтеш эстафетаһын был юлы Йәнһылыу менән Көфө сәсән үҙ ҡулына алды, Яғылса менән Супай сәсән сиратҡа баҫты.**

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Көфө сәсән, ишеттеңме икән әле,
Айыткужа Өшөрәгә үпкәләне?
Ниңә һин, ти, миңә, ти,
ҡаш һикертмәйһең,
Ниңә һин, ти, ирҙәрҙе, ти,
баш итмәйһең?
Йә инде шул, Көфө ҡустым, ир һүҙеме,
Айыткужа шундайҙарҙан бер үҙеме?
Донъя йөгөн ир-уҙаман тартһын, әйҙә,
Беҙ ризабыҙ мисәүендәге сүс бәйгә.
Ҡабырғанан әүәләнеп, булдыҡ муйын.
Нахаҡ ғәйеп күтәреүе, сәсән, ҡыйын.
Башҡорт ҡыҙ-ҡатындары
әүәл-борондан
Ирҙең алдына сығып та атламаған.
Ниңә хәҙер ирҙәр шулай ситкә шылды,
Ир-бисәнең урындары алмашынды?
Совет власының ғәйебе шулай ҙурмы,
Көфө сәсән, аңлатсәле миңә шуны?

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
"Изге урын һис буш булмай",
Тигән һүҙ бар тәғлимәттә.
Ҡалҡыу урын, тәпәш урын,
Йомшаҡ урын - тәбиғәттә.
Бар тағы ла "шәхес" тигән
Вакант урын йәмғиәттә.
Һәм әгәр ҙә уҙтәгәйен
Урынын кем яуламаһа,
Башҡаларҙың алдындағы
Бурыстарын аңламаһа,
Һеҙ һүҙ ҡорған был миҫалда
Ир ирлеген һанламаһа...
Сығырынан сиккә сығып,
Ир урынын ҡатын яулай.
Ғаилә, илде һаҡлар өсөн
Шунан башҡа юлы ҡалмай.
Ил хаҡында ир хәстәрен
Ирекһеҙҙән ҡатын даулай.
Барыһына беҙ үҙебеҙ
Ғәйеплебеҙ, белһәң, апай!

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Тәбиғәт бушлыҡты һөймәй,
Ул камил яратылған.
Ҡарыны-тышы, өҫтә-аҫты
Биләнгән, уратылған.
Ул шулай яратылған да
Әҙәмгә тапшырылған.
Донъя яҙа-йоҙа түгел,
Йоморо, түңәрәк ителгән.
Ҡалҡыу ере уйһыу ергә,
Йомшаҡ-ҡаты, тәрән-һайы
Ғәҙел, теүәл бүленгән дә
Әҙәм ҡулына бирелгән.
Бушлыҡтары - бәндәнән.
Тәғлимәт тәбиғәт түгел,
Тәғлимәт тә - бәндәнән.
Кешеләрҙән шәхес ҡалҡып,
Вакант урын биләгән.
Йәмғиәттәге бушлыҡты
Шулар тултыра микән дә,
Бушлыҡ булдыра микән?
Һүҙем дә юҡ был шәхестәр
Илен, телен үә милләтен,
Әҙәмиәт, рухиәтен,
Әҙәбиәт, мәғрифәтен,
Сәнғәтен, сәйәсәтен
Иленә хеҙмәт иттерһә,
Халҡы, иле алдындағы
Бурысын теүәл үтәһә,
Бер һүҙем юҡ, сәсәнем.
Буш күңелдең эсе иркен,
Эсе тулы вакансa.
Рухы булмаған күңелдән
Иман, Әҙәп сығып ҡаса.
Шул бушлыҡты тултырайыҡ,
Ямап, бөтәйтәйек, тип,
Ҡатын-ҡыҙҙар, беҙ йөрөйбөҙ,
Ирҙәр өлгөрмәйҙәр бит.
Ил хаҡында ир хәстәрен
Их, тик ирҙәр атҡарһа...
Ә бисә, әйтһәң дә нисә,
Өс ҡатта мисәү генә.
Тағанда таяу ғына, ау,
Тайғандә таяу була.
Тәгәйен ер ир-бисәгә
Бүленгән Әлмисаҡтан.
Ошо инде хаҡ Тәғлимәт.
Ирҙәрҙе күтәр, Сәсән!

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Асылдары ябай ғына
Бер ҡараһаң, был тормоштоң.
Донъяларың балҡып китер
Тик һал ғына тырышлыҡ.
Миңә ҡалһа, ирҙәрҙә лә,
Ҡатында ла түгел ғәйеп.
Бахыр ғына, кафыр ғына
Башҡаларға ғәйеп өйөр.
Көсһеҙ генә, мөсһеҙ генә
Һылтаныр гел башҡаларға.
Халыҡ әйтә: ризыҡ төшкәс,
Хужа була ашҡаҙанға...
Тик шулай ҙа һорауым бар
Бына шундай, апай, һиңә:
Ниңә һаман беҙ ярлыбыҙ
Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
"Хитрый ҙа һин, Үлмәсбай",
Тигәйне сәсән Мостай.
Ай-һай, һин дә хәйләкәрһең,
Сәсән ҡустым Көфөбай.
Һүҙгә әүәс был апайҙың
Дөмбөрөн һынап ҡарайым,
Батыр микән, ҡалҡыр микән,
Табырмы яуап яйын,-
Тинеңме, Көфө сәсән?
Һорауың ҡыҫҡа ла, ҡустым,
Яуабы өҫтә ятмай.
Мең дә бер үк булмаһа ла,
Ун кисеҙ бында булмай.
Элек йомаҡ әйтешкәндә
Яуабын табалмаһаҡ,
Баш хәрефен әйт, тиер инек,
Ни икәнен белмәһәк.
Һинең һорауыңдың тәүге
Хәрефенән юҡ файҙа.
Бөгөн башты ял иттерәм.
Бөгөн - йома. Биғәйбә.

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Бөгөн - шәмбе, теге һорау
Һаман ҡала асыҡ килеш.
Был донъяла һәр һорауҙың
Яуаптары булыу тейеш.
Юҡһа, һәр саҡ ҡасабыҙ беҙ
Алға баҫҡан һорауҙарҙан.
Аллаһыға ышанмайса,
Ышанабыҙ юрауҙарға.
Эйе, еңел һорау түгел,
Үҙем дә шым, ҡапыл ғына
Яуап бирә алмаҫ инем,
Көсһеҙ бында аҡыл ғына...
Ысынлап та, был һорауға
Яуап булһын һәр әҙәмдә:
Ниңә һаман беҙ ярлыбыҙ
Йәшәһәк тә бик бай илдә?
Шуға күрә икәүләшеп
Эҙләйек беҙ, йәме, апай?
Бер ҡараһаң, был һорауҙың
Яуаптары үтә ябай...

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Был һорауҙың яуаптары
Ябай, тип әүрәтһән.
Ауыҙың нимә әйткәнде
Үҙең һиң ишетәмһең?
Яуаптар там итәһең.
Яуап эҙләп табайым,
Төбөнә тоҙ һалайым.
Иҫеңдәме, ятлай инек -
Урыҫ байы йөгөндөрһә,
Башҡорт байы яҡтырҙы.
Елкәгә ултыртып алдыҡ
Бахыр ғына кафырҙы.
Ә башҡорт байы - ҡамсылы.
Байлыҡты ястап ятабыҙ,
Үҙебеҙ ярлы һаман.
Хужа булалмайбыҙ һаман
Биш йөҙгә яҡын заман.
Бай илдә йәшәйбеҙ, шөкөр,
Юҡ нәмәнең үҙе юҡ.
Йөҙҙөң тыҡһан һигеҙенә
Өлкән ағай хужа тик.
Өс тигәс тә нимә яҡшы,
Оҫта өләшсе яҡшы,
Тиер инем, берәүгә мул,
Беҙгә тик нүл эләккән.
Бармаҡ аша ҡом шикелле
Байлыҡ китә шул беҙҙән.
Йәнә ике башлы бөркөт
Бер ынтылһа, ике суҡып
Һаман да бит йоҙәтә,
Баштарҙы минрәүләтә.
Бай илдә ярлы булмаҫҡа
Әмәл табыр инек тә...
Бер ҡул менән тотторғаньн
Ҡуш ҡуллап һоҫоп ала.
Тырышырға маташыуҙан
Башҡа ни сара ҡала.
Трибунанан һатҡан аҡыл
Аң-күңелде өтмәй ул.
Донъяларҙы балҡытырға
Ҙур тырышлыҡ етмәй ул.
Ялҡау, сәмһеҙҙе әйтмәйем,
Зарлана, һылтаналар,
Улар ярлы булған өсөн
Ғәйепле тик башҡалар.
Башҡортом, башыңды эшләт,
Баш йоморо бит һинең.
Хужа булырға ваҡыттыр
Байлығына илеңдең.
Тәрилкә ялама, башҡорт,
Кеше ҡалдығын еймә.
Ҡоролтайҙар, өйрәтегеҙ
Хужа булырға ергә.
Уҡытыусы һорауына
Тулы яуап таптыра.
Мине тыңдап, һәле бөтөп,
Ята Көфө аптырап...
Апайыңа тарыма,
Тарыһаң инде - арыма.

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Ай, Йәнһылыу, Йәнһылыу,
Һин - һылыу, мин - нисауа.
Әйткәнеңде тыңлағас,
Башҡа фекерҙәр яуа.
Хоҙай беҙгә фекерҙәрҙе
Яуҙырып ҡына тора.
Тотоп ҡына өлгөр уны
Ун яуапҡа - бер һорау.
Ҡытай әйтә: "Буш мейе -
Иблис оҫтаханаһы".
Һәр бер йортта булһын, тим
Фәҡирҙәр ашханаһы.
"Ҙур бәләнән иҫән ҡалһаң,
Һине ҙур бәхет көтә..."
Тиеп әйтә тағы ҡытай.
Көтөүгә һүң ни етә?
Ошо ике генә миҫал
Күп нәмәгә ишара.
Элек фәҡир булған Ҡытай
Донъяла реванш ала.
Ярлыбыҙ, тип башҡа һымаҡ
Кеше талай алмайбыҙ.
Урлаша ла, мутлаша ла,
Кеше алдай алмайбыҙ.
Ҡалаларҙа эш күп, тиеп
Ауылдарҙы ҡалдырһаҡ...
Беҙҙең ергә хужа булыр
Йомран менән алйырҙан.
Ҡытайҙан тағы әйтем,
Килтереп үтәм һиңә:
"Бәхетһеҙлек үҙенә тип
Асылған йортҡа инә..."

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне**
Ҡытай һөйләгән буш мейе, Көфө,
Беҙ һөйләгән бушлыҡ түгелме?
Буш урынды сүплек итә кеше,
Буш күңел һуң буш тоҡ түгелме?
Буш мейе менән буш күңел
Иблис өсөн ике оҫтахана.
Хужа булып инеп оялай,
Ниндәй генә хаслыҡтар ҡылмай.
Ҙур бәләләрҙән һуң оло бәхет
Көтөүҙәргә ни етә, тип ҡытай
Ҡыҫыр аш - буш өмөт менән һыйлай-
Фәҡиргә ҡыҫыр аш етә, ти, буғай.
Бәләләрҙе сабыр үтеп, бәхет көтөргә
Ҡытай түгел, миңә Ҡөрьән өйрәтә.
Атам ҡытай булмаған,
Ҡытайстанда тыумағас,
Ул тиклемен белмәйем,
Белмәгәс, һөйләмәйем.
Йомран сүрәтендә әрмән
Ергә хужа була бара,
Йортобоҙға тула бара,
Сит - яттарға башҡорт билен
Бөгә бара, бөлә бара.
Ярлылыҡҡа күнә бара,
Өмөтөнән дүнә бара.
Әйтсе, Көфө, әйтсе, сәсән,
Ярлылыҡтан кем сығарыр,
Шар асыҡ бай йортобоҙҙоң
Ишектәрен кем яңыртыр?

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Ҡытайҙарҙы миҫал итеп
Мин юҡҡа килтермәнем.
Зиһенемдә улар әйткән
Мәҡәлгә үткерләнем...
Беҙҙең ҙур бәләбеҙ һаман
Тарихты белмәүебеҙ.
Тарих биргән һабаҡтарҙы
Ҡолаҡҡа элмәүебеҙ.
Үҙ тарихын белгәндәрҙе,
Белеп ғорурланғанды,
Йөрәктәре "Аллам!" тиеп,
Дөп-дөп тибеп торғанды
Еңә алмай дошмандары,
Еңә алмай Дәжжәл дә.
Хоҙай, тиеп йәшәгәнде
Үлтерәлмай әжәл дә.
Ҡытайҙарҙың тарихында
Яҙыуҙар бар шундайын.
Был яҙыуҙар барыбыҙға
Эврикалыр, моғайын!
"Көнбайыштан йүкә билбау
Быуған басирҙар килгән.
Шул басирҙар ҡытайҙарға
Дәүләтен төҙөп биргән..."
Башикули, басир, тиеп
Улар беҙҙе атаған.
Шундай ғәжәп тарихыбыҙ
Барлығын беҙ аңлаһаҡ...
Һин һанаған күренештәр
Йәнһылыу, булмаҫ ине.
Хәҙергебеҙ бәләләргә
Шул тиклем тулмаҫ ине.
"Ишектәрен кем яңыртыр?"
Бик урынлы һорауың.
Шул һорауҙың ҡаршыһында
Һорау булып тороуым...
Бәлки, тарих ишектәрен
Асыу беҙгә кәрәктер?
Халҡыбыҙҙың тәжрибәһе
Йәшәргә лә өйрәтер...

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Аҡылым менән аңлайым,
Һүҙҙәрең хаҡ, сәсәнем.
Уйлап-уйлап, уйылып төшөп,
Уйҙарыма сәсәнем,
Ҡустыҡайым, сәсәнем.
Байбыҙ, шәпбеҙ, алдамайбыҙ,
Белмәгән эшебеҙ юҡ.
Тик тарихты аңға, йәнгә
Еткерер кешебеҙ юҡмы?
Ҡытайҙарға һис һүҙем юҡ -
Аҡылдары ил гиҙә.
Ә һуң башҡорт кемдән кәм,
Ҡасан реванш алыр икән?

**Әйтеште "Киске Өфө"нөң электрон почтаһынан (kiskeufa@ufacom.ru.) Сәриә ҒАРИПОВА күсереп алды.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Өфө ҡалаһында, республикабыҙҙың иң төп юғары белем биреү усағы булған Башҡорт дәүләт университетында, ошо көндәрҙә донъя кимәлендәге мәртәбәле, матур сара - Башҡорт Википедияһының 10 йыллығына арналған "Вики-Һабантуй" һәм халыҡ-ара фәнни-ғәмәли кәңәшмә уҙҙы. Кәңәшмәгә Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, төрлө ҡалаларынан, сит илдәрҙән Википедияның әүҙем ирекмәндәре килде. Улар коллегалары менән төрлө темаларға фекер алышты, Башҡорт Википедияһы эшмәкәрлегенә байҡау яһаны, был сайтҡа яҙыша башларға теләүселәрҙе мәҡәләләр яҙыу тәртибе, талаптары менән таныштырҙы.**

# БАШҠОРТ ВИКИПЕДИЯҺЫНДА...

ВикипедиЯ
*Ирекле энциклопедия*

## үҙ эҙеңде ҡалдыр!

Кәңәшмәнең пленар өлөшөн шағирә, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡова башҡорт һәм рус телдәрендәге сығышы менән асты. Алғараҡ китеп булһа ла, шуны әйтергә кәрәк - кәңәшмәлә ҡатнашыусы күп кенә сит ил, Рәсәй төбәктәренән килгән ҡунаҡтар башҡорт телен һәйбәт аңлай булып сыҡты. Мәҫәлән, Иерусалим ҡалаһынан килгән Әмир Аарони үҙ сығышында башҡорт тексын тәржемәһеҙ ҙә аңлауы, Украинанан Виктор Семенюк хатта башҡорт телендә бер-нисә мәҡәлә яҙыуы тураһында белдереп, һоҡландырҙы. Саха (Яҡустан) Республикаһынан килгән Николай Павловтың саха һәм башҡорт телдәрендәге уртаҡ һүҙҙәрҙе һанап ишеттереүе лә күңелле булды. Ғөмүмән, сарала өс сит ил дәүләтенән - Польша, Израиль һәм Украинанан, Рәсәйҙең тиҫтәгә яҡын төбәгенән Википедия ирекмәндәре ҡатнашыуы һәм уларҙың барыһының да аҙмы-күпме башҡорт телен белеүе, аңлауы үҙе үк беҙҙең башҡорт ирекмәндәренең фиҙаҡәрлеге тураһында һөйләй.

"Википедия"ның башҡорт бүлегенең тарихы менән таныштырып, унын иң әүҙем мөхәррирҙәренең береһе, "бей" статуслы ирекмән Рөстәм Нуриев түбәндәге мәғлүмәттәр килтереп: "Википедия"ның башҡорт бүлегендә "Башҡортостан" исеме аҫтында беренсе мәҡәлә 2005 йылдың 16 апрелендә исемһеҙ автор тарафынан яҙыла. Шул ваҡыттан алып башҡортса "Википедия"ла 10 меңдән ашыу ирекмән теркәлә һәм уның үҫешенә ярайһы уҡ өлөш индерә. 446 мең тапҡыр яңы мәғлүмәт өҫтәлә, йә булмаһа иҫкергән мәғлүмәт яңыртыла. "Википедия"ның башҡортса бүлеге - донъяла иң йылдам үҫешеүсе ойошма", - тине.

Пленар бүлек тамамланғас, конференцияла ҡатнашыусылар ике секцияға бүленеп, беренһендә - саха, чечен, татар, украин, себер татарҙары, поляк телдәрендәге "Википедия"ның хәҙерге хәле һәм үҫеш юлдары тураһында фекер алышһа, икенсе секцияла башҡорт йәмәғәтселеге, башҡорт ирекмәндәре үҙ-ара фекер алышты. Был секцияла интернет селтәрҙәрендә башҡорт төркөмдәренә анализ яһалды, уларҙы үҫтереү, артабан байытыу, мәғлүмәттәрҙең сифатын яҡшыртыу тураһында фекер алышынды. Был бүлектә уҡытыусылар интернет мөмкинлектәрен дәрестәрҙә ҡулланыу тәжрибәләре менән дә уртаҡлашты. Израилдан килгән программасы Әмир Аарони "Википедия"ға мәҡәлә ултыртыу тәртибен эҙмә-эҙлекле рәүештә күрһәтте.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**"Википедия"ның башҡорт бүлеге ойошторолоуға 10 йыл тулыуға арналған "Вики-Һабантуй" башҡорт теленә лә заман технологиялары үтеп инә барыуын, ошо йүнәлештә әүҙем эшләүсе ирекмәндәребеҙ, энтузиастарыбыҙ барлығын, уларҙың бик шәп ойоштороусы икәнлеген тағы бер тапҡыр иҫбат итте. Мәҡәләбеҙҙе Фирүзә Абдуллинаның ошо сараға арнап яҙған шиғыр юлдары менән тамамлағы килә.**

**...Ил яҙмышы һине борсой икән,**
**Телең өсөн әгәр көйөнһәң,**
**Үҙ халҡыңдың һәр бер ҡаҙанышы,**
**Уңыштары өсөн һөйөнһәң -**
**Һинең урын бында! Рәхим итеп,**
**Ҡалдыр әле һин дә эҙеңде!**
**Халҡың, илең өсөн кәрәк итеп**
**Тойорһоң һин шул саҡ үҙеңде...**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

*БАЙРАМ САРАЛАРЫ*

# ФОНТАНДАР ҠАРАРҒА КИЛЕГЕҘ!

**1 майҙа баш ҡалала фонтандар эшләй башлаясаҡ. Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы көнөндә Салауат Юлаев исемендәге майҙанда фонтан аттырыу тантанаһы ҙур байрам программаһының бер өлөшө буласаҡ.**

Был көндө унда аниматорҙар, йырсылар, ижади коллективтар, Өфө дәүләт сәнғәт академияһының симфоник оркестры сығыш яһаясаҡ. "Һөнәрселәр ҡалаһы" тип аталған күргәҙмә-йәрминкә эшләсәйәк. Байрам 13 сәғәттә башлана.

Ленин исемендәге паркта шулай уҡ фонтандарҙы аттырыу айҡанлы ижади программа ойоштороу ҡаралған, уны "Йәшлек" балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр клубтары берләшмәләре педагогтары һәм тәрбиәләнеүселәре ойоштора.

Дим районында "Матрица" магазины янында, "Орион" балалар ижады йорто артындағы скверҙа, Әкиәттәр аллеяһында фонтандар эшләй башлаясаҡ. Саралар сәғәт 12-лә башлана. Ошо уҡ көндө Мостай Кәрим, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге скверҙарҙа, Республика йорто эргәһендә, "Искра", "Родина" кинотеатрҙары алдында, ҡала Никах йорто, "Ихлас" магазины, 284-се, 288-289-сы кварталдар скверҙарында фонтандар асыласаҡ. Йәштәр һарайы алдындағы фонтан 30 апрелдә, сәғәт 12-лә асыла.

Ҡала хужалығы хеҙмәтләндереүендә 15 фонтан бар. Фонтандар көн һайын сүп-сарҙан таҙартыла, һыу ике айға бер алыштырыла.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Май (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (15) дүшәмбе | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 5 (16) шишәмбе | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 6 (17) шаршамбы | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 7 (18) кесе йома | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 8 (19) йома | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:30 | 21:00 | 22:30 |
| 9 (20) шәмбе | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:32 | 21:02 | 22:32 |
| 10 (21) йәкшәмбе | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

*ИҒЛАН*

Йылайыр районы Солтантимер ауылында мәсет төҙөлөп бөтөү алдында. Уны сафҡа индереү өсөн яҡташтарҙың бер аҙ матди ярҙам итеүе кәрәк. **Ауыл мәсете имам-хатибы Һиҙиәт Сараевҡа мөрәжәғәт итергә: 8-927-307-58-81.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ЯҢЫ ДРАМАЛА ҺУҒЫШ ҺАҒЫШЫ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 95-се юбилей миҙгелен ике премьера менән тамамлаясаҡ. Мөҙәрис Багаевтың "Ике төш" драмаһы һәм Эсфир Йәһүҙиндың "Йүгер, Харис, йүгер" комедияһы ошо көндәрҙә тамашасы хөкөмөнә сығарыласаҡ. Был турала журналистар менән осрашыуҙа театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов белдерҙе.**

"Ике төш" драмаһы - Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнала. Драманың режиссеры Олег Закир улы Ханов әйтеүенсә, һуғыш осорон һүрәтләгән әҫәрҙәр башҡорт драматургияһында байтаҡ булһа ла, ошо һуғыштағы ҡатын-ҡыҙға арналған әҫәрҙәр юҡ кимәлендә. Илдә барған бөтөн үҙгәрештәр - аслыҡты ла, золом йылдарын да, һуғыш ауырлыҡтарын да, ирен, өс улын, өс ҡыҙын юғалтыу ҡайғыһын үҙ йөрәге аша үткәргән бер ҡатын-ҡыҙ яҙмышы аша шул осорҙа йәшәгән бар гүзәл заттарҙың да тормошо һүрәтләнә был драмала. Шуға ла уға ҙур теләк менән тотондом, ти режиссер:

-Был тема минең өсөн бик тетрәндергес. Хәйер, һуғыш ҡағылмаған берәй кеше бармы икән ул илебеҙҙә? Был трагедияның сағылышы һәр кемдә бар. Һуғыш осоронда йәшәүселәрҙең илһөйәрлеге, рух ныҡлығы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һуғыштан һуң да ирҙәренең хәтеренә тоғро ҡалыуы, киләсәккә ышаныстары тураһында уйлағандан һуң, уларға һәйкәл ҡуйырға ине, тигән уй тыуа күңелдә. Бөгөн ватансылыҡ төшөнсәһенең сиктәре юйыла барған мәлдә йәшәйбеҙ, ҡиммәттәр үҙгәрә, тыныс тормоштоң ҡәҙерен онота төшкәндәр бар арабыҙҙа. Был драмалағы ҡатын-ҡыҙ шул замандың тере тарихы, бөгөнгө заман кешеһенә лә иҫкәртеү булып яңғыраһын ине.

"Ике төш" драмаһының премьераһы 9 май байрамы алдынан буласаҡ. Байрам алдынан театр коллективы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы шағирҙарҙың шиғырҙары буйынса әҙерләгән "Ил яҙмышы - ирҙәр иңендә" тип аталған әҙәби-музыкаль тамашаны ла ҡабатлап күрһәтәсәк. Проекттың авторы - Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев.

Икенсе премьера "Йүгер, Харис, йүгер" тип атала. Комедияны сәхнәгә Алмас Әмиров ҡуя. "Комедия төрлө була, беҙ иһә ябай ғына сюжетлы ҡаласа комедия әҙерләйбеҙ. Әммә ул тәүге ҡарашҡа ғына ябай. Комедияла характерҙар ҡыҙыҡлы, шуға ла артистарға йөҙөп йөрөп эшләргә мөмкинлек бар", - ти Алмас Харис улы.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 май "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

**6 май "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә. Ғаязов), драма. Башлана 12.00

**7 май "Ике төш"** (М. Багаев), драма

**8 май "Ил яҙмышы - ирҙәр иңендә"** әҙәби-музыкаль тамаша

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 май "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыуҙар. Башлана 15.00

**6 май "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия. Башлана 12.00, 17.00

**7 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 11.00, 15.00

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 май "Ә таңдар бында тыныс..."** (Б. Васильев), драма. Башлана 16.00

*✓ Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.*

*(Ҡытай халыҡ мәҡәле).*



ӘЙТЕШ

# МУЙЫН ТҮГЕЛ, БАШ БУЛЫР САҠ ЕТКӘН...

**Айытҡужа һәм Өшөрә сәсәндәрҙең гәзитебеҙҙең 14-се һанында башланған шиғри әйтешенең аҙағын тәҡдим итәбеҙ:**

**Айытҡужаның Өшөрәгә әйткәне:**

Асыуҙан түгел әйткәнем,
Яңылышамдыр, бәлкем.
Яҙып ебәрәйем әле
Уйҙарымды бер шәлкем.
Ҡояштан ҡасыусы бар,
Ашҡа таш атыусы бар.
Береһе лә түгелмен,
Кителмәһен күңелең.
Сәүиттә һағынаһың,
Ҡыҙылға табынаһың.
Ул ваҡыт күптән мәйет,
Яҙам әле бер бәйет.
Етәксебеҙ - партия,
Ил - Советтар Союзы.
Етмеш тә йылдан ашыу,
Йырҙы халыҡ ауыҙын.
Яһалма батырҙар иле,
Яһалма татыу халыҡ.
Вәғәҙәләр, буш ҡыуыҡтар,
Барыһын да татыныҡ.
Урыҫтар ағай булдылар,
Ҡалған халыҡ - ҡустылар.
Ҡустыларҙы үҙ телендә
Һөйләшмәҫкә ҡуштылар.
Ленинды Алла һананыҡ,
Партия һүҙе - иман.
Аңыбыҙҙы томалаған,
Ағыулы зәһәр томан.

Хыялдары иҫ китмәле,
Барып сыҡһа уларса.
Киләсәктә бөтә донъя
Һөйләшәсәк урыҫса.
Аҡты ҡара тип әйттеләр,
Ҡара беҙгә аҡ ине.
Алдау намыҫҡа тиңләнде,
Азат донъя ят ине.

Элек беҙ кҫсмә ҡәбилә,
"Телһеҙ башҡорттар" инек.
Мортазин һәм Шәйехзада,
Зәки ҙә булды "дошман".
Уларҙы шулай атарға
Советтар иле ҡушҡан.
Матур лозунгылар тыңлап,
Халыҡ булды ҡоллоҡта.
Үткәндәрҙе һағынһаҡ та,
Йәшәмәнек муллыҡта.
Кешеләргә әләштеләр
Азатлыҡты мыҫҡаллап.
Стенала кәләп торҙо
Ленин бабай мыҫҡыллап.
Кәтеп алдыҡ съездарҙы,
Партияның аҙанын.
Ялғанды иман иткәнбеҙ,
Күрҙек инде аҙағын.
Йәштәрҙе үҙенә тартҡан
Секталар ҙа ишәйә.
Мөфтиәт һүҙ ни башҡара?
Быңа һорау, кинәйә.
Халыҡ менән булғандарын
Күргәнебеҙ юҡ әле.
Әллә инде Өфөләге
Мәсетен дә бикләүле.
Һәр кемдең үҙ ғаләме,
Уйландырған әмәле.
Уйлағанымды яҙҙым,
Һанама мине аҙғын.
Коммунист булғанһыңдыр...
Һине түгел, системаны
Яратмауҙан яҙылды.

**Өшөрәнең Айытҡужаға әйткәне:**

Коммунист та булдым, ҡустым, йәшермәйем,
Мин уставты боҙмай ғына йәшәгәйнем,
Һәр замандың үҙ ҡануны, үҙгә заңы,
Төп ҡимммәттәр шул уҡ бит ул, ҡараш яңы.
Ҡанбабалар һүҙе килә ҡанзамандан,
Әле булһа шул һүҙҙәре тап-тамандан:
Заман түгел, әҙәм яман тигәндәр бит,
Нәфсе шайтан боҙа һаман, тигәндәр бит.
Сәүиттә лә булды бик күп яҡшы яҡтар,
Әтә булды, булып торҙо йүнле заттар,
Бөгөнгөгә күҙең асып, яҡшылап баҡ,
Барыһы ла ҡарамы, йә барыһы - аҡ?!
Тәүлегендең һәр сәғәте ҡояшмы ни,
Төн булмаһын тиеп күктә болашмы ни,
Замандың да ана шулай аҡ яғы бар,
Ғәҙелһеҙлек менән рәттән хаҡ яғы бар.
Утыҙ ете атайымды етем иткән,
Ике яҡтан олатайҙар башы киткән,
Сталин андып йөрөгәнме өйҙән-өйгә,
Ошаҡ киткән - ғәйеп юғын белгән көйгә.
Тик заманды яманларға юҡ та уйым,
Кәрәк икән баш та булдым, булдым муйын,
Төпкөлдә лә мәктәп бөттөк, кеше булдыҡ,
Енел генә бирелмәне, әммә ундыҡ.
Сәүит тиеп Алланы ла онотманыҡ,
Юлдан яҙып бөтмәгәйне көллө халыҡ,
Бөгөн быңа бер-бер артлы мәсет ҡалҡа,
Тик мәсеткә йөрөгән әҙ, күңел ялҡау.
Мөфтөйҙәрҙән ғәйеп эҙләп йөрөгәнсе
Балаһына һәр кем иман һеңдерһәсе.
Зар-зар илап, мин дә, туған, теҙә алам,
Тәңкитләргә хәбәр күп ул, һуҙа алам,
Тик һанауҙан хәл шәбәйеп китерме һуң,
Ауырлыҡтар үҙ-үҙенән бөтөрмө һуң?
Әле быңда әйтелмәгән күпме нәмә,
Тығын тығып бөтөп булмай - тишек кәмә.
Яман ғәҙәт - гел ситтәрҙе минауатлау,
Үҙебеҙҙә ғәйеп күрмәй, яҡлау- аҡлау.
Үҙ ер, үҙ тел, үҙ ҡан, үҙ дин - терәгебеҙ
Шулар өсөн янып типһен йөрәгебеҙ,
Хеҙмәт итеп талмаһын да беләгебеҙ.
Үҙебеҙгә лә бәйле ул күрәһебеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өшөрә менән Айытҡужа сәсәндәрҙең әйтеше ошо урында тамам. Уҡып барғандар әйтеш мәйелен тотоп алғандыр: муйын түгел, баш булыр саҡ еткән, тигәндә, ҡатын-ҡыҙҙың һүҙен өҫкә сығарыуҙы күҙ уңында тотманы Өшөрә, ә Айытҡужаға, ир-азамат вәкиле буларак:**

-Ысын әйтәм, баш булырға теләмәйбеҙ,
Һүҙҙе юҡҡа иләк тотоп иләмәйбеҙ,
Бәлки, берәй ир табылыр, гәрә килеп,
Ил уятыр һүҙен әйтер, кәрә килеп, - тип тә;
- Ҡатын тиһәң, ҡатын бит ул - инә ҡорт,
Инә ҡортһоҙ һүнә күсе, һүнә йорт,
Бүлешмәйек, һин - ир, тиеп, һин - ҡатын,
Бергәләшеп уйлашайыҡ ил хаҡын, - тип тә;
- Үҙ ер, үҙ тел, үҙ ҡан, үҙ дин - терәгебеҙ
Шулар өсөн янып типһен йөрәгебеҙ,
Хеҙмәт итеп талмаһын да беләгебеҙ.

Үҙебеҙгә лә бәйле ул күрәһебеҙ, **- тип тә, әйтештең төп фекерен, мәҡсатын, хәҡикәти һүҙен ҡат-ҡат раҫларға тырышты. Беҙ артабан был әйтештең гәзит уҡыусыларҙа ниндәй фекерҙәр уятыуын белергә теләр инек. Әйткәндәй, әлегә "битлек"тәрҙе асмайбыҙ, йәғни Өшөрә менән Айытҡужа сәсәндәрҙең ысын исем-шәрифе конкурсыбыҙҙың аҙағында аталасаҡ икәнен дә белгертеп ҡуйыйыҡ.**

**Хәҙер инде әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә (Иғтибар! Гәзитебеҙҙең был һанында уҡ 14-се биттә яңы әйтеш ҡороусылар менән таныша алаһығыҙ).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ-ҙәренә әйәреп, донъяуи хә-ҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЛЫ БАРҘЫҢ - УРЫНЫ,

## ҡыҙы барҙың - кәҙере

Яман күҙ хайуанды ҡаҙанға керетер, яман һүҙ әҙәмде ҡәбергә керетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙе уҡырға һәләтле булмаған башҡа-ларҙы уҡытыр.

**(Оскар Уайльд).**

Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер маҡта-ныырға яратҡан әҙәм үҙенең дуҫтары алдын-да, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ һәм бер һүҙ әйтмәйенсә лә теләһә кем менән уртаҡ тел таба алам, тип ыҫҡындырған. Дуҫтары уның был ғәжәйеп һәләтлеген тикшерергә, үҙ күҙҙәре менән күрергә ҡарар иткән. Быңа улар бергәләп юл буйлап атлап киләләр. Ҡаршыларына бер көтөүсе осраған. Дуҫта-рының береһе маҡтансыҡҡа:"Һин ошо көтөүсе менән уртаҡ тел табып ҡара әле", - тигән. Бер һүҙ ҙә әйтеп тормайынса, маҡ-тансыҡ көтөүсе эргәһендә туҡтап, уға уҡ-талған. Ҡулын күтәреп, көтөүсегә һуҡ бар-мағын күрһәткән. Көтөүсе уға яуап итеп ике бармағын өҫкә күтәргән. Шунан маҡтан-сыҡ бер ҡулындағы бармаҡтарын йәйеп ебәреп, көтөүсегә устарын йәйеп күрһәткән. Уға яуап итеп көтөүсе йоҙроҡ төйнәгән.**

**- Әйттем бит мин һеҙгә! - тип ҡысҡырып ебәргән маҡтансыҡ. - Үҙегеҙ күреп тораһы-ғыҙ, мин көтөүсе менән уртаҡ тел таптым! Беҙ бер-беребеҙҙе аңланыҡ. Ҡулымды кү-тәреп, бер бармаҡ күрһәткәндә, көтөүсенән: "Һин Хоҙайҙың берҙән-бер булыуына ыша-наһыңмы?"- тип һораным. Көтөүсе миңә ике бармағын күрһәтте һәм: "Эйе, Хоҙай-ҙың берҙән-бер булыуын һәм уның бәйғәм-бәре Мөхәммәт икәнен таныйым", - тине. Устарымды күрһәтеп, мин уға: "Ә һин кө-нөнә биш ваҡыт намаҙ уҡырға кәрәк, тигән талапты үтәйһеңме?" - тип һораным. Ул миңә йоҙроҡҡа төйөлгән ҡулын күрһәтеп: "Эйе, Ислам ҡанундарын быңа ошолай йо-ҙроҡҡа төйнәлгән һымаҡ ныҡлы тотам", - тип әйтте...**

**Маҡтансыҡтың дуҫтары уның был һә-ләтлегенә һис кенә лә шикләнмәҫтән, көтө-үсене тикшерергә була һәм уға һорау бирә.**

**"Эйе, мин был кешене бик яҡшы аңла-ным, - ти көтөүсе. - Һуҡ бармағын күрһәт-кәндә ул минең күҙемде соҡорға теләгәнен аңланым. Шуға ла мин, ә мин һинең ике күҙеңде лә соҡоясаҡмын, тип, ике бармағымды күрһәттем. Ул, моғайын, асыулан-ғандыр һәм минең яңағыма сабырға теләп, миңә усын күрһәткәндер. Шунан иһә мин, ә мин ошо йоҙроҡтарым менән башыңды төйәсәкмен, тип, уға йоҙроҡ төйнәнем. Эйе, беҙ бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1992